## КОМАНДИР ТАУЫ, КОМАНДИР ШИШМӘҺЕ

Был хәл граждандар һуғышы осоронда булған. Аҡтарҙы ҡыуып килгән бер отряд ҡыҙылармеецтәр Тирмән ауылын азат итәләр. Аҡтарҙы бер аҙ эҙәрләй барғандан һуң, ауылдан йыраҡ түгел бер тауҙа ялға туҡтағандар. Ошо тау аҫтында йылға бар. Әлек унан һыу алмағандар. Сөнки йылға бик бысраҡ була. Командир бер нисә һалдаты менән шишмә табырға тырыша. Таба алмай. Шунан ошо тау аҫтында бер аҙ ҡаҙғандар икән, урғылып һыу сыға башлаған. Ҡыҙылдар шул шишмә янында бер көндәй ял итеп киткәндәр. Улар киткәс, халыҡ та ошо һыуҙы эсә башлаған.

Ауыл халҡы аҡтарҙы ауылдан ҡыуып сығарған батыр ҡыҙылдарҙы онотмаған. Улар ҡаҙыған һалҡын шишмәне Командир шишмәһе тип йөрөтә башлаған. Командир туҡталған тау — Командир тауы тип аталған.

## ХӘСӘН ҠАСҠЫН

Һайран ауылында тыуып-үҫкән ул егет. Ауылдаштары уны ҡурайсы Хәсән тип йөрөткәндәр. Ул да, тиҫтерҙәре кеүек үк, татыу ғына ғаилә ҡороп, донъя көткән.

Аҡтар заманында улар, Зөлфәкәр менән икәүһе, байҙарҙың атын өйәрләп меңгәндәр ҙә ҡыҙылдар яғына сапҡандар. Кәлмәй, Бөрйән яҡтарында иптәштәрен таба алмайынса, улар оҙаҡ ҡына ҡасып йөрөгәндәр. Көҙгә табан Нөгөш буйҙарын ташлап киткәндәр. Ә Ағиҙел йылғаһын кисеп сыҡҡан ваҡытта тотолғандар.

Бай-муллалар уларға «ат ҡарағы» исемен тағып, ауылдан-ауылға һуҡтырып йөрөткәндәр. Әҙәм төҫө лә ҡалмаған, хәлһеҙләнгән Хәсәнде Һайран ауылына килтереп, баҙар майҙанына атырға ҡуйғандар.

— Үлем алдынан, бәлки, әйтә торған һүҙе барҙыр,— тигән шунда берәү.

— Булһа, әйтһен.

Хәсән баҙар майҙанын уратып алған халыҡҡа ҡараған да шунда үҙенә көс ингән һымаҡ хис иткән. Бер аҙ уйланып торғандан һуң:

— Әгәр рөхсәт булһа, бер йырлар инем,— тигән.

— Һай, ләғнәт һуҡҡан нәмә,— тип ҡыҙып киткән Аллабирҙе бай, был һүҙҙе ишеткәс,—яҡшы кеше үлем алдынан иман килтерә торғайны. Был оятһыҙ, йырларға рөхсәт һорап тора бит әле. Бик теләгәс, йырлаһын әйҙә!

Шул саҡта, ни булырын көтөп, баҙарҙағы халыҡ та тынып ҡалған. Хәсән өнһеҙ ҡалған халыҡҡа ҡарап торған да бөтә көсөн йыйып йырлап ебәргән (Сөләймән бабай шунда һул ҡулын ҡолағы тапҡырына күтәрҙе, йырлағанда, ул һәр ваҡыт шулай итә):

Бейек: кеңә тауҙың башында ағас,
Күберәге уның ҡыяғыраҡ.
Ҡайҙа ғына барһаң да, берләр үк ҡояш,
Йәш балалар ҡалһа, ҡыйыныраҡ.
Түңәрәккәй күлде баҫып уҡ үҫкән



Томбойоҡ икән дә уның үләне.
Был нужаҡайҙарҙы ла күргәнсе,
Афызал * икән дә ирҙәрҙең үлгәне.

Шул саҡта, ошо ғына һүҙҙәрҙе көтөп торғандай, атыу тауышы яңғыраған. Әле генә башын күтәреп йырлап торған ғорур егет ергә бөгөлөп төшкән.

## СӘҒӘТЛЕ ҠАРАҒАЙ

Граждандар һуғышының еле беҙҙең яҡтарға ла тейеп уҙған. Кесе Ыйыҡтан [1] саҡ ҡына алыҫ булған Леуза [2] ауылында фетнә күтәрелә. Уларҙың оборона һыҙығы Кесе Ыйыҡтан үткән.

Фетнәне баҫтырыр өсөн, бер ҡыҙыл отряд беҙҙең ауыл аша юл ала. Хәҙер Ғибай соҡоро [3], тип йөрөтөлгән соҡорҙа ҡыҙылдар туҡтайҙар ҙа һөжүмгә әҙерләнәләр. Шунда командир бер йыуан ҡарағайҙы соҡоп сәғәт эшләп ҡуйған. Уртаға ҡағылған таяҡтың күләгәһе — «стрелка» атака башланыу ваҡытын күрһәткән. «Стрелка» билдәләнгән урынға барып етеүе була — тауыш-тынһыҙ ғына отряд һөжүмгә ташлана. Атака бик уңышлы булған.

Шул урын хәҙер Сәғәтле ҡарағай тип йөрөтөлә.

## АТЛЫ ТИРӘК

Үтәгән ауылында, Ағиҙел аръяғында, бер бейек тирәк бар. Борон уны Аҡлы тирәк тип йөрөткәндәр. Граждандар һуғышынан аҙаҡ Атлы тирәк тигән исем алған. Уның тарихе былай. Ошо урында ҡыҙылдар менән аҡтар араһында ҡаты һуғыш була. Аҡтар һан яғынан күп булһа ла, ҡыҙылдар уларға бирешмәй ҙә, бирелмәй ҙә. Ике яҡтан да бик күп һуғышсы үлә. Атыша торғас, ҡыҙылдар шымып ҡала. Патрондары бөттө ҡыҙылдарҙың, тип аҡтар, ҡыуанышып, атакаға ташлана. Ҡыҙылдарҙың бер нисә һуғышсыһы ғына иҫән ҡалған була. Аҡтар етеп килгәндә генә, һуңғы пуляләрен дә дошмандарына ебәрәләр. Асыуҙары ҡабарған аҡтар уларҙы терелэй тотоп алып, үстәре ҡапғансы туҡмайҙар. Төп көстәрҙең ҡайҙалығын һорап, тағы ыҙалаталар. Ҡыҙылдар, теш ҡыҫып, ныҡ торалар, сер сисмәйҙәр. Шунан һуң аҡылдарынан шашырҙай булып йәндәре көйгән аҡтар уларҙы Аҡлы тирәк янына килтерәләр ҙә ҡайһыныһын аҫалар, ҡайһыныһын терелэй ҡаҙаҡлап китәләр... Аҡтар киткәс, тирәк төбөндә, кешнәй-кешнәй сапсынып, эйәрле ат йөрөүен күреүселәр булған. Ул язаланған ҡыҙылармеецтәрҙең береһе менеп йөрөгән ат булған имеш ти торғайнылар. Ана шунан алып Аҡлы тирәк Атлы тирәк тигән исем ала.

Атлы тирәк әле лә шул көндәрҙең эҙен һаҡлай. Унда ҡыҙылармеецтәрҙе ҡаҙаҡлаған тимер сөйҙәрҙе әле лә күрергә була. Ә яҡын тирәлә, Үле Иҙел тирәләрендә, патрондар, штыктар, ҡылыстар табыла тора. Уларҙы мәктәп уҡыусылары үҙҙәренең музейҙәренә тапшыра.

## ҠАНТҮБӘ

Ҡантүбә аҫтында киң туғайҙар, билдән кирә үләнле болондар башлана. Был тирәләрҙә башҡорттар ғүмер баҡый мал ҡыуып, бейә бәйләп, ҡымыҙ бешеп, еткән йылды етенеп, етмәгәндә — шешенеп, көн иткәндәр.

Йылдар үткән. Был тирәләргә лә Октябрь дауылы килеп еткән. Тик шатлыҡлы хәбәрҙән һуң күп тә үтмәй, Дутов атаман килә тигән һүҙ ишетелә. Тиккә генә һүҙ сыҡмай.

Ҡыҙыу июнь көндәренең береһендә ауыл ситенән геүләп ҡыҙылдар үтә. Сафтары бик һирәк була уларҙың. Сигенеүҙәренән туҡтап, ауыл артындағы тау түбәһендә ныҡыналар.

Көн төшкөлөккә ауғанда, аҡтар яҡынлаша. Улар котоу өйөрө кеүек күп була. Тау түбәһендә урынлашҡан ҡыҙылдарға көслә ут асалар. Улар ҙа тик ятмай. Аяуһыҙ алыш башлана. Аҡтар һаман ағыла ла ағыла. Ҡан күп түгелә. Әле тегендә, әле бында яралылар ҡысҡырыуы, һыу һораған тауыштар ауылға уҡ ишетелеп тора.

Һуғыш туҡтағас, бындағы мәхшәр һуш китерлек була: бөтә ер ҡан менән йыуылған, ҡайҙа ҡарама — мәйет, ти. Шунан һуң был түбәне халыҡ Ҡантүбә тип атай.

## ЯРАҺАҘ

Граждандар һуғышы ваҡытында булған был хәл.

Аҡтар менән һуғышҡан саҡта, ҡыҙылдар бик ашығыс сигенгәндәр. Яралыларҙы алып китеүе ҡыйын булғас, уларҙы бер ҡартҡа ҡалдырғандар.

Иманғол менән Ҡоҙаш араһында ҙур бер һаҙ бар. Был һаҙ бик ҡурҡыныс, батҡыл булған. Бында мал-тыуар ҙа, кешеләр ҙә батып үлер булған. Әлеге ҡарт яралы һалдаттарҙы үҙе генә белгән бер юлдан һаҙ эсенә алып ингән. Аҡтар киткәнсе, уларҙы шунда аҙыраҡ тотмаҡ булған. Тик уның был эшен дошмандар һиҙеп ҡалған. Ләкин улар һаҙға үтеү юлын белмәгәндәр. Шуға һаҙ тирәләй һаҡсылар ҡуйып, ҡартты аңдый башлағандар. Ул-былды һиҙмәгән ҡарт бер таҡҡыр һаҙҙан сыға. Аҡтар уны шунда уҡ тотоп алалар. Ҡыҙылдарҙың ҡайҙалығын һорашалар. Ҡарт әйтмәгән. Шунан уны язалап үлтергәндәр.

Үҙҙәре генә ҡалған яралы ҡыҙылдар, теге ҡарт килмәгәс, һаҙҙан сығыу юлын эҙләп ҡарағандар, ләкин таба алмағандар. Шунан һаҙ өҫтөнән күпер һалып сыҡмаҡ булғандар. Шунда уларҙың барыһы ла батып үлгән.

Яралы һалдаттар батҡанға һаҙҙы Яралы һалдат һаҙы тип йөрөтә башлағандар. Тора-килә ҡыҫҡарып, уның исеме Яраһаҙға ҡалған.



## КОМИССАР КҮПЕРЕ

Граждандар һуғышы ваҡытында Күсей ауылынан да аҡтар ҡыуып сығарыла. Ләкин ул бандиттәрҙән унда-бында ҡасып-боҫоп, йәшеренеп ятып ҡалыусылар ҙа була. Шул йәшеренгән урындарынан сығып, улар активистәрҙе, коммунистәрҙе үлтереп йөрөр булғандар. Бер төркөм аҡ бандит Күсей күпере аҫтында ятҡан. Күперҙән ҡыҙылдар үтеп киткәнсә былар баштарын да күтәрмәгәндәр. Тора биргәсерәк ҡараһалар, йәнә берәү килә, ти. Килеп етеүе була, уны аталар ҙа ҡасалар. Ә ул комиссар булған була. Күсей күперениңә Комиссар күпере тип йөрөтөлә, тиһәң, уның тарихе бына шулай ул, балаҡай.

## ХАЛЫҠ ДОШМАНДАРЫНА ҠАРШЫ КӨРӘШ ҺӘМ КОЛХОЗЛАШЫУ

### КУЛАК ВОССТАНИЕҺЕН БАҪТЫРЫРҒА БАРҒАНДА

Революциянан һуң Иглин районындағы Новотроицк ауылында латыш революционере Август Бром[1] тарафынан ҡораллы боевой дружина ойошторола. Дружина фронтовиктәр менән ауыл ярлыларынан торған. Ошо тирә ауыл кулактары восстание ойоштороп, дружинаны баҫып ала. Дружина начальнигы Август Бромды, уның иң терәкле кешеләрен — бөтәһе туғыҙ кешене ҡулға алып, йыртҡыстарса үлтерәләр.

Минең хәтеремдә ҡалғанса, 1918 йылдың 18 июне ине. Беҙҙең ҡыҙыл гвардия часенән ҡырҡ кеше восстаниене баҫтырыуға барҙы. Ике вагонлы паровоз беҙҙе Өфөнән кулактар восстаниеһенең ояһы булған Новотроицк ауылына бик ашығыс алып барҙы.

Сыуаш-Ҡыбау ауылына еткәс, беҙ был ауылдың осонан сығып барған ике йөҙләгән ылаулы халыҡ күрҙек. Комиссар (ҡыҙғаныска ҡаршы, фамилияһын онотҡанмын) машинискә паровозды туҡтатырға ҡушты. Миңә, тағы дүрт иптәшкә шул ылаулыларҙың кем булыуын, ҡайҙа барғанын, нимә эшләп йөрөүҙәрен белергә бойороҡ бирелде. Бик тиҙ генә барып, ылаулыларҙы туҡтаттыҡ. Ҡалғандарына бер ҡайҙа ла китмәҫкә ҡушып, бер нисәһен комиссар янына алып килдек.

Ылаусылар былай тинеләр:

— Новотроицкийҙә ҙур ваҡиға булды. Ундағы ҡоралды боевой дружинаны ҡулға алып, уның ағзаларынан туғыҙ кешене үлтерҙеләр. Ауылдарҙа хәҙер ҡурҡыныс хәбәрҙәр ҡуйырҙы. Халыҡты ошо күтәрелешкә ҡушылырға өндәйҙәр, ҡыҙыл гвардияның ут асыуы менән ҡурҡыталар. Беҙ Таутөмән ауылынан, Таутөмәнгә яҡын ауылдарҙан йыйылған кешеләрбеҙ. Беҙ шул янауҙарҙан ҡурҡып, Яңы Ҡыбау ауылына ҡасып китеп барабыҙ. Новотроицк хәҙер һуғыш хәлендә. Унда тирә-яҡ сауҙагәрҙәре, байҙары тупланып, үҙҙәре яғына әүгән халыҡ менән большевиктәргә ҡаршы фронт тоталар. Уларҙа ҡоралдар бар, ләкин күп түгел. Ауыл һайын, урам һайын, өй һайын йөрөп, ҡуян мылтыҡтары йыйҙылар. Салғы, һәнәк, балта кеүек ҡоралдарҙы ла ҡалдырманылар.

Беҙҙең комиссар был ылаусыларҙан үҙенә кәрәген һорашып алды. Ләкин уларҙы ҡулға алыуҙы урынлы тапманы, мөмкинселек тә юҡ ине: ваҡыт тар ине.



Комиссар ылаусыларға кире ауылдарына таралырға әйтте, ҡаршылашыусылар булғанда, эштең насар булырын иҫкәртте.

Беҙ алға киттек, Таутөмән станцияһынан ҡаршылыҡһыҙ үттек. Ауылдан өс километр самаһындағы тимер юл буйындағы зифа ҡайынлыҡтарҙы үтеп туҡтаныҡ.

Беҙҙең алда ярты саҡрым самаһындағы Новотроицк ауылы һуҙылып ята. Нәҡ беҙҙең тапҡырҙа ғына ағас сиркәү һерәйеп тора.

Тимер юлдың уңайлы урындарына ике пулемет ултырттылды. Беҙ цепкә теҙелдек. Беҙҙең тарафтан ҡосло ут асылды. Дошман, сиркәү ҡыңғырауҙарын шылтыратып, аллаларынан ҡос-ярҙам һорай. Ҡыскырыу, илау тауыштары күтәрелде... Дошмандың ҡаршылығы тиҙ һындырылды. Улар окоптарын ташлап, төркөм-төркөм ҡаса башланы.

Беҙ ауылды алдыҡ. Кулак фетнәселәре оҙаҡ шашына алманы. Яңы Ләмәҙ ауылы урманында улар тар-мар ителде, күптәре ҡулға алынды.

### ҠАНЛЫ КӨНДӘР

1918 йылдың июне. Ҡымыҙлыҡ өлгөргән мәл. Беҙ, бер төркөм ауыл малайҙары, ҡымыҙлыҡтан ҡайтып киләбеҙ. Тау башына килеп етһәк — атлылар, йәйәүлеләр. Мәсетле ауылын ҡамап алғандар.

— Нимә булды икән, малайҙар?

— Берәй бола сыҡтымы икән? Ҡайҙан килгән был тиклем халыҡ?

Шулай тип аптыраштыҡ та ауылға ҡарай йүгерҙек. Баҫыу ҡапҡаһына килеп етһәк, өс һаҡсы тора.

— Ташлағыҙ ҡымыҙлығығыҙҙы. Улар ашарға ярамай.

— Нишләп?

— Унда бәлшәүиктәрҙе үлтерәләр. Шуларҙың ҡаны сәсрәгән [1].

Мин ауылдағы училищела уҡығас, волость йортона инеп-сығып йөрөй торғайным. Ул беҙҙең училище менән йәнәш кенә ине. Шуға мин туп-тура шунда йүгерҙем. Унда барһам, ҡот осҡос хәл. Күҫәктәр менән ҡоралланған кешеләрҙең уртаһында баштары иҙелеп, ҡанға туҙып, үлектәр ята. Араларында үлалмай ыҙалангандары ла бар. Ул яҡтан да, был яҡтан да волостә эшләүсе большевиктәрҙе тотоп килтереп торалар, ары-бире һорау алһалар алалар, алмаһалар — юҡ, бағана менән бәреп үлтереп тик торалар. Мылтыҡ, нагандан атыу юҡ. Гел һуғып үлтерәләр.

— Быларҙы күмергә кәрәк,— тинеләр.

— Ниңә күмергә,— ятһындар әйҙә,— тиҙәр икенселәре.

Шунан оҙон-оҙон арбалар килтереп, өсәрен, дүртәрен арҡыры һалдылар ҙа Биҙәртауҙағы [2] бурташ соҡорҙарына алып барып ауҙарҙылар. Ҡайһы берҙәре үлмәгән була. Әптерәштән Вафа тигән кеше, алып китеп барғандарында, һикереп торҙо ла күлгә ҡасты. Уны тоторға, кәмәгә ултырып, артынан төштөләр. Вафаның хәле бар ине әле. Тегеләргә тоттормай, ул яҡҡа ла йөҙә, был яҡҡа ла йөҙә. Тотабыҙ тиһәләр, бағурҙарынан тартып, үҙҙәрен һыуға ҡолата.

һыуға ҡолағас, тегеләр үҙҙәре саҡ-саҡ батмай ҡалдылар. Кискә тиклем йөрөнө һыуҙа Вафа. Шунан уға:

— Сыҡ. Ярар йөрөмә инде. Бола баҫылды. Ҡотолорһоң,— тип ҡысҡырҙылар. Сығыуы булды — һуғып та үлтерҙеләр. Уны тау моронона күмделәр [3].

Бурташ соҡорона ташланыусыларҙың араһында ла үлмәй ҡалғандар була. Ҡаран яғынан Йосоп тигән берәү соҡорҙан сыға. Уны тағы тотоп алдылар. Ауылдан бер туған ос Шляпкин бар ине. Шуларҙың иң кесеһе ҡасып ҡотолған.

Соҡор янына халыҡты ебәрмәнеләр. Ыңғырашҡанына һыу бирергә, үлгәндәрен алып күмергә рөхсәт итмәнеләр. Күмергә рөхсәт булғас, атайым да көрәк тотоп барғайны:

— Күпме бәлшәүикте һаҡлап алып ҡалдың? Үҙеңде лә йыға һуғып, шулар менән бергә күммәҫ элек кит бынан,— тип ҡыуып ҡайтарғандар.

Беҙ, ысынлап та, бер большевикте һаҡлап алып ҡалғайныҡ. Ул волостә писарь булып эшләүсе Хөснетдинов Хәйретдин тигән ағай ине. Бола башланғас, кәртә артынан ҡасып килеп, ул беҙҙең картуф араһына боҫҡан булған. Атайым күреп ҡалған да:

— Өйҙә тентерҙәр, ят шунда,— тигән. Мин ҡайтып ингәйнем, уның ятҡан ерен өйрәтте лә:

— Картуф утаған булып, Хәйретдин ағайыңдың өҫтөнә сүп үләндәре өй,— тине. Мин, атай әйткәнсә, Хәйретдин ағайҙы сүп үләне менән күмеп ҡуйҙым. Шул арҡала ул үлемдән ҡотолдо. Шуны ул ғүмере буйы онотманы:

— Һин алып ҡалдың бит мине үлемдән,— ти торғайны атайыма.

Был боланы кулактар, байҙар, муллалар башлаған. Ҡурҡытып үҙҙәренең артынан ярлыларҙы ла эйәрткәндәр. Волостәге большевиктәрҙе үлтереп бөткәс, улар үҙҙәре хөкөм һөрә башланы. Аҡтар килгәс, тағы шашындылар.

1919 йыл көҙгә табаныраҡ ҡыҙылдар килде. Улар үлтерелгән большевиктәрҙең кәүҙәләрен ауылға төшөрөп күмдерҙеләр. Фетнәселәр ҡаты язаға тарттырылды. Улар ҡулынан һәләк булған большевиктәр иҫтәлегенә 1948 йылда һәйкәл астыҡ.

## БОЛЬШЕВИКТӘР БӨТӘ БУЛАМЫ!

1918 йыл. Мин байҙа ялсылыҡта тора инем. Волостән кешеләр килеп, кулактарҙы тентеп, артыҡ игендәрен алып йөрөнөләр. Бер ваҡыт кискә генә бер вәкил килде. Дыуан-Мәсетлелә ҙур йыйылышмы, кәңәшмәме булырға тейеш икән. Шуға барырға тип батрактарҙы өндәп йөрөнө. Ауыл һайын батрактар барырға булған. Кулактар ҙа тик ятмаған. Әпсәләм, Хәлил, Арый, Әптерәш, Мәрйәмғол ауылдарынан кешеләр яллап, волость үҙәге Дыуан-Мәсетлене килеп баҫҡандар. Волостәге иптәштәр йыйылыш ҡайғыһы менән уларҙы ҡаршыларға әҙерләнмәгәндәрме, нисектер, ҡалай булғас та, аңғармаҫтан баҫҡандар.



Волость йортоноң күтәрмәһе бейек була торғайны. Большевиктәрҙе берәм-берәм шул күтәрмәнән осора төртөп торғандар, аҫтағылары уларҙы күҫәк менән туҡмап, үлтереп торғандар. Беҙҙең Мәрйәмғолдан Мөхәмәғәлин Хәким тигән подкулачник тә ҡатнашҡан шул үлтерештә. Бик кеслө, кәүҙәгә лә елле бәндә ине. Ашай башлаһа, һыйыр һымаҡ, туйыуҙы белмәҫ ине. Бер ултырғанда, бер коршәк һары майҙы һемерә торғайны. Шул әҙәм бик ҡыҙышып ҡайтҡан, ти.

— Янам, янам! Большевиктәр әҙ булды! Күберәк үлтереп булманы. Янам, һыу һалығыҙ,— тип нишләренә белмәй йөрогән, ти. Ике бисәһе ике яҡтан өҫтөнә һалҡын һыу һалып, саҡ һыуындырып алғандар, ти.

Ул үлтереш булғанын мин эш ерендә ишеттем. Һабан һөроп йөрөй инек, төштән һуңыраҡ Мәсетле яғынан ике һыбайлы күренде. Тәүгеһе:

— Большевиктәр бөттө! Большевиктәрҙе ҡырҙыҡ! — тип һөрән һалып үтеп китте.

Нишләргә лә белмәйбеҙ. Ҡулдан эш төштө, аптыраныҡ. Икенсеһе әкрен генә килде лә беҙҙең янға туҡтаны. Беҙҙең менән Ҡаракүлдән ике батрак та бар ине. Был кеше шуларҙың ауылдашы булып сыҡты. Ауылдаштары янына ултырып, тәмәке тартты. Шунда ул:

— Дыуан-Мәсетлелә большевик бөтөү менән илдә большевик бөтәр тиҙәрме икән?! Бөтәр булһа, большевик власть алып торамы,— тип һөйләнеп ултырҙы.

Дыуан-Мәсетлелә үлтерелгән большевиктәрҙе Бурташ соҡорона ташлаған булғандар.

1919 йыл тыуҙы. Ҡыҙылдар килгәс, әлеге үлтереүселәрҙе тотоп алып, үлтерелгән большевиктәрҙең һөйәктәрен Бурташ соҡоронан йыйҙыртып, волость йорто эргәһенә күмделәр. Унда тағы илаш булды. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң шул ергә һәйкәл ҡуйҙылар.

## КОМИССАР ҠОТДОСТОҢ ҮЛЕМЕ

1918 йылдың июне ине. Ураҙа мәле. Кулактар йыйылышалар ҙа:

— Совет власенә буйһонмайбыҙ! — тип һөрән һалышалар. Большевиктәрҙе ҡурҡытмаҡсы булалар. Ә улар:

— Беҙ һеҙгә буй бирмәбеҙ! — тип яуап ҡайтаралар. Шунан волость урамында атыш, үлтереш китте. Дыуан районы Йылға башынан килеп эшләүсе Ишбулатов Ҡотдос берәүҙең могәрәбенә төшөп ятҡан. Бер ҡыҙ могәрәпкә һот алырға төшһә, был шунда ята, ти. «Кеше күргәс, тотоп алырҙар»,— тип уйлап, Ҡотдос Таштығаяға [1] урман араһына ҡасҡан. Шунан ул Зомәкул [2] тауындағы соҡорҙа йәшенеп ятҡан.

Бер көндө Ҡотдос иртә менән йылғаға һыу алырға төшкән. Ысыҡта юл беленеп ята бит инде. Шуның буйынса юллап килеп, кулактар быны тотоп алалар. Тоткас, ауылға килтерҙеләр. Пыҡ туҡмағандар ине Уны волоскә алып барҙылар. Кәрим хажи:

— Бәреп үлтерегеҙ бәлшәүикте! — тип ҡысҡырҙы.

Ҡотдостоң ҡатыны беҙҙә ине. Әҙләп килеп, уны ла волоскә алып киттеләр. Язалай-язалай, унан да һорау алалар. Ҡатынын этләүҙәрен күргәс, Ҡотдос уның янына ташлана. Волость йортонан югереп сығып килгәндә, кулактар кәртә (күсәк) менән уның башына бәрҙеләр. Ҡаны сәсрәп, Ҡотдос ергә ауҙы. Уны аяктарынан тотоп, тарантаска һалдылар ҙа, башын ергә һөйрәлдереп, сабып сығып киттеләр. Ҡатыны, бахыр, ер-һыу илап ҡалды.

Ҡотдосто, Биҙәртау башына мендереп атып, бурташ соҡорона ташланылар. Аҙаҡ уның хаҡында халыҡ йыр сығарып йырланы.

Әсәһе илай-илай яуап биргән,
Кулак тарафынан вафат булған, тип.
Балалары әйткән, илай-илай,
Үс алырбыҙ кулактарҙан, тип.

## ҠОТҠОСО

Минең ошо йәшәп ятҡан өй урынында әүәле мулла торғайны. Большевиктәрҙе ене кеүек күрер ине. Дыуан-Мәсетлелә волость башында ултырған большевиктәрҙе үлтертеүҙә лә уның ҡыҫылышы булған. Уның менән генә ҡуйманы, Тастүбәгә, Ярославкаға [1], Мәсәғүткә [2] кешеләр ебәрҙе. Кем кулак һүҙен тыңламай, большевиктәрҙе ҡырырға барырға риза булмай, шуны елтерәтеп хәҙрәткә килтерерҙәр ине.

— Большевиктәр менән һуғышыу фарыз. Уларҙы бөтөрөү фарыз,— тип өгөт-нәсихәт бирер ине уныһы. Фарыз тигән һүҙ — үлһәң үл, эшләнер эште эшләмәй ҡалма тигәнде аңлата. Мулла алла, дин, гонаһ, менән ҡурҡытһа ла, бөтәһе лә уның һүҙен тыңлай һалып бармай ине. Бер ваҡыт Ғөбәйҙулла тигән кешене килтерҙеләр быға. Аҫтында байҙың уйнаҡлап торған аты. Мулла өгөтләй, Ғөбәйҙулланың иҫе лә китмәй.

— Большевиктәр бөтмәй, донъя яйға килмәй. Уларҙы үлтереү — фарыз. Бер большевиктең ҡанын ҡойоу — мең бәләнән ҡотҡарыр...

Ғөбәйҙулла мулланы бар тип тә белмәй, атын ҡыуып китеп тик бара. Уныһы өҙәңгегә йәбешерҙәй булып, йәшел таяғын һөйрәп, һаҡалдарын елпелдәтеп, эргәһенән юрғалап бара. Харап көлкө булып күренде шул саҡта мулла.

## БАТЫР ТАШЫ

Үрнәк юлы өҫтөндә ҙур бер таш ята. Уны, Батыр ташы, тиҙәр. Батыр ташы тигәндең тарихе бына былай булған.

Революция ваҡытында Ташлы ауылына бер коммунист килеп йөрөгән. Ул байҙарҙың әйберҙәрен алып сығып, ярлыларға таратып, өйҙәрен һаттырған. Шунан, Миңһылыу әбей бар бит, шуның иренең бер ҙә яман * был коммунискә һарыуы ҡайнаған. Баязиттә йыйын булған. Үҙ ғүмерендә йыйынға Миңһылыуынан башка йөрөмәгән Мөсәғит ҡарт был юлы үҙе генә барған. Йыйындан һуң Баязит кешеләрен йыйып алған да теге коммунисте һағалай башлаған. Был йыйында ул да булған икән. Кискә табан тегене алдаштырып, дүртбиш кеше яр яғына алып сыҡҡан. Алып сыҡҡандар ҙа шул ерҙә быны ҡыйнай башлағандар. Былар ҙа елле, коммунис тә бирешмәй, ти. Корәшә-көрәшә, Баязит яланынан Үрнәк юлына тиклем килгәндәр. Шунда инде теге байғош хәле бөтөп йығылған. Шул ваҡыттәта кулдарындағы таяҡтары менән ерҙе арлы-бирле ҡаҙығандай иткәндәр ҙә баяғы оло таш менән тере көйөнә баҫтырып киткәндәр.

1927 йылда теге ҡартың үҙе лә үлде. Сирләп, үлер ваҡыты етеп килгәндә, минең ҡартҡа:

— Һин инде, Миңнәхмәт, мин үлгәс, гонаһтарым ярлыҡарһың,— тигән. Мөсәғит ҡарт бик дингә ышанған кеше ине. Шуға күрәҡылған эшенә сыҙай алмай, тәүбә итә-итә һөйләгән. Теге коммунискә көстәре етмәй йөҙәгәндәрен, саҡ үлтергәндәрен һөйләгән.— Дүртбиш кешегә бер үҙе биреш мәй, ни ғүмер барҙы, бахырың,— тигән. Сирләй башлағас та, карттың күҙенә үлтерелгән коммунист күренер булған. Гел алырға килә икән теге. Телдән ҡалғансы Мөсәғит ҡарт:

— Коммунист килә! Мин үләм инде! — тип аҡырып ятып үлеп китте, ти.

«Бик йөрәкле кеше булған икән егетең!»— тип бабай мәрхүм әлеге коммунисте маҡтай торғайны. Шул коммунист үлгән ерҙәге ташты Батыр ташы тип йөрөтәләр бит әле? Батыр коммунист хөрмәтенә бабайың шулай атағайны уны.

## ШӨКӘРӘ БОЛАҺЫ

Мин 1920 йылда Самар ҡалаһында алты айлыҡ мосолман хәрби-политик курсында уҡыным. Уны тамамлағас, Стәрлетамаҡтағы Башполитидаралыҡ мине көньяҡ районға Ҡыуандыҡ станцияһында урынлашҡан политбүлеккә эшкә ебәрҙе. Эш урыныма килеп, ҡыҙыл-армеецтәр араһында агитатор-ойоштороусы булып эшләй генә башлағайным, беренсе аҙнала уҡ Үсәргән кантонындағы Шөкәрә ауылында Совет власенә ҡаршы бола башланды. Бола башында ауыл байҙары, кулактар, мулла, милләтсе интеллигенттәр торған. Уларға куштандары, Ҡыҙыл Армиянан ҡасып ҡайтҡан дезертирҙәр эйәргән.

Төн уртаһы ине. Политбүлек начальниге Ласкин ингәш беҙҙе тревога менән йыйып алды. Ҡыҫҡа ғына кәңәшмә үткәрҙе. Хәлдәр етди ине. Мәсьәлә асыҡ булғанға, оҙаҡ һөйләшеп торманыҡ. Тиҙ арала Шөкәрәгә китергә ҡарар иттек. Фатирҙәребеҙгә ҡайта һалып, икмәк, мылтыҡ алдыҡ та йәнә политбүлеккә югерҙек. Алда торған операция хаҡында йәнә фекер алыштыҡ та, ылауҙарға ултырып, Ҡоро Юл ауылына ҡарап саптыҡ. Ҡоро юл ауылын үҙғанда, сәғәт

төнгө өс ине. Шөкәрәгә иртә үк барып етергә була ине. Тик беҙ көткәнсә булмай сыкты. Ылаусылар араһында боласылар менән бәйләнештә булыусылар ҙа булған булһа кәрәк. Улар алдан һүҙ беркеткән булырға тейеш. Беҙҙе Шөкәрә юлына алып бармайынса, һул яҡҡа Сабатар ауылына ҡарап алған да киткәндәр. Шөкәрә унда утыҙ биш-ҡырҡ сакрымдай ситтә тороп ҡалған да ҡуйған. Аҙаҡ:

— Нишләп былай иттегеҙ? — тип һораған, улар:

— Кон дә буранырак, төнө лә бик ҡараңғы... Был як йөрөгән еребеҙ ҙә түгел,— тип һылтанырға керештеләр.

Байтаҡ юл үтеү сәбәпле аттар ҙа талыкты, үҙебеҙ ҙә асыктык. Үтәғол тигән ауылға еткәс, ат ашаттык, үҙебеҙ ҙә туйынып алдык. Төн уртаһы ауыуға Ағурҙа тигән утарға килдек. Ишетеүебеҙсә, боласылар Ағурҙала булырға тейеш ине. Шуға күрә, тота килеп, ауылға инергә хәүефләндек. Белешеп килеү өсөн, бер ылаусы менән үҙебеҙҙең арапан бер иптәште ебәрҙек. Улар оҙакламайынса әйләнделәр. Элек партизан отряде башлығы булып йөрөгән Рыськолов тигән кеше Сабатар яктарында команда төҙөп, үткән таңда килеп, тегеләрҙе бик нык тукмаған, иҫән ҡалғанын ҡыуып сығарған икән. Бында эш ҡалмау сәбәпле, беҙгә шул тирәлә йәшенеп боҫоп ятҡандарын сүпләү, халыкка совет закондарын төшөндөрөү менән шөғөлләнергә генә ҡалды. Халыкты йыйып алып, политбүлек начальнигә Ласкин иптәш доклад яһаны.

Шул саҡ ике ылау килеп туктаны. Шөкәрә яғынан икән. Шуға ла улар беҙҙе бик ҡыҙыкһындырҙы. Югерешеп сығып ҡараһаҡ, ни күҙең менән күрәрһең, ике ылауҙа ике үлек. Кейемдәре менән сәстәренә иғтибар итмәһәң, йөҙҙәренә ҡарап, уларҙың ир йәки ҡатын кеше икәнен айырырлык түгел: биттәре яраланып, ҡаралай көйгән, өҫтәренә бауырланып ҡан ҡаткан. Асып ҡараныҡ. Берәһе ир, икенсеһе ҡатын кеше икән. Ҡатындың имсәктәре, ирҙең ҡолаҡтары, мороно, киҫеп алынған... Ылаусылар һөйләгәндә ишеткән ҡыҙ-ҡатындар иларға, палачтарҙы ҡәһәрләп ҡарғарға тотондолар.

Ваҡиға былай булған. Был икәү Шөкәрә эргәһендәге бер башҡорт ауылының (исеме хәтерҙә ҡалмаған) укытыусылары булған. Иптәштәрен йыйып, уйын ҡуйырға репетиция яһап ятҡандар. Шул саҡ аңһыҙҙан ғына Шөкәрә бандаһы ауылға килеп ингән дә быларҙы ҡамап алған. Мәктәптәгеләрҙе туҡмағандар. Шунан инде башкаларға ғибрәт күрһәтеү өсөн, йәштәрҙе башлап йөрөүсе был ике укытыусыны, халык алдында язалап, мәктәптә иҙән уртаһында ташлап китәләр. Ауылға Рыськолов командаһы килгәнсе, уларҙың мәйете ошонда ята. Ауылды алып, фажиғәне белгәс тә, Рыськолов бандит ҡорбандарын, якшылап күмеү өсөн, Сабатарға оҙаткан. Ошо турала һөйләгәндә тыңлап бөткәс, үлектәрҙе оҙатып барыу өсөн, беҙҙең начальник тә бер ҡоралды кеше бирҙе. Ылауҙар кузғалған сакта, халык ер-һыу илап ҡалды, ә беҙ залп менән салют яһаныҡ. Беҙҙең күңелдәрҙә ҡанһыҙ бандиттәргә нәфрәт ҡайнай ине.

Дошман күп шашына алманы. Шөкәрә фетнәһе баҫтырылды, урындағы совет органдары нормаль эшкә күстә.



## ҮС ҠАНДЫРЫУ

Граждандар һуғышы бөткәс, күрше волостә Навокшонов тигән берәү милицияға эшкә инде. Ул килгәс, актив партизандар берәм-берәм ғәйеп була башланы. Өйҙәрендә атылған хәлдә табылғандары ла күп булды. Кемдең эше икәнен берәү ҙә белә алманы.

Бер ваҡыт Навокшонов Ерекле ауылындағы Харис партизанға килеп инә. Ул бик шәп кеше ине. Навокшонов килгәс, Харис аптырап ҡала. Уның һуғышта ғәйеп булған эскадрон командиры икәнен таный. Эскадрондың тар-мар ителеүендә кемдер ғәйепле була. Әйтеүенсә, Навокшонов һаман шул кешене эҙләп йөрөй икән. Харисҡа ла шул сәбәпле килгән була, йәнәһе. Был тирәлә шул эскадронда хеҙмәт иткән тағы кемдәр барын да һораша. Харис уға сәй эсерә. Самауыр янында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултыра был икәү. Бер аҙҙан Навокшонов:

— Һунарға сыкканымда, артығырак тотонғанмын. Хәҙер начальствонан эләгер инде. Һиндә патрон юкмы?— ти. Хариста патрондар була. Навокшонов наганын яһай ҙа:

— Эскадрондың тар-мар ителеүендә һин ғәйепле. Мә, үҙ пуляң үҙеңә,— тип ата ла ебәрә. Үҙе ашығып атына атлана ла сабып сығып китә. Пуля күкрәгенә тишеп сыкһа ла, Харис тиҙ генә үлмәй. Һөйрәләп урамға сыға. Кешеләр йыйылышып китә. Кем, ни өсөн атканын һөйләп бирә лә үлә Харис...

Навокшоновты ҡулға алалар. Эскадронды һатыусы үҙе икәнлеген асалар. Бактиһәң, эҙ яҙҙырырға, ул үҙе командалык иткән эскадрондың һалдаттарын берәм-берәм шулай атып йөрөгән икән. Совет суды уны үлем язаһына хөкөм итә. Атыр алдынан ниңә шулай иткәнен һорағандар икән, ул:

— Улар тере сакта, мин йәшәй алмаҫымды белә инем. Уларҙы яманламайым. Батыр кешеләр. Бәлки, шуға ла тере ҡалғандарҙыр. Ә мин ҡурҡаҡ. Шуға үс алғым килде. Улар үҙҙәре эҙләгәндә тапты — мин юғалттым,— тигән.

## ШАКИР ҮЛЕГЕ

Төрмәнән ике кеше ҡаскан. Улар Рәүәт яғында тигән хәбәрҙе алғас та, милиционер Шакир шунда барырға була. Улар ас, хәлһеҙ булырға тейеш, тотоуы еңел булыр, тип яңғыҙы ғына сыға. Рәүәткә килгәс, Шакир беҙгә төштө. Иртәнсәк сәй эсеп ултырғанда, Фәйзрахман тигән малай килеп керҙе. Уға ул ваҡытта алты-ете йәш кенә ине.

— Төбәк яғында ниндәйҙер ут күренә,— тине малай.

— Әйҙә, кустым, күрһәт әле миңә,— тип Шакир тиҙ генә йыйынды ла, Фәйзрахманды алып, төбәккә китте.

Төтөн сыккан ергә барып еткәс, күрән араһына ятып, бер аҙ күҙәткәндәр. Ут янында даны сыккан бандит Атау ҡарт йөрөй, ти. Биҙрәһендә бығыр-бығыр ит бешә, ти. Йот мәлендә Атау кешеләр-

ҙең малдарын урлап, ҡатыны, ике ҡыҙы менән урманда ҡасып йәшәгән. Атау ҡарт икәнлеген танығас, милиционер:

— Ә-ә, был һинме ни, Атау ҡарт? — тигән икән, ул:

— Мин, мин,— тигән дә шунда уҡ мылтығынан ата башлаған. Шакир уға:

— Яҡшылыҡ менән бирел,— тип ҡараған, аңғармай ҙа ҡалған, Атау ҡарт уны үлтерә атҡан да ҡуйған.

— Танауың таржайҙымы? — тигән Атау, Шакирҙең үлек кәүҙәһен типкеләп. Малай шым ғына бөтәһен дә күреп, ишетеп ятҡан. Үҙенең барлығын белдермәгән.

Шакирҙе үлтергәс, Атау тиҙ генә икенсе ергә күсенгән.

Һуңынан уны барыбер тоттолар. Вагонда алып китеп барғанда, ҡасып ҡараған. Шул ваҡытта үҙе лә милиционер пуляһенән үлемен тапҡан.

Теге ваҡытта милиционер Шакир үлгән урыҡ әле лә Шакир үлеге тип йөрөтөлә.

## АУЫЛДА ЛА СОВЕТ ЕҢДЕ

Иркутск яғында продразверсткала йөрөп, 1921 йылда Яңыбайға ҡайтып төштөм. Беҙ тегендә ҡан ҡойоп, йәнде ҡулға алып, Совет власе өсөн көрәшеп йөрөйбөҙ, ауылда власть башында һаман байҙар, 1918 йылда партизандарҙы үлтереүселәр! Ауылда коммунистәр ҙә, комсомолецтәр ҙә бар. Йыйып алдым да тегеләрҙән һорайым:

— Ниңә власте байҙарға биреп ҡуйҙығыҙ? Ниңә ауыл Советө тигән исем юҡ?

— Алдағыны белеп булмай бит. Тағы теге яҡҡа әйләнеп китһә донъя, тағы 1918 йылдағы кеүәк беҙҙе сүптәй баштарҙар,— ти берәһе әйтә.

— Юҡ, юҡ, юҡ! — мин әйтәм,— һеҙ миңә ышанығыҙ. Хәҙер беҙҙең Совет власе мәңге йәшәйәсәк. Давай, фәлән числола йыйылып, ауыл Советен яңынан төҙөргә. Хәҙер байҙарға, баярҙарға баш һалып йәшәй торған замана түгел. Шуның өсөн һуғыштыҡмы ни беҙ? Байҙар тағы беҙҙең өҫтән командауайт итһен өсөн ҡан түктекме ни? Юҡ. Булмай,— мин әйтәм.

Шунан йыйылыш яһап, ауыл Советө ағзалары һайлап, ҡулаҡ, байҙарҙы властән төшөрөп, ауылда ла Совет власе урынлаштырҙыҡ. Баһау тигән егетте рәис итеп ҡуйҙыҡ. Мин дә ауыл Советө ағзаһы булып киттем. Баһау бер яҡҡа китер булһа, мин рәис урынында ҡалыр инем.

## КОЛХОЗЛАШҠАН САҠТА

Колхоз төҙөгән ваҡытта бик ауыр булды. 1929—1930 йылдарҙа бөтәһе лә колхозға инде.

Мине аттар буйынса бригадир итеп һайлап ҡуйған булдылар.



Ат һарайы ике урында ине. Иртән торам да шуларҙы ҡарап сығам. Һәйбәт ашағанмы, һыу эскәнме, ҡасан, ҡайһы атты ҡайҙа ебәрергә? Шулай йөрөп ятылына. Бер ваҡыт ҡулаҡ һүҙенә төшоп, колхозды бөтөрөргә яталар, имеш. Аттарҙы, һыйырҙарҙы — бөтәһен дә кире таратып бирергә, колхоз етәкселәрен үлтерергә. Бер көн, ни сәбәптәндер, барыр мәлдә аттар янына барманым. Барһам, үҙ аяғым менән ҡайтмай инем. Унда мине үлтерергә, ҡапҡанан ингән ыңғайы балта менән башҡа сабырға әҙерләнеп кенә торғандар икән...

Сәсеү мәле етте. Бөтә екке ат сәсеү ерендә. Мин дә шунда. Аласыҡта торабыҙ. Бик аҡыллы этем бар ине. Аласыҡты һаҡлап, ят кеше фәлән килһә, тауыш биреп, аңғартып торор ине. Бер ваҡыт этем юғалып китте. Бер итеп эҙләйем — тапмайым бит. Нишләргә? Ҡарауылсыһыҙ ҡалдым дабаһа тик торғанда. Һорашам. Юҡ. Берәү ҙә әйтмәй. Һиҙеп алдым: әһә, эш улай икән, бандиттәр эше икән. «Быны төнөн баҫырға кәрәк тә үлтерергә кәрәк. Эте тауыш сығарыр. Тәүҙә унынһын юҡ итергә кәрәк»,— тип уйлағандарҙыр, моғайын да.

Эт булмағас, эш ерендә ҡунырға ҡалмай башланым.

Бер егет бар. Бандиттең әнеһе. Бынан һорайым:

— Минең этте белмәйһеңме?

— Юҡ, белмәйем,— ти.

Бер литр араҡы алдым да шул бандиттең әнеһен саҡырҙым.

— Бөгөн эштән ҡайтҡас, миңә бар. Мин һиңдә күп эскән, күп ашаған. Үҙеңде лә бер һыйлайым әле,— тим. Килде был. Ярты литрҙы эсерҙем дә һаман этте һорашам.

— Эх,— ти,— һин этеңде һорашаһың да ул,— ти.— Һин дә йәл, ул да йәл,— ти.— Һинең этеңде атып йәшерҙеләр. Аласыҡтан алыҫ түгел, тая төбөндә ята ул,— ти.— Һин бер ос көнгә сабыр ит. Барма, йөрөмә шул яҡҡа,— ти.— Ос көндән һуң бандиттәр китер ул,— ти.— Иртә менән барып, эшкә әйт тә, оҙаҡлама, ҡайт,— ти.— Асылан төнгә ҡалма,— ти.

Шулайтып, бандиттең ҡустыһын эсереп, иҫертеп, һөйләндереп, серҙе белдем. Шулай һорашмағанда, үҙемде лә эт урынына йәшереп ҡуйырҙар ине. Теге бандиттәр, ос көн буйы мине аңдығандың һуңында, дүртенсе көндө ҡасҡандар. Бер аттары тороп ҡалған булған икән. Ул ат колхозға ярап ҡалды. Ә бандиттәр Златоустка барып, үҙ-ара үлтерешә башлағандар. Бандиттең ни шул инде. Талап тапҡан малды үҙ-ара бүлешә алмаһалар, бәхәс сығып, бер-берен үлтерергә күсә лә китәләр.

## ХӘСӘН ШЫРШЫҺЫ

Ҡыйғаҙынан алыҫ түгел бер шыршы бар. Уны Хәсән шыршыһы тип йөрөтәләр.

Колхозлашыу йылдарында Хәсән тигән ағай ауыл Советө председателе булған. Ҡулаҡтар уны күралмағандар. Һәр ваҡыт күҙәтеп кенә йөрөгәндәр. Уңайы тура килгәндә, юҡ итергә уйлағандар.

Берҙән-бер көндө Хәсән ағай өйөнә кайткан да, ашап та торма-йынса, ат егеп, урманға утынға киткән. Һәр аҙымын күҙәтеп кенә йөрөгән әлеге кулактар уның артынан төшкәндәр.

Хәсән ағай урманға барып, санаһына утын тейәп алып, кайтырға ғына торғанда, кулактар уны уратып алғандар ҙа, үлтерә һуғып, куйы ботаклы шыршы башына мендереп, бәйләп киткәндәр.

Хәсән ағайҙы өйҙә көткәндәр ҙә көткәндәр. Кайтмағас, эҙләү һалғандар. Бөтә ауыл халкы эҙләһә лә, табылмаған Хәсән ағай...

Өс йыл үткәс, колхоз малдарына шыршы ботағы киҫкәндә, ошо шыршы башында кеше һөлдәһе тапкандар. Кем икәнен танымаҫтар ине, кейеменең түш кеҫәһенән комсомол билете килеп сыккан. Шунан уның ауыл Советы председателе Хәсән ағай булыуын белгәндәр. Комсомолец Хәсән ағай егерме биш йәшендә шулай кулактар кулы-нан һәләк булған.

## ХӘЖИРӘ ШИШМӘҺЕ

Был хәл колхозлашыу осоронда булған.

Хәжирә башка колхозсы катын-кыҙҙар кеүек бесән сапкан, иген үҫтергән. Бүтән эштәрҙә лә бөтөрөлөп йөрөп эшләгән.

— Үҙеңдекеме ни ул? Ниңә шул тиклем тырышаһың?— тир бул-ған уға бәғзе кеше.

Ундайҙарға Хәжирәнең яуабы бер булған:

— Колхоз үҙемдеке — эше лә үҙемдеке!

Бер вакыт Хәжирә кинәт кенә юғалған да куйған. Эҙләп тә ка-рағандар — күреүсе лә, белеүсе лә булмаған. Бер нисә көндән һуң уны ауылдан ситтә, Акшишмә буйында аҫылынған килеш тапкан-дар.

— Ни өсөн аҫылынды икән? — тип аптырашкан халык. Тик бе-рәү ҙә был һорауға яуап бирә алмаған. Аҙак кына уны колхозға каршы булған кешеләр һәләк иткәнлеге беленгән.

Хәҙер әлекке Акшишмәне Хәжирә шишмәһе тип йөрөтәләр.

## ҒИБАЙ СОКОРО

Беҙҙең ауылдан ун ике сакрымда Кесе Ыйык исемле ауыл бар. Унда хәлле генә халык йәшәгән. Беҙҙекеләр колхозлашканда, те-геләр һаман да «часник»тәр булып кала биргәндәр.

Бесән вакыты етә. Беҙҙең ауыл кешеһе Ғибай бесәнгә китә. Ул вакытта куна ятып бесән әҙерләгәндәр. Бесән барышында Ғи-бай карт менән Кесе Ыйык кулактары араһында сабын сиген билдә-ләүҙә бәхәс сыккан. Бәхәс талашка, талаш һуғышка әүерелгән, колхозсы Ғибай сапкылап үлтерелгән. Шул урын хәҙерге көндә Ғибай сокоро тип йөрөтөлә.



## ҒИЗЗӘТ КАРАК ГАЛОШЫ

Беҙҙең тирәлә Ғиззәт тигән берәү касып йөрөнө. Бер урыҫ ду-ҫы менән шым ғына килеп баҫа ла аттарҙы алып касып китә ине. Тамам йәнгә тейҙе. Бер вакыт тегеләр кәнсәләрҙә килеп баҫтылар.

— Колхоз ойоштороп, халыкты талап ятаһығыҙ,— тип бәйләнә-ләр былар. Куркыталар. Мисәт таптыралар. Миңә тиклем колхоз-дың бер мисәте юғалғайны. Ул сакта колхозда Шаһиғәрәй председатель ине. Бакһаң, мисәтте ошолар тартып алған икән дә, ялған кағыҙ яҙып, колхоз аттарын ситкә һатып тик йөрөгәндәр икән. Кырк алты атты һаткандар. Ә Шаһиғәрәй, куркып, шуны әйтмәй йөрөгән дә аҙак үҙе лә кайҙалыр касып сығып киткән. Шунан аҙак председатель итеп мине куйғайнылар... Кәнсәләрҙә дыу килтерәләр бит тегеләр. Икеһе лә коралллы. Әллә кайһы арала урамда милиционер үҙып барғанын күреп, еккә кереп каскан кандала һымак, юк булды былар. Нишләргә хәҙер? Милиционер Вәлиев менән кәңәшәбеҙ. Ғиззәттең төндә кайтып йөрөүен белеп алдык та бажаһына аракы бирҙек.

— Бажаңа бар ҙа эсер иҫерткәнсе,— тинек.

— Була ул,—тип алып калды аракыны. Был, барып инеп, һөй-ләшеп китеп, тегеләрҙе һыйлаған. Ғиззәте эскән, теге урыҫы нык ултыра, ти, эсмәй, ти. Аракы бөткәс тә, кайтармай, ти.

— Беҙ китмәйенсә, сыкма,— ти ҙә куя, ти. Шулайтып, теге меҫкен сығып китеп, беҙгә килә һалып әйтергә һис форсат тапмай икән. Ә беҙ әйҙә көтәбеҙ уны. Таң атты. Кояш һауалай башланы. Юк бит Ғиззәттең бажаһы. Ни булһа ла булды тип, килдек тә баҫтык. Урыҫты кулға алдык алыуын, Ғиззәтте юғалттык та куйҙык бит. Эҙләйбеҙ тегене. Тетеп эҙләйбеҙ. Юк. Бесәнлектән барып тап-тык. Типкеләп торғоҙҙок та, атка мендереп, районға оҙаттык. Юлда әллә ни хикмәт менән йәнә каскан да киткән. Ғәләмәт кесло кеше ине шул. Тегене кайҙан эҙләргә белмәйҙәр икән. Урман яғын ка-раштырып арып-талып килгәндә, Вәлиев бер нәмәгә иғтибар итә куя: ташлыкта эре-эре аҙымлы ап-ак эҙ ята, ти. Ғиззәттең бажаһына күрһәтә быны.

— Был ниндәй аяк эҙе икән?— тип һорай.

— Эһә-һә,— ти Ғиззәттең бажаһы.— Был бит Ғиззәт бажа кей-гән галоштың эҙе. Теге көндө кис юрамал мин уларҙы акбурға сумы-рып куйғайным. Вәлиев эҙ буйлап китә. Эҙерәк барһа, бер сокорҙа һыңар галош ята, ти. Сокор аша һикергәндә төшөп калғандыр, ти ҙә тиҙ генә йырынға төшә. Төшһә, ни күрһен, күпер аҫтында Ғиз-зәт каскы боҫоп ултыра, ти. Тегене тотоп, бәйләп алып китәләр. Ун йылға ултырткайнылар, юғалды Ғиззәт каскы, кабат кайтманы. Ул киткәс, аттар ҙа юғалмаҫ булды. Халык менән дошманлашып, енәйәт менән башын юйҙы. Халыкка каршы сығып буламы ни ул?

## СВОБОДА АУЫЛЫ

Беҙҙән алыҫ түгел бер бәләкәй генә ауыл бар. Свобода тип йө-рөтәләр уны. Исеменең килеп сығыуы революция йылдары менән

бәйләнгән. Бында элек бер рус байы йәшәгән. Граждандар һуғышы ваҡытында ауыл күпмелер ваҡыт аҡтар ҡулында ҡала. Ярлы-ябағаға көн бөтә. Ләкин бер көн килеп ҡыҙылдар уны ла азат иткәндәр. Бай аҡтар менән ҡаса. Шунан һуң ауылға Свобода исеме йәбешеп ҡалған.

## КОММУН ТАУЫ

Совет власе урынлашҡас, ошо тауҙа бер төркөм халыҡ коммуна булып йәшәгән. Улар рус кешеләре булғандар. Ауыл кешеләре, улар менән аралашып, шул тау аша Әйләгә барып йөрөгәндәр.

— Ҡайҙан йөрөнөң?

— Коммундар аша.

— Ҡайҙа барҙың?

— Коммундарға,— тип йөрөй торғас, рустар йәшәгән тау Коммун тауы булып киткән.

## КОМСОМОЛ АУЫЛЫ

Колхозлашыу ваҡытында Илтәйҙә колхозға башлап комсомолдар ингән. Улар яңы тормошто яңы урында башламаҡ булғандар. Йөрүҙәндең икенсе ярына күсеп ултырғандар. Шул яңы ауылды Комсомол тип атағандар.

## РАДИО АУЫЛЫ

Ғәйнит ҡарт Кропачеволағы урыҫтар менән бик дуҫ булған. Совет власе урынлашҡас, унда тауышһыҙ кино күрһәтелер булған. Киномеханиге менән һөйләшеп, Ғәйнит ҡарт киноны Яхъяла ла ҡуйҙырта.

Гармун алып, бейеүсе, йырсыларҙы йыйып, ауыл халҡына кропачеволар һымаҡ уйындар ҡора.

Кропачевола детекторлы радиолар күренә башлай. Ғәйнит ҡарт та радио ала. Ил, донъя яңылыҡтарын, көнөнөкөн көнөнә ишетеп, ауылға тарата башлай.

Бер ваҡыт кантон үҙәге Мәсәғүттән хәбәр килә: имеш, ат һатып, трактор алырға була. Ғәйнит трактор йөрөтөргә өйрәнеп алды. Ер эшкәртеү товарищеҫтвоһына «фордзон» тракторы[1] алып ҡайтты.

1926 йылдың майы ине. Бер көндө Кропачево яғынан трактор килә тигән хәбәр ишетеп, бөтөн халыҡ уға ҡаршы югерҙе. Мин дә барҙым. Ат арбаһы тағып алған, тыр-тыр итеп, тауҙан төшөп килә был. Ҡарт-ҡоро ситтәнерәк ҡарай. Ен арбаһы тип ҡурҡа. Бала-саға тракторға ҡаршы саба... Арбаға ирҙәр тейәлде. Шул килеш бер нисә рәт урағандан һуң, һүнде теге.

— Кәрәсине бөттө! — тинеләр арбалағылар.



— Шәм һымаҡ икән был әй. Кәрәсине ботһә, һүнә икән,— тиешә халыҡ. Трактор туҡтағайны, ботәһе лә уға ябырылды. Берәүҙәре ултырып ҡарарға итә, икенселәре һыйпап ҡарай, осонсолары рулен борғолай, кемдер тәгәрмәсен типкеләй.

Трактор булғас, эш еңеләйҙе.

1929 йылда Яхъя ауылынан ун алты хужалыҡ бүленеп сығып, үҙҙәре бер коммуна тоҙөнөләр! Ғәйнит ҡарттың тырышлығы менән коммунарҙарҙың өйҙәренә радио үткәртелде. Салауат районында беренсе булып ошо ауыл радиолаштырылды. Шуға уны Радио ауылы тип йөрөтә башланылар.

1928—1929 йылдарҙы Бирҙәш йылғаһын быуып, Радио, Яхъя, Ишембай, Миндеш ауылдары тирмән ҡорҙолар. Уға он һалдырырға Кропачевонан да, Ҡатау заводтарынан да килә торғайнылар. Кропачево урыҫтары ярҙамында Ғәйнит ҡарт, шул тирмәнгә электр двигателе тоташтырып, өйҙәрҙе яҡтыртты. Һыу көсөн Ғәйнит ҡарт иген һуҡҡыс, елгәргес машиналарҙы хәрәкәтләндереү өсөн дә файҙаланды. Беҙҙә был эштәрҙе башҡа яҡтарҙағы кеүек ат йә ҡул көсө менән эшләүҙе белмәнеләр.

Оҫта булыу бына нимә эшләтә ул.

## «ДӘЖЖӘЛ»

Борон шулай тирҙәр ине: «Заман ахыры етер. Музыкалар уйнатып Дәжжәл * килер. Килер ҙә, имանһыҙҙарҙы эйәртеп, Ҡафтау артына алып барып ташлар. Ҡафтау артында әре-әре йылан-саян бар. Шулар иманһыҙҙарҙы ашап бөтөрөр. Дәжжәл артынан Йәьжөзмәьжөз* сығып, ер ҡыртышын ҡыҙыл балсыҡҡа тиклем ашар. Шуға ҡәберҙе ҡыҙыл балсыҡ сыҡҡанға тиклем ҡаҙып, мәйетте шул ҡыҙыл балсыҡҡа һалып күмәләр».

«Дәжжәл килгәндә, музыкаһына ҡыҙығып, артынан эйәрмәҫ өсөн, йәшенеп, ҡолаҡҡа мамыҡ тығып, тирмән тартып ултырырға кәрәк, имеш»,— тип тә һөйләрҙәр ине.

20-се йылдар аҙағы. Ваҡ артелдәр дәүере. Бер заман ауылда шау-шыу сыҡты.

— «Фордзон» килә!

— Трактор килә!

Бала-саға, бисә-сәсә, йәш-елкенсәк — барыһы ла (ғәскәрме ни!) тырылдаған тауыш ишетелгән яҡҡа олаҡты. Өлкәндәр:

— Дәжжәл килә! Заман ахыры етте! — тип, тәүбәнән ҡайта-ҡайта, тәкбар әйтеп*, өйҙәренә югерештe.

Әхмәт тигән ҡарт ҡайтып ингән дә, ҡолаҡтарын тығып, түлобона уранып, мөйөшкә боҫҡан. Үҙе:

— Йәшәү бөттө... Дәжжәл килә... Заман ахыры етте,— тип илай, ти.

Әхмәт ҡарт илап ятып ҡалған, тәҙрәләрҙе зыңғырҙатып, Ҡаранай яғына трактор үтеп тә киткән. Котә ҡарт, котә, бер ни ҙә юҡ.

Аҙаҡ үҙебеҙгә лә трактор килде. Хәлил менән Әбделхәй тәүге трактористар булды. Шулайтып, Әхмәт ҡарттың «дәжжәл»е менән иген игә башланыҡ.

## «САХАЛИН» ЕРЕ

Был урындың исеме колхозлашыу осоронда ғына барлыкка килде. Башкалар колхозға инеп бөттө.

— Кергән һеҙ керегеҙ. Беҙ кермәйбеҙ,— тип байыраҡ бер нисә кеше колхоздан ситтә ҡалды. Уларға Оҙонкүл мөйөшөнән ер бүлеп бирҙеләр. Шул урынды «Сахалин» ере тип йөрөтә башланылар.

## МӘТӘЙЕС КҮПЕРЕ

Колхозлашыуҙың тәүге йылдарында беҙҙең Ғафури районындағы Табын ауылында МТС ойошторола. Беҙҙән унда туранан йөрөү өсөн йылға аша күпер һалалар. МТС юлында һалынғанға, ул күперҙе Мәтәйес күпере тип йөрөтә башлағандар.

# БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ

## ӘБДЕЛХАҠТЫҢ БАТЫРЛЫҒЫ

Фронтта саҡта Ишембай районы Тирмән Йылға ауылынан бик яҡын дуҫым бар ине — Әбделхаҡ Ғәйетколов. Үлеп ҡалды, бахыр.

Был шулай булды. Латвия ерендә исемһеҙ бер йылға аша понтон күпере һалабыҙ. Саперҙар взводында инем мин ул саҡта. Дошмандың доттары йылғаның икенсе яғында ике йөҙ метр йыраҡлыкта. Шул доттарҙағы пулеметтарҙан бер туктауһыҙ аталар, күпер һалырға әмәл юк. Шул ваҡыт Әбделхаҡ взвод командире янына килде лә:

— Иптәш өлкән лейтенант! Немец доттарын юк итергә миңә рөхсәт итегеҙ,— тине.

— Ярай, хәйерле юл, Ғәйетколов,— тине командир.

Әбделхаҡ доттарға табан шыуыша башланы. Беҙ ҙә, уға ярҙам булһын тип, амбразураларға ҡарап автоматтан атабыҙ.

Бына Әбделхаҡ дотҡа яҡынлашты. Граната һелтәрлек кенә ара ҡалды. Әбделхаҡ ҡалҡына бирҙе лә бер-бер артлы ике гранатаны амбразураға ырғытты. Бер доттың ике амбразураһы бер юлы тип әйтерлек тонсокто. Ләкин икенсеһе атыуын дауам итте. Әбделхаҡ шуныһына таба үрмәләй башланы. Ун биш метр самаһы ҡалғас, теҙләнеп, граната бәйләмен дотҡа ташланы. Ут нөктәһен төтөн ҡапланы. Беҙ ҡыуаныстан ҡысҡырышырға ла өлгөрмәнек, дот яңынан ата башланы. Аяғүрә баҫып өлгөргән Ғәйетколов сайҡалып китте лә ергә ауҙы.

— Сират һеҙгә, рядовой Билалов,— ти взвод командире.— Һаҡ булығыҙ.

— Тыңлайым.

Автоматым менән гранаталарҙы алдым да Әбделхаҡ шыуышкан эҙҙән дотҡа ҡарай киттем.

...Дотты шартлаттым да яҡташымдың хәлен белергә шыуыштым. Әбделхаҡ иҫән түгел ине инде. Иптәштәрем янына уның үле кәүҙәһен генә күтәреп алып килергә яҙғайны миңә.

Батыр һуғышсыны Балтик буйында шул исемһеҙ йылға янында ерләнек. Үлгәндән һуң уға I дәрәжә Дан ордене бирелде. Мин дә юғары награда алдым: «Батырлык өсөн» миҙалы менән бүләкләндем.

## СОС ЕГЕТ

Беҙҙең полкта Алмаҡаев тигән элемтәсе бар ине. Бик сос егет ине ул, бер ҙә аптырап ҡалмалы түгел ине. Ниндәй генә ҡыйын хәлгә ҡалмаһын, ялт итеп килә лә сыға.

Бер ваҡыт шулай наступлениенең ҡыҙған осоронда, беҙҙең частәр фронтты йырып эскә инеп киткәс, Алмаҡаевты саҡырып алалар ҙа ашығыс пакет менән «оло йортка» ебәрәләр. Теге пакетте ала, атына атлана ла китә. Был инде төнө менән була. Ҡараңғы. Күҙгә төртһәң дә, күренмәй. Юл таныш түгел. Әй китә был, әй китә, бер ауылға барып етә. Шунан, бер аҙ килгәс, тегене туҡтатып алалар ҙа бер русса, бер немецсә һорай башлайҙар.

Был ни хәл? Алмаҡаев сразы эште төшөнөп ала: ул дошман патруленә тап булған икән. Нишләргә? Шунда уҡ атын шпорлап ебәрә — һикереп, сабып үтеп тә китә.

Ну, хәҙер гел былай саптырып ҡына үтеп булмай бит инде. Паролде белеп алырға кәрәк. Шунһыҙ хәҙер бынан сығып булмай.

Атын бик һәйбәтләп кенә канауға төшөрә лә йәйәүләп хуторға килә был. Арттан ғына килеп, иң ситтәге йортка инә. Инһә, ята бер немец. Тауыш-тынһыҙ ғына тегене бәреп үлтерә лә был, кейемдәрен кейеп, урамға сыға. Ауылдың ситенә генә килеп, юл өҫтөндә баҫып тора был. Әҙерәк йөрөп алған була, йәнәһе, часовой була инде.

Шунан килеп сыға бер офицер.

— Пароль?

Офицер паролде әйтә. Быға ни шул ғына кәрәк инде! Атын менеп алып, рәхәтләнеп дошман тылын айҡап йөрөй-йөрөй ҙә, бик күп кәрәкле сведениеләр алып, иҫән-һау үҙебеҙҙең «оло йортка» ҡайтып етә.

## МЫЙЫҠ

Беҙҙең полкта бар ине ике дуҫ — береһе Ишбулатов, икенсеһе Бикбулатов. Икеһе лә бер райондан, бер колхоздан. Икеһе лә йәш, икеһе лә ыҫпайҙар.

Һуғышҡа килгәс, улар икеһе лә олоғайып киттеләр. Икеһе лә бер юлы мыйыҡ ебәреп алдылар.

Ҡыҙыҡ ине уларҙы мыйыҡ менән күреүе. Тик оҙаҡҡа барманы, бер аҙна эсендә мыйыҡтары юҡ булды ла ҡуйҙы.

Ул саҡта беҙ оборонала ята инек. Бөтә тормош ер аҫтында бара. Шулай бер саҡ теге Ишбулатов тигәне Бикбулатов блиндажына ҡунаҡҡа килә. Мыйыҡтарын һыпыра-һыпыра былар оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултыралар. Шунан Ишбулатов, бер ҡыҙыҡ булһын тип, иптәшенә ҡарап ала ла әйтә:

— Шул мыйығыңдың бер бөртөгө өсөн күпме һорайһың?

Бикбулатов та тапҡыр егет ине. Ул да аптырап тормай:

— Ана шул ҡаршыла йөрөгән немецтәрҙең береһен бер атыуҙа үлтерә алһаң, ошо затлы мыйыҡтың бер бөртөгөн йолҡоп алыу шәрәфенә ирешә алырһың,— тип яуап бирә.



Тегеһе һикереп тора. Винтовкаһын ала, бер ярты сәғәт һағалап тора ла тоҫҡап атып ебәрә. Алыҫта бер фашист һалдаты тәгәрәп китә. Ишбулатов, еңгән ҡиәфәт менән килеп, иптәшенең мыйығына йәбешә. Китә көлош, китә ҡысҡырыш... Был номер тегеләрҙең икеһенә лә оҡшап ҡала. Шунан икенсеһе, Бикбулатов тигәне, атып ебәрә. Тағы бер фриц сәнселеп барып төшә. Шунан: «Байрам аныҡ ҡара ҡаршы»,— тип ул да иптәшенең бер бөртөк мыйығын йолҡоп ҡулына тоттора.

Шунан былар һүҙ ҡуйыштылар: күпме немец үлтерәләр, шул тиклем мыйыҡ йолҡошорға. Әйтәйек, икенсе көн Бикбулатов биште үлтерһә—биш бөртөк йолҡа. Тегеһе етене үлтерә—ете бөртөк йолҡа. Быларҙың эш ана шулай ҡыҙып китә. Үлгән фашист һаны көн һайын арта бара, ә мыйыҡ икеһенең дә көн һайын һирәгәйә бара.

Шулай һирәгәйеп йәмһеҙләнә башлағас, улар мыйыҡтарын ҡырып ташларға булалар. Мыйыҡ тарихе шуның менән бөтә. Хәҙер инде улар меңләп дошман һалдатын үлтергәндәр инде. Ул эшкә ниндәй мыйыҡ еткерәһең! Үлтерелгән фашисте иҫәпләй башлаһаң, башыңдағы сәсең дә етмәҫ!

## ЭТ ИҪӘБЕ

Бер саҡ беҙҙең полктан Алтынбаев тигән бер егет эт атып үлтерҙе. Эт тип ни этмелер инде, ни нәмә булғандыр, эткә бик оҡшашлы бер нәмә ине ул. Шулай беҙ немецтәрҙе ҡарап ятабыҙ. Бер ҙә йөрөмәйҙәр бит тегеләр. Ята торғас, шулар яғынан бер эт килеп сыҡты.

— Атайыммы?— ти Алтынбаев.

— Ат,—беҙ әйтәбеҙ. Теге атып та ебәрҙе — эт барып та төштө.

Командир тегене күреп ҡалды ла сразы заметкаға алды. Малайҙың ҡото осто, бер-бер выговор фәлән сәпәрҙәр инде, тип ҡурҡты. Баҡһаң, ул бөтөнләй яҡшыға булып сыҡты. Командир саҡырып алып әйткән: «Һин молодец, булдыраһың икән, былай булғас, эт атып маташма, немец фашистәрен ат»,—тип әйтә, ти. Шунан тегегә снайперский винтовка биреп сығарған.

Алтынбаев шулай көтмәгәндә снайпер булды ла китте. Кисә генә осраткайным әле үҙен. Мин әйтәм:

— Нисәне теге донъяға оҙаттың?

Теге әйтә:

— Йөҙгә етә хәҙер,— ти. Мин әйтәм:

— Теге тәү башлап атҡан этте лә иҫәпләйһеңме?

— Конечно, иҫәпләйем,— ти теге әйтә.— Фашист ни ҙә эт ни — барыбер түгелме ни? — ти.

## ТАНКИСТ ХӘТИРӘЛӘРЕ

### Егерме танк менән алышҡанда

Донбасс янындағы бер һуғышта егерме немец танкыһының атаҡаһына беҙҙең бер танк ротабыҙ ҡаршы торҙо. Шунда Зеленый Гай тигән бер ауыл бар. Шул урындан Днепрға бәреп сығыу өсөн, 62-се

гвардия ауыр танкылар полкы айырым һуғыша ине. Тәүҙә бер ҡалҡыулыкты алырға кәрәк. Немецтәр ҙә уны ҡулдарынан ыскындырмаҫҡа тырыша ине. Ҡалкыулыктың төбөндә генә танкыға ҡаршы сокорҙар бар. Шул сокорҙарҙың арьяғына сығыуын сыктыҡ — ары китер әмәл юк. Тегеләр һыпырып һалды ла ҡуйҙы. Башка танкылар бөтәһе лә эштән сыкты, беҙҙеке генә имен. Машина командире Абдулкин тигән сыуаш егете ине. Ул татарса белә торғайны. Орудие командире Бардеев, кесе механик Мәскәү егете Кириченко ине. Хәҙер беҙ яңғыҙ ғына. Ә полк алдына ҡуйылған бурыс үтәлмәгән. Полк командире килде лә:

— Йөҙ-йөҙ илле метрҙай барығыҙ ҙа, бер нәмә итеп, шул егерме танкының юлын быуып ҡарағыҙ, егеттәр. Мин дә сикмәйем, һеҙ ҙә сикмәгеҙ. Һеҙ бер метр артка китһәгеҙ, пехота ла бер метр артка сигенер. Улай ярамай, егеттәр! — тине, үтенгәндәй итеп. Ул радиоһын беҙҙең тулҡынға көйләне лә сокор артында ҡалды. Беҙ, командир әйткәнсә самаларға булдыҡ. Бүтәнсә сара юк. Немецтәрҙең егерме танкыһы килә. Нишләргә? Мин тиҙ генә танкымды ҡыялатып, уларға ҡаршы бер мөйөшөмдө генә ҡуйҙым. Былай итһәң, был яктан атһалар ҙа, теге яктан атһалар ҙа, снарядтәре ҡыя тейеп, ҡаҡлығып тик торасаҡ. Минән, механик кешенән, эш ҡалманы. Хәҙер срат иптәштәргә. Улар атып тигеҙә алһалар, уңабыҙ, тигеҙмәһәләр — бөттө. Ултырам, әжәл көткән кешеләй. Ул арала немец снаряде танкының маңлайындағы бәләкәй люкте «һыйпап» өлгөрҙө (ул сакта алда ла люк була торғайны). Әҙерәк тора биргәйнек, икенсе сцаряд тейеүҙән, балансирҙең сигәһе эскә үтеп инеп, уң як бакты тиште. Тиҙ генә кранды ябып ҡуйҙым. Йәнә әҙерәк торғандан һуң, уң як ҡабырғаға килтереп бәрҙе. Радистең күҙе шарҙай булған да киткән. Ә был арала машина командире билдән тиң сисенеп ташлап, пушканы үҙе ҡороп йөрөй ине. Ул сакта танкыла 76 миллиметрлы пушка тора ине. Бәләкәй генә булһа ла, эсе эләктерә торғайны. Әле лә немецтең өс танкыһын дөмөктөрҙөк. Ҡалғандары ҡуркты, әллә ни алға килмәй, туктап ҡалды.

Үҙебеҙҙең хәл дә мөшкөл. Танкыбыҙҙың роликтәре ҡойолоп бөткән. Катоктары теүәл түгел. Шулай ҙа һөйрәлеп кенә йөрөй, бахыр. Алда беҙҙең бер танк, өҫтөнә немец танкыһы килеп менеп, туктап ҡалғайны, экипажы сығып ҡасҡайны.

— Лейтенант иптәш, терәтәйем танкыны шуға!

— Шәп булыр.

Тиҙ генә танкымды шуға терәттем дә быңа атырға тотондоҡ бит! Беҙ атабыҙ, ә тегеләр беҙгә тигеҙә алмай. Атыша торғас, немецтең дүрт танкыһы янды.

Бер ваҡыт радио аша миңә команда килә:

— Ҡотлобаев, сыҡ машинанан!

— Экипажымды яҙмыш ҡулына ҡалдырмайым! Үлһәк, бергә үлербеҙ! Нңҙә сығайым? — тим.

Немецтәр сигенгәс кенә сыҡтым. Пехота кире үҙенең позицияһына ҡайтты.

Иртәгеһенә танкыға ҡаршы ҡаҙылған сокорҙа ултыра инем:

— Ҡотлобаев, штабҡа! — тиҙәр.



Барҙым. Полк командире:

— Ниңә бойороҡто үтәмәйһең? — ти.

Үҙе йылмая.

— Һуң, экипажды ҡалдырғым килмәне. Ни күрһәк тә, бергә күрәйек тинем, — тигәйнем:

— Молодец, Ҡотлобаев. Гел шулай бул, — тине лә күкрәгемә «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордене таҡты.

## Бүләк

Варшава юнәлешендә һуғышабыҙ. Беҙҙе, 8-се гвардия танкылар корпусын, бригада һайын бүлеп бирҙеләр. Өс танк менән мин дә бер бригадаға эләктем. Ҡояш байыр алдынан ғына:

— Ошо якта немец танкылары ҡамалышта ҡалды. Шуларҙы үткәрмәгеҙ, — тигән бойороҡ биреп, беҙҙе тимер юл яғына индерҙеләр. Кәңәш итештек тә өс танкыны ла арттары менән ҡарағайҙарға терәнек. Тимер юл өйөмө беҙҙән егерме метрҙай ерҙә генә. Минең танкым юл яғынан иң ситкә тура килде. Беҙгә автоматсылар биргәйнеләр. Һәр танк янына берәр автоматсы ҡуйҙыҡ та, үҙебеҙ йоклларға яттыҡ. Тыныс ҡына булғас, һаҡтағы автоматсыларыбыҙ ҙа йоклаған да ҡуйған. Таң алдынан мотор тауыштарына уянып киттек. Ҡараһаҡ, немецтең алты танкыһы, кухня һөйрәгән бер тягачы, пехотаһы беҙҙең якка сығып килә. Ҡараңғыла аңғармай килеп, бер «пантера»[1] беҙҙең танкыларҙың береһенә менеп тә килә. Беҙҙеке әйләнә килеп атып ебәргәйне, тегенең артына беркетелгән ике ҡумтаһы ҡуптарылып барып төштө.

— Ҡотлобаев, заводи! — тип ҡысҡыра рота командире.

— Ярамай, — тим. — Беҙ яй атабыҙ. Беҙ бер аткансы, ул биш-алты снаряд ебәрә. Күрмәгәс күрмәй торһондар, — тим (мин ул сакта ауыр танк йөрөтә инем). Я-а бер заман ротный радио аша штабҡа һөрән һала башланы:

— Ҡамалдыҡ!.. Ҡамалдыҡ!..

— Тынысланығыҙ. Һеҙ түгел, немецтәр ҡамауҙа! Береһен дә имен ебәрмәҫкә!

Шул арала ракета ебәрҙеләр. Яктыла ышыкта торған ерҙән һәйбәтләп тороп ата башланыҡ тегеләргә. Беҙҙең танкыларҙы тегеләр күрмәй. Шул арала беҙҙең бер танк ике «пантера»ны ултыртып та ҡуйҙы. Ҡалғандары туктамай, ҡайҙа етте шунда ата-ата һыпырттылар ғына.

Күп тә үтмәне, яңы бойороҡ килеп төштө.

— Варшаваға етмәҫ борон Гудериандың[2] танкылары ергә ҡаҙып ултыртылған. Шуны өҙөп үтергә кәрәк, — тинеләр.

— Кис булғайны, өс танк менән барып, разведка яһаныҡ. Ысынлап та, арыу ғына ныҡынып өлгөргәндәр. Ҡарағайлыкта ғына ауыл. Унда бары-юғы утыҙ-ҡырк өй булғандыр. Урам буйлап ҡараһаң, ете йөҙ метрҙай арыраҡ «пантера»лар күренә. Ҡайһылары сокорға төшөп ултырған, ҡайһылары шул койонсә генә ағас топтәренә ҡуйылған. Ҡайтып, хәлде һөйләп биргәйнек, ике танкыны ҡалкыулыкка мендерҙеләр. Улар шунан тороп тегеләрҙе атырға тейеш бул-

ды. Беҙҙекен резервтә ҡалдырып торҙолар. Беҙ бер соҡорҙа ултыраһыҙ. Тегеләр атышырға ла тотондо. Улай-былай иткәнсе, немецтең ете-һигеҙ танкыһы борлап яна ла башланы. Мең ике йөҙ метрҙа ултырһаҡ та, беҙҙекеләрҙең егерме биш килолыҡ снаряде «пантера»-ларҙы, күршәк ярғандай ҙа күрмәй, бәреп инә лә китә. Тегеләрҙә атып ҡарай, снарядтәре беҙҙең танкыларҙы тишеп үтә алмай. Тишмәһә лә, тейеүен тейһә, зыян килтермәй ҡалмай инде. Броня тишкес снаряд-болванка килеп бәрелһә, түҙ гәнә! Болтгар ырғып, тегеләр броня эстән кителеп сығып, экипажды йәрәхәтләп бөтә. Теге ике танкыбыҙҙың экипажы ла шул сәбәптән сафтан сыкты. Хәҙер беҙҙең машинаны алға ебәрҙеләр. Машина командире Силәбенән килгән кесе техник-лейтенант Астафьев, орудие командире Ерохин тигән егет ине. Астафьев рота командире менән ҡалды. Мин, кесе механик, орудие командире менән генә киттем. Ышыҡлана-ышыҡлана бара торғас, бер соҡорға төшөп кителенде.

— Ана, бер «тигр»ҙы [3] күрәһеңме? — тиҙәр арттан.

— Күрмәйем. Мин соҡорҙа бит,— тим. Үҙем әкренләп алға шыуышам. Орудие командиренә әйтеп ҡуйҙым:

— Һин пушканды йәтешләп кенә бар. Һиңә, башняләге кешегә, тәүҙә күренер. Күрҙеңме — туҡтат!

— Булды! — тине был бәр заман. Мин, уға атырға уңай булһын өсөн, туктата һалдым да шул ыңғайҙа ук артҡы тиҙлеккә тығып та ҡуйҙым. Артҡыға ҡуйҙым да педалгә баҫып, орудие командире атыу менән, аяҡты алырға ғына ултырам. Орудие командире бик яугир, бик ғәйәр егет. Әллә ни булды ла ҡуйҙы бит был юлы: атаата — пушка ут бирмәй ҙә ҡуя. Әллә ҡурҡкан, әллә тулҡынлана. (Шунса танкыға бер үҙең барып ҡара әле. Әйтеүе генә еңел, маңлайыңа төбәлеп, өңрәйешеп торған көбәктәргә ҡаршы барыу өсөн йөрәк кәрәк шул ул.) Бактиһәң, орудие йоҙағы походтағыса тора икән. Танк командире югереп килеп етте.

— Йоҙағың походтағыса тора бит! Ал, ысҡындыра һал!

Командиребеҙ шулай тип ҡысҡырыуы булды — шартлап атылып та китте, бер «тигр» борлап яна ла башланы. Мин тиҙ генә аяҡты алып әйҙем — танкыбыҙ тегеләргә күренмәҫ булды. Немецтәр, геүелдеге сығарып, беҙҙең яҡҡа снаряд һелтәй башланы. Ә мин танкыны бер таш келәт артына ҡуйып өлгөргәйнем инде.

Ултырам. Берәү яурынға төртә. Ҡараһам — Ерохин. Ауыҙын баҫҡан. Бармаҡтары араһынан ҡан һарка.

— Отвоевался, Ҡотлобаев. Теш бөттө!— ти был. Беҙгә немец тейгеҙә алмағайны, мин әйтәм, быға ни булған?

— Откат* ваҡытында төкөнөм,— ти.

— Ҡурҡмай торғайның дабаһа. Нимә булды һиңә бөгөн, Ерохин?— тим.

— Үҙем дә аптырайым,— тигән була, бахыр.

Ерохинде шунда уҡ алып киттеләр. Урынына 1907 йылда тыуған әлеге Бардеев тигән интәште килтерҙеләр. Хәҙер Бардеев менән сыға бирәбеҙ ҙә атабыҙ. Атабыҙ ҙа йәнә йәшенәбеҙ. Бардеев йәнә бер «тигр»ҙы яндырҙы.



Бер рәттән биш «пантера» йәшерелгән. Абайлап алдыҡ та йәтешләп кенә шуларын сәпләй башланыҡ. Бардеев бик мәргән булып сыкты: берәмләп сүпләй генә бит теге мәлғүндәрҙе. Бишеһе биш усаҡҡа әйләнде!

— Тағы берәү ултыра! — тинеләр. Бер атыуҙа Бардеев уныһына ла тейгеҙҙе.

Шул арала пушкабыҙҙың төҙләнеше боҙолдо. Уны яңынан рәтләгәнсе, рота командире килеп етте:

— Яҡташ, алып сыҡ шул «пантера»ларын үҙебеҙҙең яҡҡа. Немецтәр артҡа ҡасты,— ти.

— Немецтәр китте лә ул. Әгәр мине үҙебеҙҙең артиллеристәр атып ҡуйһа?

Үҙем шулай тим, үҙем эстән генә, үҙебеҙгә алып сыҡҡанда, бик килешер ине лә ул, тип уйлайым. Командир бик көсләшмәне көсләшеүгә, китте. Мин танкымдан төшөп, бер артиллеристе эйәртеп алдым да киттем теге «пантера» янына. Яҡынлаштыҡ, йәп әйәһе тойолмай. Өҫкө люктәре асыҡ. Мәнә килеп, эскә һикерҙем. Механиге ултыра. Танк янмаһа ла, беҙҙең бер снаряд тейгән булған икән. Теге шаңҡып ҡарап ултыра, имеш. Ҡулындағы пистолетен һыпыра тартып алып, үҙен бер төрлө итеп һелтәнем дә урынына ултырҙым. Бындай танкының тышын ғына түгел, эсен дә күргәнем бар ине. Йөрөтөп ҡараған булманы. Уның тиҙлектәрҙе тоташтырыу ҡумтаһы алда тора, ә беҙҙеке — мотор артында. Идара итеү ғәләмәттәре беҙҙекендәге кеүегерәк; педале лә, борғос беләктәре лә. Ҡарап ултырам, ҡарап ултырам. Нисек итеп был нәмәнең моторын тоҡандырырға? Әһә, вакуум аппараты бар икән: ҡыҫылған һауа ярҙамында тоҡандырыла, имеш. Тоҡандырҙым. Хәҙер педалгә баҫам да тиҙлек беләген теге яҡҡа ла тығам, был яҡҡа ла тығам. Аяҡты алам — танк ыжламай ҙа. Йәнә ҡабатлайым — юк.

— Әйҙә, әйҙә, яҡташ!

Рота командире шулай тигәйне, күңелгә арыу булып ҡалды. Тынысландым. Тағы бер ынтылғайным, нипдәйҙер тиҙлеккә эләгеп, ауыр итеп ҡуҙғалды бит был. Юғары тиҙлеккә ҡуйғанмын да, киталмай тик ултырғанмын, имеш. Киттек. Пушканы артҡа бороп алыныулды. Шулай итмәһәң, үҙебеҙҙекеләр сәсрәтә атырға мөмкин. Әкренләп ҡайтып еттем. Ике яктан да атыусы булманы. Немецтәр үҙҙәренеке тип уйлап атмағандарҙыр. Пушкаһы артҡа ҡуйылғанға, беҙҙекеләр ҙә һиҙенгәндәрҙер инде.

Үҙебеҙҙең яҡҡа сыҡҡансы, моторы ҡыҙҙы ла ҡуйҙы тегенең. Эшкинмәгән нәмә икән! Шулай ҙа штабҡа еткергәс, туктаталмай аҙапландым. Белмәйем бит нисек туктатырға. Тиҙлек беләген урынынан алам, икенсе тиҙлек тоташа ла ҡуя. Шулай әтләнә торғас, тоттом да бер елле генә ҡарағайға төкөттөм. Туктаны, мотор һүнде. «Пантера»ны тапшырҙым да үҙемдең танкыма югерҙем.

Аҙаҡ белдем, тегегә үҙебеҙҙең Елем-Карандап килгән Хәмидуллин тигән өлкән техник лейтенантты ултыртҡандар икән. Осраған һайын:

— Һай, якташ. Һин миңә немец танкыһын бүләк иттең бит, әй! — ти торғайны. Мин уға танк бүләк итһәм, командование үҙемде «Ҡыҙыл Байраҡ» менән бүләкләне. Сталиндән дә рәхмәт алдым.

## Намыҫланыу

Атакаға барғанда, беҙҙең өс танк нейтраль һыҙыҡ* аръяғында ҡала. Немецтәр яндырғыс шыйыҡса ташлағандар икән — экипаждар сыҡҡан да ҡасҡан. Ҡасып килеп, нейтраль һыҙыҡтағы соҡорға боҫҡан. Минең танк ремонтта тора ине. Бер ваҡыт полк командиры килде лә:

— Рекогносцировкаға * бар, Ҡотлобаев, — ти.

— Минең танк эшкинеңкерәмәй бит, — мин әйтәм.

— Бар, бар. Утыҙ автоматсы бирәм. Шул хәсрәттәр ҡалдырған танкыларҙы эвакуациялa.

— Була ул.

Рекогносцировкаға китеп барам. Шлемофонды елкәгә төшөрөп алғанмын. Бара ятһам, тегеләр, ҡурамай ғына, йылға буйында кәрт һуғып ята.

— Кил, бында кил, — тиҙәр.

— Ҡайҙа бараһың? — тиҙәр. Шулай, шулай. Һөйләп бирҙем тегеләргә.

— Ярар. Ҡайтҡас, беҙҙең хаҡта әйтерһең, нейтраль һыҙыҡта ятабыҙ тирһең.

«Моңһоҙҙар!». Эстән геңә тегеләрҙе әрләй-әрләй, рекогносцировка яһап ҡайттым.

Кискеһен утыҙ автоматсы бирҙеләр. Киттек. Танкыға йөҙ метр етмәҫ борон автоматсылар ергә ятты: немецтәр яман ныҡ ата. Улар яҡында ғына ине. Кесе механик менән радисте алдым да танкыға ҡарай шыуыштым. Барып, бер танкыны тросҡа эләктерҙем дә, эсенә инеп, моторын тоташтырып ҡарайым тиһәм, тиҙлектәрен алмағандар, имеш, барып тороп икенсеһен төкөнө лә немецтәр яғына ҡырын торҙо. Взвод командире Заводиль югереп килеп етте:

— Нимә бар, Ҡотлобаев?

— Ыҫҡындыр.

— Нишләп?

— Ыҫҡындыр тим!

Тросты ысҡындырғайны, геүләтеп тау башына сыҡ та кит мин үҙемдең танк менән. Барҙым да тегеләрҙең экипаждарына әйтәм:

— Барығыҙ, тиҙлегенән алығыҙ ҙа сатрашлап тағығыҙ, — тим.

Бер механик әйтә:

— Юҡ, йөрөмәйем. Уға немец мина ҡуйған. Шартлар хәлем юҡ, — ти.

— Ярар, ояты һеҙгә булһын! Өсөһөн дә сығарам! — тим. Бик намыҫым килгәйне. Шунда рота командире килде лә:

— Мин дә барам, — тине. (Бик һәйбәт кеше ине бахыр. Һәләк булып ҡуйҙы. Үлгәндән һуң, уға Советтәр Союзы Геройы тигән исем бирҙеләр.) Төнөн шуның менән тағы киттек. Тиҙлектән алып, моторын тоҡандырам да теге танкыларҙы бер-бер артлы үҙебеҙгә сығарам. Геүләтеп килтереп ултыртам да:

— Бына ҡарағыҙ. Төҙөк танкыны ташлап ҡасҡанһығыҙ! — тип оялтам тегеләрҙе. Шулайтып, бер төндә өс танкыны эвакуациялаאным. Үҙебеҙҙең өс танкыны ҡотҡарған өсөн, йәнә бүләкләнеләр.

## Ашыҡһаң да, ҡабаланыу ярамай шул ул

Боҙолған танкыны СПАМ*-ға тапшырып йөрогән арала, корпусҡа яңылары килгән икән. Мине яңы танкыға ултырттылар. Экипаж да яңы, йәштәрҙән генә тора. Командир беҙҙе теҙеп ҡуйҙы ла тегеләргә:

— Бына был егеттәр һәйбәт һуғыштылар. Улар һымаҡ булығыҙ, — тине.

Оҙаҡламай, йәнә һуғышҡа инеп кителенде. Беҙҙе ниндәйҙер бер часкә бирҙеләр. Бында мине берәү ҙә белмәй. Экипаж да һыналмаған. Гел йәштәр.

— Ҡурҡаһығыҙмы? — тим.

— Эйе, — тиҙәр.

— Ҡурҡмағыҙ. Беҙҙең танкыға бер нәмә лә булмаҫ, — тип тынысландырам тегеләрҙе. Рекогносцировканан һуң өсөнсө көндә атакаға киттек. Беҙҙең алда, Млада [4] ҡалаһы янында немец оборонаһын өҙөп, алтмыш километр үтеп китеп, Зәлдәү [5] ҡалаһына барып инергә тигән бурыс тора ине. Киттек. Мина ялаһын имен гене үттек. Бәй, бер ваҡыт тегеләр фаустпатрон менән сәпләй башламаһындармы! Пехотағынабыҙ көлтә кеүек йығыла. Беҙҙең хәл дә мөшкөл. Баҡтиһәң, беҙҙең һөжүмде немец алдан һиҙгән дә флангынан оборона ҡороп, танкыларын йәшереп ултыртып, йәтепләнеп көтөп торған, имеш. Мин бирелгән маршруттан сыҡманым. Ҡалған танкылар уңға тайпылғайнылар, бөтәһе лә тегеләрҙең утына эләкте. Алтмыш өс танкынан икәү генәһе имен ҡалды. Мин танкымды артҡа сигендерҙем. Взвод командире Масашвили тигән грузин ине. Снаряд ярсығы тейеп, ул еңелсә яраланды. Шунан, сигенеп килеп, бер соҡорға төштөк тә яттыҡ.

Таң атты. Иплән кенә соҡорҙан сыҡтым. Ян-яҡҡа күҙ һалам. Ҡараһам, флангылағы немец оборонаһының артында торабыҙ, имеш. Немецтәр, һырттарын ҡуйып, беҙҙән алты йөҙ метрҙай ерҙә яталар. Өс-дүрт таңкылары күренә. Күргәндәремде полк командиренә хәбәр иттем.

— Йәшеренгән соҡороғоҙҙан сығығыҙ ҙа тәүҙә танкыларын юҡ итегеҙ. Унан пушкаларын флангынан тапатып сығығыҙ, — тип бойорҙо полк командире.

— Була ул!

Ике снаряд ебәргәйнек, тегеләрҙең ике танкыһы ла гөлт. Бүтәндәрен имен ҡалған икенсе танкының экипажы яндырҙы. Шунан пушкаларын иҙеп сыҡтыҡ. Дошман юҡ ителде. Уларҙың урышлашыу тәртибен кисә белгәндә, төндәге ҡырылыш булмай ине. Һуғышта, ашыҡһаң да, алабарманланып, үтә ҡабаланыу ярамай шул ул.

## ЗАР ИЛАТҠАН ЗАМАНДА

1911 йылда булды был хәл. Ураҡ ваҡыты ине. Хәҙерге Ғафури районы Яңғыҙҡайын ауылы кешеләрен, көсләп тигәндәй, сходка йыйҙылар. Ул арала булмай, ҡаршылағы келәттең ишеге асылды, һәм унан өҫ кейеме йыртылып, бысранып бөткән, ҡулдары артҡа ҡайырып бәйләнгән Арыҫланды алып сыҡтылар. Халыҡ, Красноусол быяла заводында таҡта ярыусы булып эшләгән был егет менән нимә булды икән, тип, уйларға ла өлгөрмәне, асыуы йөҙөнә бөртөп сыҡҡан ауыл старостаһы Әхмәҙи ҡарт:

— Теге мәрйәһен дә бында, йыйын алдына, алып килегеҙ! — тип ҡысҡырҙы. Уның «мәрйә» тигәне Самат исемле бер ярлының ҡыҙы Бибисара һылыу булып сыҡты.

— Бына ошолар инде ил-йорттан бәрәкәтте ҡасырыусылар! Бына ошолар инде ер-һыуҙы ҡоротоусылар, илгә бәлә-ҡаза килтереүселәр! — тип екеренделәр мулла-монтағайҙар.— Күпә-көндөҙ күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеп, һөйөшөп торғандар, мөртәттәр! Хәҙер бына шуның язаһын татыһындар әйҙә. Шәриғәт ҡушканса хөкөм итәйек үҙҙәрен, йәмәғәт!.

Күҙҙәрен ҡан баҫҡан дин әһелдәре шунда уҡ егет менән ҡыҙҙың битен ҡоромға буянылар ҙа өҫтәренә алама сепрәк, сабаталар тағып, икеһен дә туҡмарға тигән хөкөм сығарҙылар. Шунан уларҙы урам һепергә мәжбүр иттеләр. Ә нимә өсөн? Бары егет менән ҡыҙҙың бер-береһен яратҡандары өсөн.

Был күңелһеҙ ваҡиғанан һуң күп йылдар үтте, күп һыуҙар аҡты. Ләкин Бибисара аҫнән Арыҫландың яҙмышы, «Ҡара йөҙҙәр» повесендәге Ғәлимә менән Закир яҙмышы кеүек, аянысл тамамланманы. Уларҙың саф мөхәббәттәрен бер нәмә лә һүндерә алманы, тағы ла көсәйтте генә. Бына тигән ғаилә ҡорҙолар.

1924 йылда Арыҫланды ауыл Советы башҡарма комитеты председателе итеп һайланылар. Шул саҡта мин унан:

— Йә, туған, үҙеңде урам һепертеп хурлаған кешеләргә нисек ҡарайһың хәҙер, үс алырға уйламайһыңмы? — тип һорағайным, ул:

— Юҡ, ағай, минең улай итергә теләгем юҡ, сөнки улар ул эште, динселәр ҡотҡоһона бирелеп, наҙанлыҡ арҡаһында эшләнеләр бит,— тине. Халыҡты ағартыу эшенә үҙенең бөтә көсөн һаласағын әйтте. Шулай эшләне лә.





Василька тигән рус ауылына етәрәк бер яңғыҙ ғына тау бар. Уны Сәлих тигән кеше исеме менән атап йөрөтәләр. Ҡасандыр, шул тауҙың исеме Фәзиләбейегәнтау булған. Бер йылды бесән ваҡытында унда Фәзилә исемле ҡыҙ бейегән икән.

Тауҙың Сәлих тауы тип исемләнеүенең тарихе былай булған. Ауылда Сәлих тигән бер бай йәшәгән. Ул төҫкә бик йәмһеҙ булған. Һыңар күҙе ҡыҫылып, биттәре тартышып торор булған. Үҙе ҡартайғас та, еңел күңеллелеген ташламаған. Ауылдағы иң сибәр ҡыҙға өйләнгән. Ҡыҙ ҡаршы булһа ла, байлыҡ үҙенекен иткән. Ҡыҙ ҡотолоу юлын Сәлихте үлтереүҙә генә күргән.

Көндәрҙең береһендә, һабантуй алдынан былар болонлоҡҡа, тауға сыҡҡандар (беҙҙең яҡта быны сәхрәгә сығыу тиҙәр). Йөрөй торғас, Фәзиләбейегәнтауға ла килеп сыҡҡандар. Шунан күләгәлә ял итергә ултырғандар. Сәлих йоҡлап киткәс, Фәзилә Сәлихтең арҡаһын ҡашыуын үтенгән. Шул ваҡыт ҡыҙ йәшереп кенә янында йөрөткән бысағын Сәлихтең арҡаһына ҡаҙаған. Ҡарт, асырғанып, тегенең сәсен әләктереп йолҡоп алған да ҡанға туҙып ҡолаған. Ҡыҙ йүгереп ауылға ҡайтып киткән. Ҡайтҡас:

— Бурҙар ташландылар, Сәлихте үлтерҙеләр,— тип һөрән һалған. Бик күп халыҡ йыйылып тауға барған, түрәләр йыйылған, тикшереү башланған. Сәлихтең ҡулындағы сәстән, сәнселгән бысаҡтан быны ҡатыны үлтергән тигән һығымтаға килгәндәр. Ҡыҙҙы Себергә оҙатҡандар. Ошо ваҡиғанан һуң Фәзиләбейегәнтауға Сәлих тауы тип исем ҡушҡандар. Был хәл революцияға ҡәҙәр булған.

Революция булғандан һуң, Фәзилә ауылға ҡайтып күренеп китте. Бына шул.

## АБЫҘ ҮЛЕГЕ

Беҙҙең ауылда халыҡ бик ярлы йәшәй ине. Шул ҙур ғына ауылыбыҙҙа өс бай бар ине, ҡалған халыҡ байҙарға ялланып батраклыҡ итә ине. Байҙар менән ҡатышып йәшәүсе ике муллабыҙ ҙа булды. Бына шул муллаларҙың береһе тураһында һөйләмәксемен мин.

Был мулланы Абыҙ тип йөрөтәләр ине. Халыҡ бик күп зыян күрҙе инде был Абыҙ тигән әҙәмдән. Ул үҙе урта йәштәрҙе үтеп барған ир ине. Төҫкә-башҡа таҙа ғына ине. Гел аҫтыртын ғына хәйләкәр ҡарап йөрөр ине. Никах эштәре элек муллаһыҙ булмай торғайны. Ошонан файҙаланып, Абыҙ мулла бер нисә ҡыҙҙың башына етте. (Үҙенең ҡатыны, балалары ла бар ине.) Бына һуңғы эшен мин дә хәтерләйем.

Үҙегеҙ иштеткәнегеҙ барҙыр. Яҙ булыу менән, ауыл ҡыш торған урынды — ҡышлауҙы ташлап, йәйләүгә сығып китә. Хәҙер бына Йәйгейорт тип аталып йөрөтөлгән урын ана шул йәйләү ине ул. Шунда йәйләп ятҡан ваҡытта булды был хәл.

Йәйгейорттоң һул яҡ үҙәк башы буйлап, имән араһында бер ярлы ғына кеше йәшәй ине. Минең менән тиңдәш Хәсәнә исемле

бик матур ҡыҙы бар ине. Шул ҡыҙ бер егет менән танышҡа. Ул егеттең исемен онотҡанмын. Был ике йәш кеше өйләнешергә булалар. Егеттең дә, ҡыҙҙың да ата-әсәләре был эшкә ҡаршы булмай, инәлтмәй генә риҙалыҡтарын биргәндәр. Хәҙер никах уҡытырға кәрәк. Был эш, әлеге лә баяғы, Абыҙ муллаға барып текәлгән. Абыҙ мулла инде бирелгән хәйер-мәҙар менән генә сикләнеп ҡалмаған. Ғәҙәтенсә, был ҡыҙҙы ла үҙ ҡулына төшөрөү планын ҡорған. Егет менән ҡыҙҙың туғандарына иртәгә йәштәрҙең икеһенең бергә килергә тейешлеген әйтеп ҡайтарған. Икенсе көндө егет менән ҡыҙ килгәс, ул башта егет кешегә өгөт-нәсихәт уҡыған да уны ҡайтарып ебәргән. Аҙаҡ ҡыҙға ла шул уҡ нәмәләрҙе әйтеп байтаҡ тотҡандан һуң, кисләтеп кенә: «Үҙәктең икенсе яғында йәшәүсе кешеләргә барам»,— тип хәйлә ҡорған да оҙата киткән. Йәйләүҙә бит шулай, бер кеше бер үҙәктә, икенсеһе икенсе үҙәк башында йәшәгән. Йорттан алыҫлашҡас та, Абыҙ мулла был ҡыҙға ла ҡул һалған.

Элекке ҡеүек был эш тә шыма ғына үтеп китер, мулланан ҡурҡырҙар тип уйлаған Абыҙ. Ләкин эш ул тигәнсә барып сыҡмаған. Ҡыҙ егеткә барыһын һөйләгән дә ғәрлегенән икенсе көндө үк аҫылынып үлгән. Егет бик ҡаты ҡайғырған. Ошондай ҡайғыға һалғаны өсөн, Абыҙ мулланан үс алырға үҙ-үҙенә һүҙ биргән. Үҙенең бик яҡын иптәшен әйәртеп, мулла йәшәгән яҡҡа килгән. Ләкин ул көндө теге яуыз йортонан бер ҡайҙа ла сыҡмаған. Икенсе көндө лә аңдыған егет, өсөнсө, дүртенсе көндө лә...

Тик йома көндө генә мулла йома уҡырға киткән. Йоманан сыҡҡас, Абыҙ мулла Ғәлиәскәр ҡарттарға ҡымыҙ эсергә киткән. Шунан ҡайтышлай тегеләр быны ҡулға эләктергәндәр ҙә инде. Оҙонҡараға тигән урындан түбәнерәк имәнлек араһында иҫән китәргәнсе мулланы туҡмап, ҡараңғы төшкәс, бынан ике саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы Ҡоройылға башына алып барып, ҡуйы имәнлек араһында соҡор ҡаҙып, үлер үлмәҫтән күмеп киткәндәр. Хәҙер был урынды Абыҙ үлеге тип йөрөтәләр.

Халыҡ Абыҙҙы кем үлтергәнде белде. Ләкин, эшләгән бөтә яуызлыҡтары өсөн таман булды, тип егетте яуапҡа тарттырып торманы.

## МУЛЛАНЫҢ «ЕН» КҮРГӘНЕ

Миңә һигеҙ-туғыҙ йәштәр самаһы ине. Бер көндө әсәй мунса яҡты ла:

— Бар, балам, мулла бабайыңды мунсаға саҡыр,— тине. Мулла күршелә генә йәшәй ине.

Мин һә тигәнсе әсәйемдең йомошон йомошланым.

— Алла ярлыҡаһын, балам. Рәхмәт,— тип мулла шунда уҡ ҡалушын кейеп алды ла ҡыптыр-ҡыптыр мунсаға китте.

Ҡайтып инеп бесәйем менән уйнай башлағайным, әсәйем:

— Балам,— тип саҡырып алды ла,— бар мулла бабайыңдың арҡаһын ышҡы. Һауабы булыр,— тине.



— Ярар улай булғас,— тинем дә, бесәйемде тотҡан көйө мунсаға киттем. Барып тәҙрәнән ҡарап торам. Шунда бесәйҙе ныҡ ыҫпаҡ ҡыҫҡан да ебәргәнмен. Бесәй сайылдап тороп ебәргәйне — бабай эләүкәнән лап! Ҡоланы ла төштө. Мин инде тор ҙа ҡас. Бер аҙ йөрөгәс, өйгә ҡайтһам, әсәй әйтә:

— Бабайың эллә нишләп оҙаҡланы. Бар әле хәлен белеп ҡайт!— ти. Барһам, бабай иҫһеҙ булып һаман иҙәндә ята. Ҡайтып өйҙәгеләрҙе алып киттем. Мунсаға барһаҡ:

— Ен! Ен! Бесәй, бесәй! — тип һаташа.

— Мунса ене күҙенә бесәй булып күренгән икән быныҡ,— тинеләр ололар. Бабайҙы алып ҡайттыҡ. Ҡарсыҡтар өшкөрөп, бесәй йөнө өтөп еҫкәттеләр. Мулла байтаҡтан һуң ғына иҫкә килде. Ҡабат мунса төшөргә килһәсе! Юҡ.

— Әсәйем мунса төшә килергә әйтте,— ти башлаһаң:

— Ене бар бит уның,— тип, ҡото осоп, ҡулын ғына һелтәй торғайны.

## МИНЕҢ МӘКТӘБЕМ

Егерменсе йылдарҙың аҙаҡтарында бер йәш кенә егет беҙҙең ауылға уҡытыусы булып килде. Ул шау малайҙарҙы ғына уҡытты: тәүге осорҙарҙа ата-әсәләр ҡыҙҙарын уҡырға бирмәй ҡырталашты. Минең дә ағай менән энекәш уҡый, үҙемә уҡырға рөхсәт юҡ. Етен иләргә ҡушып ҡуялар. Бүтән бер нәмә лә эшләмәйем, ултырам да етен иләйем, ултырам да етен иләйем. Боронғо өйҙә һике генә бит инде, өҫтәл юҡ. Энекәшем, йөҙтүбән ятып, минең эргәлә уҡый, яҙа. Үҙем иләйем, уның уҡыуына күҙ һалып ултырам, уның ыңғайына эстән генә уҡып ултырам. Ул хәрефтәрҙе танып бөткәнсе, мин дә танып бөттөм. Ул ҡушып уҡый башлағанда, мин дә ҡушып уҡый башланым. Үҙем һаман иләп ултырам. Бер ҙә эшем ҡалмай. Биргән етендәрен иләп бөтөп кенә торам. Энем саҡ ҡына яңылыш уҡыһа, хата яҙһа:

— Юҡ, ул улай түгел, былай бит!— тип төҙәткеләп тә ебәрә башланым.

— Ышто такой? Был ни ҡарамулла булып бара лабаһаң ултырған ерҙән,— тип тиргәйҙәр мине. Хәҙер энекәште лә миңә яҡын ебәрмәй башланылар.

— Һин уға өйрәтмә, уҡытма. Уға, ҡыҙ кешегә, уҡыу нимәгә ул?— тиҙәр.

Былай булғас, нишләргә? Энекәштең китабынан бер битте йыртып алдым да арбаҙға * сыҡҡанда-ниткәндә йәшеренеп уҡып йөрөйөм, унда Ленин портрете төшөрөлгән ине. Һәйбәт итеп уҡыйым инде. Шунан, шулай йөрөй торғас, йәнә тотол мин. Әүәлге ярлыҡты әйтәгүр. Ҡаралты былай түгел ине бит инде. Тишек-тошоҡ, үтә-мүтә күренеп тора. Арбаҙ артында Ленин тураһында уҡып торғанымды күршеләге бер әбей күргән дә торған шул. Күргән дә инәйемә ошаҡлаған.

— Ҡыҙың нимәкәйҙер уҡып тора арбаҙ артында. Моғайын, егеттәр менән хатлашалыр әле ул! — тигән.

— Бир әле, нимәкәй ул? Бир әле, — тип инәйем дөрә мине. — Ни нәҫтә уҡып торҙоң? — ти. Ярар, алъяпҡыс кеҫәһендәге яҙыуҙы алып бирҙем.

— Бына, үҙегеҙ өйҙә уҡытмағас, йыртып алғайным шул Хәйбулланың китабынан бер битте. Шуны уҡып тора инем, — тим.

— Ишу, — тигән була инәйем, — әллә нимәләр уҡып йөрөй йәшереп!

Шунан ҡулымдағы ҡағыҙҙы һыпыра тартып алды ла янып ятҡан усаҡҡа ташланы ла ҡуйҙы.

Инәйем үҙе наҙан, үҙе дингә бирелгән кеше ине.

— Ҡабат уға китапты күрһәтәһе булмағыҙ, — ти малайҙарға. Ағайымдар инәйем күрмәгәндә генә уҡыта торғайнылар.

— Ҡайҙа яҙа беләһеңме икән? — ти Хәйбулла бер заман.

Яҙам бит, әй.

— Әй апай, һин минән дә матур яҙаһың бит! — ти Хәйбулла, аптырап.

Шулай итеп, ғәрәп хәрефе менән яҙырға өйрәндем. Яҙырға өйрәнеп кенә еткәйнем, бер ваҡыт гәзиттәр латин хәрефе менән сыға башланы. Унда кәштәкәй генә урынға ғәрәп хәрефе — өҫкә, латинсәһе аҫҡа яҙып ҡуйылған була торғайны. Шул хәрефтәрҙе сағыштырып ҡарап, латинсәне лә һыу кеүек эстем бит хәҙер!

1931 йыл килде. Шул йылды йәштәрҙе йыйып, өс айғамы, ҡалай, ситкә эшкә ебәрҙеләр бит. Хәҙер ауылда уҡый-яҙа белгәндәрҙән мин генә. Етешә алмайым: хат уҡыйым да хат яҙам, хат яҙам да хат уҡыйым.

— Хәфизә — бөгөн минеке.

— Бөгөн кис миңә, — тип мине бүлешеп ала ла бөтәләр бит ауыл ҡатындары. Инәйем үҙенекен итә. Уҡытмаҫ өсөн, яҙҙыртмаҫ өсөн, һаман минән етен илатә. Хәҙер инде эш ҡулалмашҡа китте. Хат яҙырға барғанда, етенемде лә ҡалдырмайым. Ҡатындар миңә иләшә, үҙем улар булып хат яҙам. Шуның өҫтәүенә, ҡоймаҡлап, сәй менән дә һыйлайҙар. Йыл еңелдән түгел ине. Килеште ул миңә. Ҡыш буйына, шулай итеп, ҡунаҡ булып ҡына сығылынды. Яҙырға ла һәйбәтләп өйрәнеп алынылды. Аҙаҡ, ҡайтып төшкәс, ағайҙар миңә әй рәхмәт уҡып бөтә алмайҙар.

— Әй, һин иренмәй, хатҡа барыһын да яҙа инең. Шул хәтлем һәйбәт булды. Һин булмаһаң, кем яҙыр ине беҙгә хатты? Әлдә һин уҡый-яҙа белеп ҡалдың, — тиҙәр.

Туҡмалһам туҡмалдым, уҡырға, яҙырға өйрәндем. Аҙаҡтан халыҡтан рәхмәт алып ҡуйҙым. Шул булды инде минең бөтә мәктәбем.

## ПАРТИЗАН УРМАНЫ — ЗАҺИТ БАҠСАҺЫ

Ауылдың эргәһендә түмәләс кенә урын бар. Өҫтөндә сәсеп үҫтерелгән кеүек кенә ҡайын урманы. Уны беҙҙә Партизан урманы



тип тә, Заһит баҡсаһы тип тә йөрөтәләр. Нишләп улай тигәндәрме? Уның тарихе былай.

1921 йылғы йотта кеше менән малдың ғына түгел, ағас меҫкендәрҙең дә көнө бөттө. Был тирә борон шыр урман булған. Беҙ иҫ белгәндә, тау баштарында ҡарағас төптәре күп ине. Ауыл һалыныпп, халыҡ күбәйә башлағас, ныҡ ҡырғандар. Ә йот йылы ауыл эргәһенән генә утын ала башланылар. Тирә-як яланғасланып ҡалды. 1926 йыл тыуҙы. Ағас бөтөп бара. Шунан үҙебеҙ йыйылыштыҡ та кәңәш иттек.

— Ниңә беҙ үҙебеҙҙең урманыбыҙҙы үҙебеҙ ягып бөтөрөргә ултырабыҙ әле?

— Ҡалдырайыҡ сауҡалыкты йәм өсөн. Тейеүсе булмаһын. Кем дә кем тейә, шуға штраф һалайыҡ.

— Улай булғас, ағай-эне, бер күҙәтеүсе, ҡарауылсымы, хужамы кәрәк була түгелме?

— Нимәгә ул хужа? Бөтәбеҙ ҙә хужа.

— Юҡ. Мин ҡарармын. Бөртөгөн дә ҡырҡтырмам, — тине берәү. Ул граждандар һуғышында Кашириндәр отрядендә ҡыҙыл партизан булып дан алған Заһит Борханов тигән ағай ине. Шулай итеп, Заһит ағай урманды ҡарауыллай башланы. Һис кемдән ҡырҡтырманы. Тәүҙә ҡыйын һымаҡ ине. Эргәлә урман. Ә һиңә утынға әллә ҡайҙа сығып китергә кәрәк. Әкренләп күнектек. Шунан ни был урманды Партизан урманы тип йөрөтә башланылар. Заһит ағай ағас ҡарауыллап ҡына торманы, колхозда ине уның төп эше. Шулай булһа ла, өлгөрә ине. Бала-сағанан сыйырсыҡ оялары ҡуйҙыртты, ҡолаған, ҡыуарған ағастарҙы үҙе ҡарап ҡына утынға алдыртты. Урманды баҡса һымаҡ ҡына итеп тотто. Шуға уны Заһит баҡсаһы тип тә йөрөтә башланылар. Ул үҙе ауырып 1935 йылда үлде.

Аҙаҡ ул урманды мин ҡараным. Миңә лә байтаҡ булашырға тура килде. Бер ваҡыт, 1950 йылмы шул, колхоз председателе кәрәк-яраҡҡа тип ҡайынлыҡты ҡырҡырға ҡушҡан. Мин тимерлектә эшләй инем. Әйткән кеше юҡ, һораған кеше юҡ. Ҡырҡҡан да ташлағандар. Нимә эшләргә? Аптырайым бит инде. Шул мәлдә генә Абдулла Йыһаншин тигән депутатыбыҙ килеп төштө. Барҙым да быға әйтәм:

— Хөкүмәт ағас үҫтерергә әйтә. Нимә эшләп беҙҙекеләр бар ағасты юҡҡа сығара. — Шулай тинем дә һөйләп бирҙем урмандың тарихен. Теге тотҡан да мин әйткәнде райкомға еткергән. Председателде бюроға ҡуйып тороп ҡыҙҙырғандар. Майҙай һеңде тегегә.

Заһит баҡсаһына бәйле тағы бер ваҡиға хәтерҙә. Уныһы шулай булды. Электр линияһын үткәрергә кәрәк ине. Шуны үткәреүселәр юлды юрый урмандың уртаһынан билдәләгәндәр. Әлеге лә баяғы, ағасын ҡырҡып, һатып эсергә инде. Уны ла беҙгә аңғартҡан кеше юҡ. Төш мәле ине, күмәкләшеп эштән ҡайтып килһәк, бысҡы, балта тотоп, киҫергә йөрөйҙәр бит. Халыҡ күреп ҡалды ла, балталыһы балтаһы менән, һәнәклеһе һәнәге менән, һөрән һалып тегеләргә ҡарай югерҙе. Тегеләр, ҡурҡышып, ҡоралдарын ташлай-ташлай ҡасты. Өс-дүрт саҡрым баҫтырып алып барып ташланылар. Халыҡ үҙенекен итте. Урманды ярҙырманы

Шунан аҙаҡ урманға ҡул күтәреүсе юҡ. Тейһә, биш һум штраф. Халыҡ үҙе билдәләне быны ла. Хәҙер һаҡлаусы тотмайбыҙ. Уның кәрәге лә юҡ. Халыҡ өйрәнде. Берәү бер балта күтәрмәй. Инде лә ситтән килеп тейеүсе булһа, хәҙер күреп ҡалалар, хәҙер яуапҡа тарттыралар. Ундайҙар ҙа бик тойолмай.

## АЙЫУ ТАШЫ

Мал көтөп йөрөгән Кинйәбулат көпә-көндөҙ эшен ташлап ауылға ҡайта ла:

— Айыу күрҙем,— тип яр һала. Ул мәлдә, янғын сығып, тирә-яҡта уттан ҡасҡан айыу күбәйеп киткәйне. Тиҙ генә мылтыҡ ала һалып, китә ирҙәр ат менешеп. Кинйәбулат әйткән ергә етер саҡта аттарынан төшөп, боҫа-боҫа баралар былар. Һунарсы булып йөрөгән Мөҙәрис:

— Үҙем беренсе булып атам, егеттәр. Һеҙ аҙаҡ атырһығыҙ,— ти.

— Уй, эсем ауыртып китте,— тип Кинйәбулат үҙе тороп ҡала. Эсе ауыртыу түгел, бер ни ҙә юҡ — шөрләгән. Был мәлдә айыуға етеп баралар икән. Кинйәбулат күрһәткән яҡта ята, ти. Йомағәле:

— Үҙем бысаҡ менән сәнсәм, бер ҡыҙыҡ булһын, бысаҡ менән айыу алған икән был, тиһендәр,— тип бысағын әҙер генә тотоп бара, ти.

Мөҙәрис, һунарсы кеше ни, атып ебәргән — айыу ҡымшанмай ҙа, ти. Тағы ата — айыу ыжламай, ята бирә, ти.

— Ҡуй, ҡана үҙем сәнсәйем,— тип Мырҙабулат югереп килһә, тегендә мүкле таш ята, ти шул.

Шулайтып, айыу атабыҙ тип, һемәйгән тегеләр. Хәҙер былар аттары янына килһәләр, унда Аҡъюл ауылы Ҡорманғәле көтөп тора икән.

— Айыу атҡанһығыҙ икән, айыу майы бирегеҙ әле дауаға,— тип тегеләрҙең йәненә тейә икән. Быны менән дә ҡуймаған. Ауылға ҡайтҡас: «Аҡназарҙар айыу алған, итенең килоһын өс тәңкә менән һата имеш. Дауаға кәрәк тиһәгеҙ, майын да бирә икән»,— тип хәбәр тарата был. Хәҙер ишеткән береһе килеп, тегеләрҙән айыу ите йә айыу майы һорай, ти. Быға тиклем дә ике ауыл мәрәкәләшә торғайны. Ошо ваҡиға етә ҡалды, аҡъюлдар аҡназарҙарҙан көлә башланылар. Хәҙер шул «айыу» атҡан ерҙе Айыуатҡанташ, Айыу ташы, тип йөрөтәләр. Ул — Аҡназар яғынан Һаҡмар буйлап Аҡъюлға барған саҡта Аҡһыйыр кисеүе тәңгәлендәге шырлыҡ менән ҡапланған үҙәк буйында.

## ҠЫНЙЫРАҠ

Урта ауылдан бер килен төштө. Шул килен ҡул эшенә һәләк оҫта булып сыҡты. Оҫталығы шунда ине: бөтә ауылды ҡынйыраҡлы итте. Ҡынйыраҡ тип аяҡ кейеменә әйтәләр. Тегелеше, былай ҡарап



торғанда, йорт катаһы кеүек була. Тик тирәһен ат йәки һыйыр тиреһенән йөнөн тышҡа ҡаратып тегәләр. Йоҙлоғон күп менән көплӛйҙәр (күне булмағаны тирене әйләндереп көплӛй). Ойоҡбаш ҡуңысы хәтлем генә киндер ҡуңысы, ике бауы ла була. Бауын уратып тороп һығып бәйләһәң, эсенә ҡар төшмәй. Кейгәндә, эсенә бесәндән йә, кейеҙҙән олтораҡ һалаһың.

Борон байҙар йылҡы, һыйыр һуйһа, ярлы-ябаға йыйылып:

— Боҫҡағын миңә бир, берәй эшеңдә эшләрмен,— тип тора торғайны. Ни өсөн тиһәң, ул өлөшө күп итеп эшкәртеүгә ошшауһыҙ, ҡынйыраҡҡа бара, ул ҡалын була, тиҙ йолой. Ҡынйыраҡ осоп йәпә сикә тиреһе лә бара.

Ҡынйыраҡ бик йылғыр була. Алып ташлап та ебәрә. Шуға ла:

Ҡынйыраҡ, ҡынйыраҡ,
Алып китте бик йыраҡ,—

тирҙәр ине.

Ҡынйыраҡ менән ҡоро ҡарҙа ғына һәйбәт. Апрель етеп, ҡар ипшекләнә башлаһа, шалбая ла китә. Шуға ауыҙын йыйып ала алмаған кешегә беҙҙә: «Ауыҙың апрель ҡынйырағы кеүек шалбайған»,— тиҙәр.

Бер ваҡыт (әле яңыраҡ әле ул) Златоуста булдым. Алдыбыҙҙан бер бабай бара. Ҡынйыраҡ кейеп алған был. Беҙ хайран ҡалып ҡарап бара ятһаҡ (беҙҙә уны кейеүҙе күптән оноттолар), сапа шыуып йөрөгән бер төркөм малайҙар ҙа иғтибар итә ҡуйҙы быға. Төштөләр бит быны артынан. Бара биргәс, йәнә бер килке малай тап булды.

— Ҡайҙа бараһығыҙ?

— Бына бабай әллә нәмә кейгән. Шуны ҡарайбыҙ.

Киттеләр былар ҙа эйәреп. Китеп ултыра торғас, йәнә бер төркөм малай тап булды.

— Ҡайҙа киттегеҙ, малайҙар?

— Бына, бабайҙың аяғына кейгән нәмәһен ҡарайбыҙ.

Былар ҙа эйәрҙе. Хәҙер баҙарға боролдо бабай. Тыныс ҡына килә ине, баҙарға етеп килер саҡта ҡысҡырынырға тотонмаһынмы.

— Иптәштәр, иптәштәр, ярҙам итегеҙ, ярҙам! Талайҙар, үлтерәләр.

Беҙ ҙә ҡурҡышып киттек: әллә юлек шулай өндәшмәй генә эйәреп килеп, кешене талап, үлтереп китә микән?

Хәҙер бөтә баҙар килеп быларҙы уратып алды. Ул арала милицияһы ла килеп етте. Малайҙарҙы ебәрмәйҙәр, тотоп алдылар.

— Нимә эшләйһегеҙ, малайҙар? Ниңә карт кешене талайһығыҙ?

— Юҡ, беҙ талаусылар түгел, ана, бабайҙың аяғына кейгән нәмәһен ҡыҙыҡһынып ҡарап киләбеҙ,— тине аранан берәүһе.

Шунан ни көлөштөләр, көлөштөләр ҙә ебәрҙеләр тегеләрҙе. Хәҙер бабайҙы бөтә халыҡ уратып алды. Күмәкләшеп был кейем тураһында һөйләп бирҙек.

## МИНҺАЖ ШИШМӘҺЕ

РСФСР-ҙың халыҡ артисе Ғималетдин Минһажев Ҡыйғы районының Иҙрис ауылында тыуып-үҫкән.

Ғималетдин тыуған яғын бик яратҡан, йыл һайын ауылына ҡунаҡҡа ҡайтҡан. Һәр ҡайтҡан һайын, ауыл янындағы шишмә буйына барып, сәй ҡайнатып эскән, гармун уйнап йырлаған, һандуғастар моңон тыңлаған. Сулпыларын сылтыратып килендәр һыуға төшкән. Ғималетдин уларға шаярып һүҙ ҡушҡан, таҡмаҡ әйткән, һандуғас булып һайраған, төрлө ҡош-йәнлектәр тауышы сығарған, үҙенең янына малайҙарҙы йыйған. Шул шишмәне хәҙер Минһаж шишмәһе тиҙәр.

## МӨБӘРӘК БАТЫР

Мин иҫ белгәндә, беҙҙең ауылда Мөбәрәк Сөләймәнов тигән кеше бар ине. Йәш сағында үҙе һылыу, үҙе көслө егет булған ул.

Бер ваҡыт әллә ысын, әллә ялған менән быны Минһаж тигән байҙың Йәмилә исемле йәш ҡатыны менән йөрөүҙә ғәйепләп, ауыл муллаһы суд яһаған. Ауылға ҡаршы түбәгә мендергәндәр ҙә бөтә халыҡ алдында 26 ҡамсы биргәндәр.

Мөбәрәктең бер ағаһы булған. Ул:

— Самосуд яһарға муллаға кем хоҡуҡ биргән? — тип Ырымбурға губернаторға прошение яҙырға кәңәш итә.

Егет, мулланың өҫтөнән яҙып, судҡа саҡырта. Губернаторҙан мулланың дөрөҫ эшләмәүе тураһында ҡағыҙ килә. Ләкин ауылдың байҙары мулланы бирмәйҙәр.

— Ниңә беҙ ауылдың муллаһын шул йәш егет арҡаһында әрәм иттерәйек?— тигәндәр. Дингә ышанған халыҡ тегеләр яғына ауа ла китә. Егеттең эшен суд тикшереп, ун йылға каторгаға, аръяғына тағы ун йыл Себерҙә торорға, тип хөкөм сығара.

Ә егет бик көслө булған. Ауыл тирәһендә уны йығыусы табылмаған, ти.

Верхнеуралдан бығаулап әпкиткән көйө Иркутскиҙә бер йыл ултыра был.

Ыристандарҙы * һәр көн тышҡа сығарғандар. Бер көндө шулай сыҡҡан саҡта, Мөбәрәк ҡапҡа төбөндә 25 ботлоҡ тимер бағана ятҡанын күреп ҡала ла, бығауҙарын шалтыратып, әйелә килеп күтәреп алып, килтереп стенаға һөйәп китә. Надзирателдәрҙән берәү стенаға һөйәлгән әлеге тимерҙе күреп:

— Кем уны бында ҡуйҙы?— тип һорай икән.

— Унымы, уны Мөбәрәк Сөләймәнов ҡуйҙы,— тиешкәндәр ыристандар.

— Булмаҫ, уны күмәкләп килтергәнһегеҙҙер,— тип ышанмай, ти надзиратель. Был һүҙҙең дөрөҫлөгөнә ышаныу өсөн:

— А ну-ка, кире урынына һал! — тип ҡысҡырған. Мөбәрәк, һә тигәнсе, килтереп тә һала.



Төрмә түрәләре Мөбәрәктең ҡурҡыныслы эш менән әләкмәгәнен яҡшы белгәндәр. Тик власть кешеләре хөкөм иткәнгә, уларҙың абруйын төшөрмәҫ өсөн, башҡа ыристандар менән тотҡандар, ти.

Бер ваҡыт, коронование ваҡытында, Ҡазанда ҙур байрам булыуы, унда төрлө һөнәр буйынса ярыш үткәрелеүе тураһында хәбәр тарала. Әлеге надзиратель Мөбәрәкте төрмә начальнигенең иҫенә төшөрә.

— Беҙҙә бер башҡорт егете бар. Уның 25 ботло тимерҙе әһ тә тимәй күтәреүен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Давай, беҙ уны көрәшергә ебәрәйек,— тип әйткән.

Мөбәрәккә ул саҡта егерме биш йәштәр самаһы ғына була. Әлеге надзиратель әйткән көндән башлап егетте яҡшы ашатып, тышҡа йышыраҡ сығара башлайҙар. Шунан стражниктәр уны Ҡазанға килтерәләр.

Көрәш майҙанында төрлө яҡтан килгән күп көрәштәрҙә еңеүсе булып йөрөгән данлыҡлы көрәшселәр була. Мөбәрәкте лә көрәшселәр исемлегенә теркәйҙәр. Әлек ярыштар ваҡытында берәй бай көрәшсегә залог һалған. Быға бер генерал үҙенекенә итеп залог бирә.

Көрәш башлана. Шарт буйынса бер юлы өс кешене еңергә кәрәк була. Ә Мөбәрәк бер ынтылғанда 5—6 кешене быраҡтырмайынса ултырмай, ти. Яҡын тирәләрҙән килгәндәрҙе еңеп бөтә. Тағы Питерҙән килгән ике көрәшсе була. Уларҙың билдәре, сыйырлы билбау менән быуылып, бөйөрҙәре тиңендә тотҡа һымаҡ тоҡан эшләнгән булған. Шул тотҡа һымаҡ тоҡандан тотоп, башы аша һелтәгән дә ҡуйған Мөбәрәк быларҙы ла.

Мөбәрәккә беренсе бүләк бирелә. Шул ваҡытта халыҡ был егеттең кем булыуын бик үтенеп һорай башлаған.

— Ул бер ҡатын менән шаярған. Шуның арҡаһында ун йыл каторга, ун йыл иректә һөргөн биргәндәр,— тип әйткәндәр.

Халыҡ губернаторҙан:

— Егеткә тик ун йыл иректә һөргөн генә булһын,— тип һораған. Губернатор ризалыҡ бирмәгән, ти.

Рәсәйҙә революция булғас, бар ыристандар ҙа ҡотолалар. Шулай 1924 йыл, утыҙ өс йыл ситтә йөрөгәндән һуң, Мөбәрәк ап-аҡ ҡарт булып ҡайтып төшә. Тик ул ауылдағы үҙенең тиңдәштәре кеүек һаҡаллы булмай, оҙон мыйыҡлы, түштәре яҫтыҡ кеүек ине. Түштәре эйәге менән тоташып торған бәһлеүән бер кеше ине. Ауырлығы ла 6—7 бот самаһы булғандыр, моғайын. Оло йәштәрҙә булһа ла, һабантуйҙа егеттәр көрәшкән ыңғайға, ҡарт бөркөт шикелле, талпынып-талпынып ултырыр ине. Ысындан да, бәйле бөркөт кеүек ине ул. Бәйле кеүек булмай һуң! Һөргөндә саҡта күргән ыҙалары үҙенекен иткән инде. Бабай шул йылды донъя ҡуйҙы.

## ИҒЫТ ҠАРТ

Сураман [1] ауылында Иғыт тигән бер ҡарт була торғайны. Ҡартайһа ла, бик көслө кеше булыр ине. Ат менән бер ваҡытта ла кешенән борола белмәҫ ине. Әлек, йәш сағында, көстә берәүгә бер һы-

натмаған кеше булған. Айырым сакта шулай сабын өсөн бер саҡ бәхәс сығып китә. Шул бәхәстә Иғыт ҡарт үҙенең кемлеген күрһәтеп, тирә-яҡта дан алған. Ул былай булған. Вятский утары [2] араһындағы сикте сабып, сурамандар бер ваҡытта ла унын бесәненә рәхәтләнә алмағандар. Сабын бүлергә йәрәбә һалған ваҡытта, шул сик сыҡҡан кеше, уны сапҡандан, бөтөнләй бесән сапмағанды артыҡ күргән. Ә үҙ ризалығы менән бирәү ҙә ул сабынды сапмаған, ти. Шулайтып, ыҙалай торғас, был сабынды йәрәбәһеҙ-ниһеҙ әлеге Иғыт ҡартҡа бирергә булғандар. Иғыт ҡарт алған был сабынды, сабырға булған. Сабырға булып, ҡыуыш ҡороп ятҡан. Был ҡыуыш ҡороуы була, Вятскийҙән бер рус байы килә лә:

— Кит бынан! Был ер беҙҙеке,— тип дәғүәләшә башлай. Иғыт әйтә:

— Юҡ, мин сабам.

— Юҡ, китһең.

Шулайтып бәхәсләшәләр ҙә, бәхәсләшкәндең һуңында теге бай әйтә:

— Мин бер көслө кеше килтерәм. Өс тапҡыр шуны еңә алһаң, сабын һинеке. Инде лә еңә алмайһың икән, мин сабам.

— Килтер,— ти, Иғыт әйтә. Бай Верхнеуральскийҙән бик көслө бер кеше килтерә. Иғыт ҡарт өс көрәшкәнде көтөп тормай, ҡыуышынан сыға килеп, йыға һуға ла ҡуя теге кешене. Көслө тигән кеше ҡаса ла китә.

— Ярар. Тағы ла көслөрәк кеше килтерермен,— ти бай.

Был юлы ул Магнит яғынан бер көслөнө табып килтерә.

Иғыт сәй эсеп ултырһа, тегеләр килә, ти. Килә лә теге батыр әйтә:

— Давай, ҡул менән көрәшәбеҙ,— ти.

— Юҡ, мин көрәшмәйем, һуғышам,— ти, Иғыт әйтә. Әйтеп тә бөтә — тегене йыға һуғып һалып та ҡуя. Һелкетеп, һелкетеп төшөрә.

— Иғыт, хватит, Иғыт, хватит,—тип ялына, ти теге байҙың көрәшсеһе.

— Ярар, Иғыт, пока сабыныңа булашмайым. Ауылыңа бер көслөнө килтереп, тағы көс һынаштырырмын,— ти бай.

Иғыт, бесән сабып, кәбән итеп ҡойоп ултыртып ҡуя. Шунан теге талашлы урынды гел ул ғына саба башлай.

Бер саҡ Сураманға әлеге бай тағы бер батыр алып килә. Пар ат менән, ҡыңғырауҙар шалтыратып килеп төшәләр. Шунда, тип Иғыттың өйөн өйрәтеп ебәрәләр. Килә былар. Иғытты сығартып алып:

— Бына, әйткән буйынса, беҙ килдек. Хәҙер көс һынашабыҙ,— ти бай.

Халыҡ аптырай. Быларҙы нисек итеп көс һынаштырырға? Сураман ауылының йылғаһында эре-эре таштар күп. Әле лә тулып ята улар.

— Әйҙә, быларҙан таш күтәрттерәбеҙ.

— Әйҙә.

Алып барып быларҙы йылға буйына, таш күтәрттермәк булалар. Байҙың батыры күрһәтелгән ташты тубығына тиклем саҡ күтәрә лә кире һала. Иғыт ҡарт әлеге ташты ҡосаҡлап ала ла... ҡайта ла китә. Алып ҡайтып, өйөнөң мөйөшөнә һалып ҡуя.

— Ай батыр икәнһең, Иғыт. Һиңә ҡаршы сығыр кеше әле тыумаған икән. Мә, үҙеңә, мә, ауылыңды һыйла,—тип бығa әлеге бай, ҡутарғансы аҡсалар, эсемлектәр бирен, ҡайтып киткән, ти, батырын ултыртып алып.

Иғытты бөтәһе лә Иғыт тимәй, Иғыт батыр тип кенә йөрөтә башлағандар. Шулайтып, дан алған ул егет сағында Иғыт ҡарт.

Аҙаҡ Вятскийҙәр Сурамандар менән сабынға талашыуҙы ҡуйғандар. Ә Иғыт рәхәтләнеп теге талашлы сик буйында бесән эшләр булған. Шуға ул урын Иғыт батыр сабыны тигән исем алған.

## САФА МЕНӘН ИВАН ПОДДУБНЫЙ [1]

Архангель яғында көрәшсе булып дан алған Сафа йыйындарҙа эргә-тирәләге батырҙарҙы еңеп бөткәс, ситкә сығып китеп, көс һынашып ҡайтыр булған. Ҡайҙа булһа ла, Сафаның билен алған, беләген бөккән кеше табылмаған, ти. Шулай йөрөй торғас, был руста Иван Поддубный тигән бик ғәйәр көрәшсе барын белеп ҡала. Шуның менән алышмаға итә.

— Еңелһәм еңелермен, бер алышмай ҡалмам,— тигән Сафа.

— Ҡуй, Сафа, буш менән ҡыялма,— тип ҡараһалар ҙа, алдына алғанын ҡуймаған, көрәшергә булған. Киткән был Иванды эҙләп, ҡалайтһа иткән, Иванға барып еткән, үҙенең теләген әйткән. Риза булған Иван.

— Тик нисек көрәшәбеҙ? Һеҙҙеңсәме, беҙҙеңсәме? — тип әйткән, ти, Иван.

— Һин үҙеңсә, мин үҙемсә,— тине, ти, Сафа.

Сафа инде башҡортса көрәшмәксе булып, билбауын ҡулына алып, һыңар осон ныҡлап тотоп, һелкенеп йөрөй башлағайны, туҡтаттылар, ти, быны.

— Һин нимә эшләйһең, егет? Был билбау нимәгә һиңә?

— Юҡ, улай булмай, булмай. Ташла, билбауыңды. Бында ҡоро ҡул менән генә көрәшәләр.

— Ярай, алайһа, һеҙҙеңсә булһын.

Шарт ҡуйышалар. Шарт буйынса өс тапҡыр көрәшергә. Тәүге икәүһе һаналмай, өсөнсөһөндә кем еңә, шул еңеүсе була.

Бер заман халыҡ гөж килә, китә көрәш майҙанда. Бер Иван, бер Сафа өтөп алып бара, ти. Сафа, донъяны гиҙеп күп йөрөгән кеше нисегерәк көрәшә икән тип, Иванды ңйын йәйләңҡырап шулай йөрөй торғас, ике тапҡыр йәлп итеп ҡалғанын аңғармай ҙа ҡалды, ти.

Һуңғы алыш башлана. Ен кеүек йөрөй Сафа. Һис бил бирмәй ҙә ҡуя. Аптыраған, ти, Иван. Шулай йөрөй торғас, алып тороп башы аша атып бәргән — Иван гөп итеп барып төшкән. Шунан тора килеп.

— Ай, молодец, ир икәнһең, Сафа. Бар икән башҡорттоң бер бөркөтө! — тип, ҡуш ҡулын бирен, арҡаһынан ҡаҡҡан да үҙенең ебәк сапанын Сафаға япҡан, ти.

## САФАНЫҢ ҮЛЕМЕ

Сафа ул Тирәкленең[1] беренсе коммунисе ине. Һай, шәп коммунист ине. Яндырып йөрөр кеше ине. Бөтә коммунистәр Каширингә ҡушылып һуғышҡа китә. Ауылды ла ҡарарға кәрәк, тип Сафаны ауылда ҡалдыралар.

Волостә Сафаны военком итәләр. Волость ревкомының председателе аҡтар яҡлы бәндә булып сыға. Ул Сафаны үҙҙәре яғына ауҙармаҡ була. Сафа бик тура һүҙле ҡыйыу кеше ине. Түҙмәй, халыҡ алдында уға йыш ҡына һүҙ тейҙерә. Байҙарҙың быға бик асыуы килә. Ауыл муллаһы Мулләхмәт тегеләрҙе тағы ла ҡотортобораҡ ебәрә. Сафаны халыҡ күҙенән төшөрөр өсөн, бер сир эҙләй башлайҙар. Үлтереп кенә ташлаҙар ине, халыҡтан ҡурҡалар. Халыҡты яҡлай бит инде Сафа, халыҡ Сафаны яҡлай. Сафаны, Сафа кеүек тура һүҙле бүтән коммунистәрҙе халыҡ күҙенән төшөрөр өсөн, байҙар, байҙар яҡлы түрәләр уларҙы уғрылыҡта ғәйепләргә булалар. Шул көндәрҙә генә бер латыштың һыйыры юғала.

— Латыштың һыйырын,— тиҙәр тегеләр,— динһеҙ Сафа коммунистең генә урлауы мөмкин, башҡаның ҡулы теймәҫ.

Был ваҡытта Сафа ҡайҙалыр киткән була. Шунан файҙаланып, ауыл ҡарттарын һөскөртөп, Мулләхмәт халыҡты нык ҡыҙҙырта, ярһыта.

Оҙон билле арба менән Сафа киткән еренән ҡайтып килә икән. «Был нишләп халыҡ геү килә»,— тип туҡтауы була, тегене ярып алып та китәләр. Кем ярыуҙан баш тарта, уның үҙен яралар. Оҙон билгә һалып яралар Сафаны. Шунан мәсет янына килтерәләр. Сафа иҫенә килгән һайын халыҡҡа:

— Яңылышаһығыҙ, йәмәғәт! Совет барыбер еңәсәк! — тип ҡысҡыра. Тегене бәреп йығып иҙәләр ҙә, ҡәбер ҡаҙып, тере көйө шунда ташлайҙар. Теге һаман үлмәгәс, күкрәгенә имән бағана ҡағалар...

Мулләхмәттәр еңә. Ләкин күпкә булмай ул еңеү. Сафаны ла, Сафа кеүектәрҙе лә халыҡ күҙенән төшөрә алманы.

Ауылда Совет власе еңгәс, Сафаның ҡәберенә һәйкәл ҡуйҙылар. Һәйкәл асыр алдынан, комсомолдар, уның тураһында һорар өсөн, Мулләхмәткә барғандар икән, теге мулла, ҡото осоп, үлгән дә ҡуйған. Сафа үлтерелгәне бирле ҡурҡып йәшәгән нәмә түҙмәгән, күрәһең, йөрәге шартлаған. Үлгәс тә, ҡурҡыу һалып торған Сафа үҙенең дошмандарына. Йыл һайын ауылдың тәүге коммунисенең ҡәберенә пионерҙәр хәҙер сәскә һала. Ауыл уны онотмай. Халыҡ батырҙары ике ғүмерле була инде ул.

## ИСХАҠ БАТЫР

Исхаҡты аны, Исмаҡай яғынығы, тинеләр. Күп йылдар йәшәне ул бында. Халыҡҡа кәмит күрһәтеп йөрөр ине. Хәтәр бәһлеүән ине. Оҙон бүрәнәне яурынына һалып, ике яҡҡа ла алтышар ирҙе аҫылындыра — үҙе ҡымшанмай ҙа тора торғайны. Арҡан һүҙып, арҡан



буйлап та йөрөй торғайны ул. Бер йығылмаҫ ине. Ҡайнап торған самауырҙы сәйнүге менән өҫтәлгә ултыртып, өҫтәлде мөйөшөнән тешләп күтәреп, бейеп тә күрһәтер ине. Үҙе бейеп торор, үҙе бер сайпылтмай сәй яһар ине. Унан һуң ат менән өйрәлтмәле иген һуҡҡыстың оҙон тимер ҡыуалын бөгөп уйнай торғайны. Ул ҡыуалды ауыл ирҙәре күмәкләшеп тә бөгә алмай ине. Беҙ барын ҡыҙығып ҡарап тора торғайныҡ. Берерәт Исхаҡ, ботонан тотоп алып, бер елле үгеҙҙе күтәреп бәргән.

Кәмит күрһәткәндә, билдән былай сисенеп ята ла өс метрҙан осло бысаҡты эсенә төшөртә торғайны. Беҙ ах иткәнсе, бысаҡ килеп тә төшөр ине, ырғып та китер ине. Эсенә лом да төшөртор булған. Төшөртһә төшөрткәндер, һәләк көслө ине шул.

Көсөн күрһәтеп, Исхаҡ ауылдан-ауылға сығып йөрөр ине. Шулай йөрөй торғас, бер ваҡыт был беҙҙең яҡтарға килмәҫ булып китте. Уның серен аҙаҡ ҡына белдек. Исхаҡ батыр менән бергә бер ҡатын да йөрөй торғайны. Шул ҡатын, икенсе берәүҙән көнләп, бысаҡты Исхаҡ эсен ҡатырып өлгөрмәҫ элек төшөргән. Бысаҡ ҡаҙала килеп төшкән. Батыр үлеме мәрйәнән тигәне шулдыр инде: Исхаҡ үлгән.

## АЙЫУСЫ

Ошо беҙҙең Абҙаҡта бер егет бар ине. Хәҙер ул Мөхәмәт ауылында тора. Фамилияһы — Билалов, исеме — Байегет. Үҙе һыңар күҙгә һуҡыр. Шулай булһа ла бик атҡыс. Күҙ көнө һунар итеп йөрөһә, бер ҡумырыҡ төбөндә бер нәмә ҡыбырҙай, ти. Атып ебәрә — яҙлыға. Шул атыу етә ҡала, ҙур бер айыу ҡалҡып тора. Өс-дүрт атҡас, саҡ ҡолай теге. Ул Байегеттең тәүге айыуы була.

Икенсе йылына тағы бер айыу ала, йөрөй биргәс, йәнә берҙе ата.

Үткән яҙ диләнкәлә бер айыуҙы мылтыҡһыҙ-ниһеҙ, ҡоро ҡул менән тотоп алып ҡайта был. Эш былай була. Бер ҡатын (эштә ятҡанмылыр, нимелер) һыуға төшһә — айыу тора, ти. Биҙрәләрен ташлай ҙа был, аҡырырға тотона:

— Айыу! Айыу! Айыу ашай!

Тауышты ишетеү менән, мылтығын алырға ла өлгөрмәй, югерә Байегет тегенең янына. Килһә, самдиле айыу. Югереп барып тегенең өҫтөнә менә лә ике ҡолағына сат йәбешә лә ултыра. Үҙе ҡысҡыра башлай. Айыу арығыраҡ булдымылыр, йәшерәк булдымылыр, быны алып һелтәй алмай, ти. Айыу үкерә, ти, ҡатын сарылдай, ти. Ғауғаға бүтән ирҙәр ҙә килеп етә. Шуларҙың ярҙамы менән айыуҙы терелэй тотоп ауылға алып ҡайта егет.

## ХӘМИҘӘ

Аратауҙа (хәҙергесә әйткәндә, Мораҙымда)[1] колхозда ҡортсо булып Хәмиҙә тигән бер ҡатынҡай эшләй. Бәләкәй сағында уны малай Хәмиҙә тип кенә йөрөтә торғайнылар. Хәҙер айыусы Хәми-

ҙә, яңғыҙ айыу алған Хәмиҙә тиҙәр. Малай Хәмиҙә тигәндә лә, айыусы Хәмиҙә тигәндә лә күтәрерлек кеше ул. Бәләкәй сағында малайҙар ни ҡыланһа, шуны ҡыланыр ине. Ҡыҙҙарға бик ылыҡмаҫ ине. Уйнағаны малайҙар уйыны булыр ине. Яҙын Иҙел ярҙан-ярға ятканда, Байназарға [2] уҡыуға барғанында, яңғыҙы бер-ике бүрәнәне ҡыҫып ултырыр ҙа ағыр ине. Йүгереүҙә лә, саңғыла ла малайҙарындан былайыраҡ йылғыр ине. Ярыштарҙа ҡатнашып, Бөрйәнен дә, Өфөһөн дә ҡалдырмаҫ ине. Свердловскиға лә етеп ҡайтҡыланы. Шунан, малай Хәмиҙә тимәй, кем тиһең инде уны. Айыу алыуы менән дә дөрөҫләнә ул үҙенең был ҡушаматын. Ә айыу алыуы үҙе бер тарих. Ул былай булған. Хәмиҙә Байназарға барырға юлға сыҡҡан. Йәй көнө, ти. Китеп бара ятһа, арттан бер һыбайлы килеп еткән. Хәҙер икәүләп китеп баралар, китеп баралар. Бер ваҡыт теге кешенең аты ҡолаҡтарын ҡайсылатып, бышҡырына башлаған. Ҡараһалар, алда бер ҡараҫҡы йыбырлай, ти.

— Айыу балаһы бит! — тип ҡысҡырып ебәрә Хәмиҙә.

— Уй, минең ат өркәк, мин лутсы боролайым да мылтыҡ алып киләйем,— тип теге ир сабып сыҡҡан да киткән. Ә Хәмиҙә аптырап ҡалмаған. Тотона теге айыу балаһын баҫтырырға. Айыу йүгереп барып бер ағасҡа менеп китә. Хәмиҙә лә уңан ҡалмай. Малай Хәмиҙәлеге бына ҡайҙа кәрәк була уға. Айыу балаһы сыйылдап өҫкә ҡаса, Хәмиҙә лә үрмәләүен белә... Ҡалай булғас та, тегене ағас башында тотоп алып, яулығы менән ауыҙ-моронон бәйләп алып төшә лә ауылға алып китә... Шунан аҙаҡ айыусы Хәмиҙә, яңғыҙ айыу алған Хәмиҙә тигән даны китә бының. Малай Хәмиҙә тиеүҙәренә бер ҙә эсе бошмай торғайны (кеше лә был ҡушаматты кәмһеткәндән түгел, һоҡланғандан әйтер ине), был ҡушаматына ла иҫе китмәне.

— Бала айыуҙы тотоуы нимә ул! — тигән була ҡайһы берәүҙәр. Тоторһоң! Инәһе килеп сыҡһа... Хәмиҙә уны-быны уйлап тормаған, тәүәккәлләгән. Йөрәк тә булған шул унда. Бәләкәйме, ҙурмы, айыу айыу инде ул. Ә айыусы тигән даны ни тора!

# Сәсәндәр ижады

## ИЛДЕ МАҠТАУ

*(Әйтеш)*

Ф ә р р ә х:

әррәх әйтә, һүҙ әйтә,
Бәйет әйтә, йыр әйтә.
Фәррәх һүҙгә аптырамай,
Йәрми Сәйете ни әйтә?

С ә й е т:

Сәйет йырлап бирә ул,
Сәйет көйләп бирә ул,
Донъялағы хәбәрҙәрҙе
Сәйет һөйләп бирә ул.

Ф ә р р ә х:

Фәррәх тә һөйләй хәбәр,
Сәйет тә һөйләй хәбәр.
Йә әле, күңелем булһын,
Бер хәбәр һөйләп ебәр.

С ә й е т:

Сәйет көйләй, Сәйет йырлай,
Скрипкаһын уйнай.
Сәйет маҡтай Тыуған илен,
Булдымы, дуҫ, күңелең?

Ф ә р р ә х:

Ниәттәрең изге икән,
Күңелдәрең көҙгө икән.
Тыңла бер һүҙ әйтәмен,
Һүҙемә яуап көтәмен:
Югерә-югерә буйланым,
Буйына сыға алманым.
Югерә-югерә иңләнем,
Иңенә сыға алманым.
Ул ни икән, ни икән,

Ниндәй гүзәл ер икән?

Сәйет:

Югерә-югерә буйлап та,
Буйына сыға алмаçлык,
Югерә-югерә иңләп тә,
Иңенә сыға алмаçлык,
Ул гүзәл ер шул икән —
Совет иле була икән.

Фәррәх:

Фәррәх әйтте йомакты,
Сәйет уны тиҙ тапты.
Инде тыңлап торайык,
Һинекен ишетеп карайык.

Сәйет:

Алтын менән яҙылған,
Көмөш менән тегелгән,
Үҙе бәхет шишмәһе,
Үҙе байлык шишмәһе,
Изге китап бар, корҙаш,
Ни була икән ул, юлдаш?

Фәррәх:

Алтын менән яҙылған,
Көмөш менән тегелгән,
Үҙе бәхет шишмәһе,
Үҙе байлык шишмәһе —
Изге китап шул була:
Беҙҙең Төп Закон була.

Сәйет:

Фәррәх дөрөç яуап бирә,
Әйтеп-булмай бер ни ҙә.
Тағы әйтеп кара әле,
Ниндәй һорауың бар әле?

Фәррәх:

Ун алты егет килә
Оҙон-оҙон юлдарҙан.
Ун алты егет килә
Тотоношоп кулдарын.
Бөтәһе лә матурҙар,
Бөтәһе лә батырҙар,
Бөтәһе лә бер тигеҙ,
Арала бар өлкәне.
Ун алты егет кем икән?
Шул өлкәне кем икән?



Сәйет:

Ун алты егет тигәнең
Ун алтылау ил булыр.
Туғандарса тотоношоп,
Союз корған ер булыр.
Аралағы өлкәне —
Рәсәй иле булыр ул,
Рәсәй иле, — һай, бик дан ил,
Якшы өлгө бирә ул.

Фәррәх:

Рәхмәт, Сәйет, яуабыңа,
Күпте күрәһең икән.
Уңыш теләйем йырыңа,
Көйләй беләһең икән.

Сәйет:

Рәхмәт, Фәррәх, үҙеңә,
Һинең тапкыр һүҙеңә.
Йырлайбыҙ ҙа, көйләйбеҙ ҙә,
Ололайбыҙ Ватанды,
Ололайбыҙ Ватанды!

*1939*

## ҒАТАУЛЛА ҒӘЛИЕВ

### ИҒТИЗАР [1]

Ҡартлыҡ килде, етмеш өскә [2] еткән өсөн,
Егеттәрҙәй матди эшкә бөткән көсөм.
Ҡартлыҡ көнө — күңелһеҙ көн, эсем бошҡас,
Тик тормаҫтан эшләттем мин ҡәләм осон.

Моңло анам был донъяға ник килтергән?
Күп ҡайғылар тарта-тарта беҙ иҫергән.
Һыу сыҡмаған урын ҡаҙып көтмә юҡты,
Ни хикмәттәр сығыр тиһеҙ бер иҫәрҙән?

Юнһеҙлегем билгелелер кәлямемдән *,
Наҙанлығым күренеп тора ҡәләмемдән.
Тәржемәи хәлемде лә тиҙ белерһеҙ.
Ҡараһағыҙ ҡалған эҙгә ҡәҙәмемдән *.

Замандаштар атланылар алғы яҡҡа,
Уңғанлыҡтан теҙелделәр тәүге сафҡа.
Был мәртәбә уларға аҡ бәхеттәнме,
Әллә минме ялҡаулыҡтан ҡалдым артҡа?

Тәнҡит кәрәк юлы менән әҙәм эшен,
Баҡырҙарҙан айырғандай саф көмөшөн.
Утын яһап, ағасын һал янған утҡа,
Йәнгә ятһа, ҡабул итеп ал емешен.



## I. ДОНЪЯ, ЙӘМҒИӘТ ҮҪЕШЕ

Бөтә донъя — халыҡ тулған бер ҙур карап,
Сәфәр бара сәғәҙәттең * юлын ҡарап.
Ғаҡыл, фекер — был караптың капитаны,
Ғәфләт * итһә, барса халыҡ булыр харап.

Сәләмәтлек, бәхет теләй һәр бер кеше,
Сәғәҙәттең юлын табыу — ғаҡыл эше.
Совет тотҡан бәхет юлы тәбиғи һәм
Хаҡлылығын күрһәтһен был ҡәләм осо [3].

### ҒАЛӘМДЕҢ ЗИННӘТТӘРЕ

Бар булған был ғаләм сикһеҙ хикмәт менән,
Бәндәләрҙең ғилме етмәй ҡилләт * менән.
Үҙ тәненең серен белмәҫ ғәжиз * ғаҡыл,
Ихтыярһыҙ теҙ сүгәлер зилләт * менән.

Яҙыусылар ер йөҙөнөң диңгеҙҙәрен,
Ҡара яһап, яҙһалар кис-көндөҙҙәрен.
Яҙа-яҙа тәрән диңгеҙ төгәнгәндә,
Бөталмаҫтар хисаплап күк йондоҙҙарын.

Барлығының башы юҡтыр, һис кем белмәй,
Мәңгелектер — бик йәш һаман, ҡартлыҡ килмәҫ.
Бар ҡылһа ла, юҡ ҡылһа ла көсө камил,
Һис бер көстәр ҡаршы килеп уны еңмәҫ.

Орлоҡтарға бирелгән ҙур үҫәр көстәр,
Сәскәләргә бағышланған төрлө төҫтәр.
Нәбат *, хайуан пар-пар булып бар булғандар,
Булған өсөн берһен-берһе тартҡан хистәр.

Бер секунд та тик торалмай, эшләй һаман,
Нисек тапмаҫ тәрәҡҡиҙе ошо заман.

Хисап етмәҫ ниғмәттәре күп булһа ла,
Ни хикмәттер, аралашкан якшы-яман.

Яҙам бер аҙ был ғаләмдең зиннәттәрен,
Һәр жем beлә яман ерен, зилләттәрен.
Әҙ хурлыкка сабыр кылмаҫ зәғиф әҙәм,
Хәтерләһен зиннәттәрҙең киммәттәрен.

Караһағыҙ аяҙ кистә ҙур күк йөҙөн,
Диккәт менән юнәлдереп күңел күҙен,
Күк көмбәҙен зиннәтләнгән бакса, ти(е)рһеҙ,
Сәскә яһап сәселгән шул күп йондоҙон.

Күп йондоҙҙоң кай берҙәре төркөм-төркөм,
Төркөм сәскә арттыралыр бакса күркен.
Төн буйынса ынйы кеүек ем-ем итеп,
Йәш(е)ренәләр, тыуыр сакта мөһабәт көн.

Көн сығалыр төндә кыуып, күҙен асып,
Кыҙыл кабак аҫтынан ал нурын сәсеп.
Йоклап ярым үлгәндәрҙе йәнләнһен тип,
Кабаланып төн сабалыр, нурҙан касып.

Төн кыуалыр, нур касалыр, көн батканда,
Йоко — тыныс, кара юрған ул япканда.
Ер шары бер әйләнгәндә, урап килә
Шул каскан нур беҙҙең өҫкә, таң атканда.

Төн йокоһо татлы була, был — бер хикмәт,
Якты, йылы, оҙон көн бар, был — ҙур ниғмәт.
Төн менән көн кыуышып, ул алмашмаһа,
Тормошонда тыуыр ине төрлө михнәт.

Ерҙәге күп зиннәттәрҙән йомма күҙең,
Аккан һыуҙар, күлдәрен күр һәм диңгеҙен.
Был ғаләмдең кәмалына * ғаклың етмәй,
Хайран булып кистәрендә һәм көндөҙөн.

Көҙгө кеүек күлдә йөҙгән ак коштары,
Кайып сиккән кеүек ситке камыштары.
Тәбиғәттең ямалын * күр тигән кеүек,
Каңғылдашкан оҙон моңло тауыштары.

Кыр коштары йәйҙең йәмле көндәрендә
Тауыш биреп таныша үҙ телдәрендә.
Былбылдары һайрай бакса гөлдәрендә,
Киң тәбиғәт байлығында кунакбыҙ, тип.

Күккә ашкан тауҙары бар, мен башына,
Болоттарҙан өҫкә сығып баҫ ташына.



Аҫка, өҫкә — дүрт тарафка карап торһаң,
Иҫең китер был һарайҙың нағышына.

Терәлмәгән күк буяулы түбә аҫтан,
Ғәжәп нурлы ике кандил *, епһеҙ аҫкан.
Ер иҙәнгә йәшел хәтфә келәм йәйеп,
Йыһан тулған йәп әйәһе аяк баҫкан.

Төрлө мәғдән табылалыр ер эсендә,
Иҫең булһа, коралдарын тот иҫеңдә.
Үткән мөшкөл таш заманы булыр ине,
Ике кулды уң кылмаһа һәр эшендә.

Онотма, ут бирә көндә күпме файҙа,
Ут булмаһа, мәғдәндәр ҙә килмәй яйға.
Кайһы мәғдән мең градус кыҙҙырмаһаң,
Сафланмай ул, утһыҙ эшкә кермәк кайҙа!

Ер аҫтына түшәп куйған таш күмерҙе,
Күмер булғас, яһап була саф тимерҙе.
Электрик, керосин, тоҙ, тимер булғас,
Анһат-анһат үткәрәбеҙ шат ғүмерҙе.

Киң тәбиғәт кәрәктәрҙең барын биргән,
Әйтерһең дә, мәслихәтте күптән белгән.
Утты, һыуҙы, мәғдәндәрҙе әҙерләгәс,
Иң һуңынан хужа булып әҙәм килгән.

Кояш бар, пар булһын тип барса һыуҙар,
Елдәр иҫеп, болот була ошо быуҙар.
Шул болоттан ямғыр яуып йыраҡтарҙан,
Ғарык кылып, коро ерҙең өҫтөн һыулар.

Үлек ерҙе терелтер һыу кайҙа төшһә,
Үҫемлектәр етешер, тик һыу етешһә.
Йәнһеҙ ерҙәр йән кереп, ул бакса булыр,
Иген үҫеп, унда төрлө емеш бешһә.

Ер йөҙөнә аяк баҫкан тәүге йәндәр
Башлап һыуҙан зәғиф кенә яралғандар.
Тәрәккиҙең юлын тотоп оҙак заман,
Үрсей-үрсей күп тармакка таралғандар.

Тере йәндәр булмаҫ ине, һыу булмаһа,
Ямғыр кайҙан булыр ине, быу булмаһа?
Ер шары бер тупрактан туп булыр ине,
Әҙәм, хайуан, үҫемлектәр таралмаһа.

Һыуҙар булды тәбиғәттең баш бүләге,
Үсемлектең азат булһа иң кәрәге.
Шишмә кеүек был икәүҙән акты аҙык —
Терекгәрҙең тормошонда төп терәге.

Ергә карап үскән бик күп төрлө үлән,
Тауҙа кылған үскән, күлдә үскән күрән.
Тигеҙ ерҙә төрлө үсемлек тамырлана,
Күп йөр(ө)гәндәр ер йөҙөндә күпте күргән.

Ал хәтергә икмәгенде, уң кулыңда
Ҙур ролде уйнағанын һәр уйында.
Төрлө ерҙә төрлө иген үскән өсөн,
Тормош туйың тәҙәк бара үҙ юлыңда.

Туйҙар булғас, ашайһыңдыр күп емештәр,
Емеш күргәс, куҙғала кул, кыҙып тештәр.
Һәр төрөндә есе, төсө, тәме башка,
Барлығын бел тәбиғәттә серле көстәр.

Урыны менән урмандар бар төрлө ерҙә,
Араһынан йырып үтеп булмай бер ҙә.
Әйләнәһе канса колас, үскән оҙон,
Башын күрһәң, бүректәрең төшөр ергә.

Төрлө коштар һайрашалар кунып өскә:
Төрлө тауыш, төрлө ҙурлык, төрлө төстә.
Һәр тарафтан башка тауыш ишеткәндә,
Тәбиғәттең ғәжәптәре төшөр исҡә.

Урман булғас, тулған төрлө януарҙар,
Аҙыкһыҙ торалмай һис йәне барҙар.
Тәбиғәттең дәстәрханы * әҙерләнгән,
Үҙенә хас аҙыктарын тапкан анлар *.

Әҙәм кунған дәстәрхандың түрбашына,
Татлы аҙыкты тартып алған үҙ кашына.
Кайҙа барһа — ер йөҙөнөң хәлифәһе *,
Башкаларҙы шәрик * кылмай үҙ ашына.

Хәлифәләр хайуандарҙың күрә көсөн,
Бай тәбиғәт фиҙа иткәс әҙәм өсөн,
Теләгәнсә төрлө юлда файҙаланып,
Итен ашай тултырғансы каптай эсен.

Бал йыйып, бал корто сигә бик күп михнәт,
Ебәк яһап, корто үлә күреп зилләт *.
Тәмле тәғәм *, йәмле кейем тормошонда —
Ҙур мәнфәғәт, кандай ләззәт, иң ҙур зиннәт.



Был бәҙәнгә * аралашкан йән бик киммәт,
Киммәтлене кәҙерләйҙәр кылып хөрмәт.
Табылған мал ашап-кейеп тотолмаһа,
Файҙаһы юк, мал йыйыуҙа юктыр хикмәт.

Магазингә окшар донъя, күрһәң иплөп,
Тултырылған төрлө тауар унда күплөп.
Алыу-һатыу, алыш-биреш булмағанда,
Ни файҙа бар, куйылһа ул эстән бикләп.

Был донъянан насиптәрең тик был ике —
Ашап уҙған, кейеп туҙған — шул һинеке.
Көндәрҙә бер аяк һуҙып, күҙ йомолһа,
Малың түгел, кейемең дә — кешенеке.

Төрлө-төрлө ләззәттәр бар был ғаләмдә,
Зауык тигән кеүәттәр бар һәр әҙәмдә.
Һәр гүзәлгә мәфтүн * булып талпынған йән
Ләззәт тапһа, шат йәшәй ул был бәҙәндә *.

Ил булмаһа, ләззәт татып, күңел аскан,
Төрлө йыйылыш яһап, шатлык хәттин ашкан
Донъя йорто булыр ине шул театр:
Сәхнәһе буш, уйынсылар бар(ы)һы каскан.

Әҙәмдәрҙе әҙәм юлдаш, зиннәт яһар,
Яңғыҙҙарҙы вәхшәт, хәсрәт, зилләт * баҫыр.
Зиннәттәрҙең зиннәте шул: татлы телдәр
Эстәге сер, зар, моңдарҙың барын асыр.

Ҙур таяныс ир катынға, катын — иргә,
Катынһыҙ ир йәм табалмай һис бер ерҙә.
Ике арала тәбиғи ҙур өлфәт * булғас,
Мөхәббәтле тормош тәҙәк бергә-бергә.

Балалар нур ата-ананың уң күҙендә,
Яраттыра ярты теле һәр һүҙендә.
Кеселектән күңел асар бер көлдөргөс
Үҫкәс була йәш хәлифә * ер йөҙөндә.

Йәш хәлифә йәшнәйҙер ул йәш сағында,
Көслө күкрәк күкрәйҙер ул эш янында.
Ғакыл менән эшләп ергә батша булғас,
Әҙме ни был? — Ниҙер теләй ул тағы ла.

Был йыһандың зиннәтен һис күрмәгән ир,
Һөйләп уға берәм-берәм, кылһаң тасуир,
Ниғмәт тулған якты донъя һарайына
Ғашик булып: «Ай-һай, шунда торһаң ине», — тир.

Әҙәм ғашиҡ һөйөклө был яҡты йортҡа,
Ҡыҙыҡһына, ҡыҙҙар кеүек, ҡарсыҡ-ҡортҡа.
Йәмен, тәмен, мал һөйөүҙә бар(ы)һы бирҙәй,
Ҡарттары ла егеттәрҙән ҡалмай артҡа.

Серле донъя сихырлаған, һөйҙөрә ул,
Һөйгәндәрҙе ҡай бер көндө көйҙөрә ул.
Көйҙөрһә лә зарлы, зәғиф ғүмер теләй,
Булған өсөн михнәтенән рәхәте мул.

Сикһеҙ ниғмәт хазинаһы — ошо ғаләм,
Һәр ниғмәттән өлөш алған бәни * әҙәм.
Һанаһаң да, хисабына сығалмаҫһың,
Күп борсолма, етер, шунда туҡта, ҡәләм.

### ДОНЪЯ ҮҪЕШЕ [4]

Булып урта ҡәрн * мохтаж китапҡа,
Дәрестәре китапһыҙ булды, ятҡа.

Тарих мең дүрт йөҙ илле өскә еткәс [5],
Яңы ҡәрнде башлай, урта үткәс.

Мәҙәниәт был йылдан башланалыр,
Борон булғандары ла сафланалыр.

Тыпырсынды ғаҡыл алға китергә,
Йәһаләттән *, хөрәфәттән үтергә.

Ғәреб * йорто уянды, асты күҙҙе,
Кәрәк ерҙән һөйләргә тапты һүҙҙе.

Ҡараманы папалар шелтәһенә,
Ғилем нурын ҡабыҙҙы филтәһенә.

Заман үтте, ҙурайҙы нур вә яҡты,
Тырышҡан бәндәләр ысын юлды тапты.

Ғаләмдең серҙәре бер-бер асылды,
Асылғаны күп илдәргә сәселде.

Өйрәнделәр хәреф туштан яһарға,
Табылды ҡағыҙы китап баҫырға.

Ғилем ҡалды, ғалим үлһә, мираҫҡа,
Юғалмай сөнки һүҙ, яҙғас китапҡа.

Китап берлән таралды төрлө яҡҡа,
Йыһанға арғы яҡтан бирге яҡҡа.



Ғилем тулғас әҙәмдәрҙең башына,
Яһарға белделәр төрлө машина.

Торалмай тик әҙәм бер нөктәһендә,
Тәрәҡҡи итмәйенсә гел бер ерҙә.

Электрик мөсәххәр *, газ, бохар * — быу —
Былар сарфын * кәмал тапҡан заман был.

Юлын тапты тәбиғәтте еңергә,
Керешһе атһыҙ арбалар [6] егергә.

Йөрөй ул арбалар теҙгән тимерҙән [7],
Ҡайһы бер(е)һе — теләһә ҡайһы ерҙән.

Ҡәнәғәт юҡ йөрөп ерҙең үҙендә,
Осорға ла теләй күктең йөҙөндә.

Серен белде ҡарап ҡошҡа осорға,
Муаффәҡ * булды ҡоштарҙай осорға.

Йыраҡтарға еталмаҫлыҡ ике айҙа —
Осоп бер көндә, булдылар Ҡытайҙа.

Торалманы һыу өҫтөндә түҙеп ул,
Балыҡ кеүек йөрөй аҫтан йөҙөп ул.

Телен тимер сыбыҡ ялғап оҙайтҡан,
Кәрәк һүҙҙе сыбыҡ буйлап оҙатҡан.

Ғаҡыл тапҡан тәкәмел * хәттин ашҡан,
Сыбыҡһыҙ ҙа һөйләшергә юл асҡан.

Кәрәк һүҙҙе һөйләр ул аппаратҡа,
Китер һүҙ һәр тарафҡа, бик йыраҡҡа.

Тәбиғәттең телен белгәс, шулай хәл:
Шәреҡтә * тор, ғәребтәрҙән * хәбәр ал.

Ултырып бер табында һүҙ һөйләшкән
Кеүек — бер-береһенең тауышын ишеткән.

Табылғанда тәбиғи төп сәбәптәр,
Табылыр бынан артыҡ ғәжәптәр.

Ҡуйып күҙлек [8], күҙен атты йыраҡҡа,
Уҙып китте ҡояштан арғы яҡҡа.

Ғаҡыл юл башланы серле һәр эшкә,
Килер бер көн, етер ҡуҙҙар ғәрешкә *.

Күреп күктә ҡоштың күп балаһын,
Тамам үлсәнеләр улар араһын.

Ҡарап тормай ғәреб йорто шәреккә,
Яра был көндә бер ҡылды ҡырҡҡа.

## ДОНЪЯ — ШАТЛЫҠ ЙОРТО

Бай ғаләмдә байлығыңды ал хәтергә:
Тән сәләмәт, ағзалар һау, ау(ы)ртмай бер ҙә.
Һаулыҡ һаҡлап, тыныс үә шат йәшәр өсөн,
Хужа булдың камил ғаҡыл, хөр фекергә.

Ғаҡыл-фекер осо—ҡулда оҙон арҡан,
Икенсе осон йыраҡтарға, күккә атҡан:
Ҡиммәт күҙгә ҡеүәт биргән күҙлек ҡуйып,
Сикһеҙ йыраҡ ерҙәрҙә күп йондоҙ тапҡан.

Нурлы ғаҡыл алған һайын һаман артҡан,
Хәбәр бирә бик күп эште буласаҡтан.
Тик торалмай, диңгеҙ кеүек тулҡынлана,
Хисап етмәҫ үткән хәлде белгән арттан.

Донъябыҙ әүүәл шыйыҡ бер газ булған,
Йондоҙҙар юҡ, шул газ менән бушлыҡ тулған.
Төрлө урында шыйыҡ газдар ҡуйырған һуң,
Уҡмашҡан да, йондоҙҙар һәм ҡояш булған.

Тикшерһәгеҙ диҡҡәт менән ғаҡыл эшен,
Ғәжәпләрһеҙ күп серҙәрҙе тапҡан өсөн.
Йыраҡтарға нуры төшкән ғаҡлың булғас,
Кистәрҙә лә ҡояшлылыр тар өй эсең.

Киң булыр уй, шул ғаҡылдың нуры тулғас,
Тәбиғәттең ғәжәптәрен фекер ҡылғас.
Был донъяны шатлыҡ йорто тиргә мөмкин,
Киң дәүләтле ергә батша булып торғас.

Яҡты донъя йәмле, тәмле емеш булғас,
Һәр кемгә лә шул емештән өлөш булғас,
Дуҫлыҡ менән анһат-анһат ғүмер үтер,
Бәхет кошо бар әҙәмгә берҙәй ҡунғас.

Тормош туйын бөйөк даһи Ленин ҡорғас,
Бер хоҡуҡлы, тигеҙ үә шат, имен торғас,



Күңел тыныс, эштәр еңел, йән ҡыйналмай,
Төрлө ҡорал ҡулдарыңды ҡорос ҡылғас.

Бирһәң, һөйөр нәмәһенән сабый туймаҫ,
Тыумыштан уҡ аҙғынлығын нәфсең ҡуймаҫ.
Миллиард-миллиард малға хужа булһаң да һин,
Ҡәнәғәттән сик ҡуймаһаң, шатлыҡ тыумаҫ.

Был донъяны зиндан хисап иткән ирҙәр,
Тикшерелгәс торло ҡәүм *, торло ерҙәр,
Ике яҡты ғәзел мизан * менән үлсәп,
Был һүҙҙәргә нисек ҡарап, нәҫтә тирҙәр.

## ИҪКЕ — ЯҢЫНЫҢ БАҪҠЫСЫ

Ғәйепләмә атаң-бабаң хатаһын,
Алып иҫкә бышымдарын *, ҡатаһын.

Бышымға тел тейҙермә, ул насар, тип,—
Насарҙар яҡшыларға юл асыр, тим.

Бышым бит ул ботинканың анаһы,
Резинкаңдың ҡата булды атаһы.

Боропғо — тәрәҡҡиҙең баҫҡысы ул,
Асылмаған йоҙаҡтың асҡысы ул.

Кәрәк баҫҡыс манараға ашырға,
Тороп ерҙән беренсегә баҫырға.

Теҙелгән баҫмалар — бар ҙа рәттән,
Түгел бушка — ҡуйылғандар кәрәктән,

Баҫып бер-бер, бәләнд * ергә аппырһың,
Аша баҫһаң, зарарҙы ҙур яһарһың.

Мәҙәниәт тәрәҡҡигә тотоп юл,
Берәр баҫҡыс ҡына баҫып үтте ул.

Менеп бара кәмаләттең * күгенә,
Боронғолар сәбәптер иң күбенә.

Тәбиғәттең серен кем булһа асҡан,
Улар иҫке ғилем менән танышҡан.

Хата һәйәтте * әүүәл башка алған,
Коперник тә яңы һәйәт сығарған.

Һикермәҫ бер юлы, булмаһа баҫҡыс,
Асылмаҫ сер, юҡ икән ҡулда асҡыс.

Яңылыкка кәрәк баһа ҡуйырға,—
Ярамай иҫкенең хаҡын юйырға.

Кереп күрһәң барып музә. — ханаға *,
Күтәргән иҫкенең хаҡын һауаға.

Әҙәмдәрҙән берәр тамсы ҡойолған
Ғилем, диңгеҙ кеүек, шулай йыйылған.

Яуа ямғыр диңгеҙгә үҙ һыуынан,
Ҡояш парлап күтәргәндең һуңынан.

Ямғыр һыуы диңгеҙҙән булмай артыҡ,
Төбөндә үҙ һыуылыр алды тартып.

Яңылар, һеҙ был һүҙгә рәнйемәгеҙ,
Ҡушылған иҫкегә тик тәжрибәгеҙ.

Ғилем — уртаҡ һалынған бер бина ул,
Берәү иткән булышлыҡ әҙ, берәү — мул.

Боронғолар борон һалған нигеҙҙәргә
Һуңғылар һарай һалыр, тигеҙләр.

МӘДӘНИӘТТЕҢ БЕҘҘӘ БАШЛАНЫУЫ

Мәдәниәт түгел тиҙ, артты ваҡлап,
Таралды төрлө яҡка, ваҡ-ваҡ атлап.

Килеп етте Өфө губернаһына,
Үтеп бара шәректәр донъяһына.

Тарих бер мең һигеҙ йөҙ ахырында
Яңылыктар күренде унда-бында.

Ғүмер үтте, утыҙ биш йәшкә керҙем,
Тимер һабанды башлап шунда күрҙем.

Тимер тырма, сеялка алды байҙар,
Алып жнейкаһын эште уңайлар.

Молотилка, веялка керҙе ҡулға,
Иген эше шулай һалынды юлға.

Молотилка тағылды әүәл атка,
Тағы һуң(ы)раҡ королдо инде утка.

Пар эшләгәс, бар эштәр китте хутка,
Бөтөн сәғәтлек эшләнә ун минутта.



***

Уҡыусым, һин беләһең нәҫтә барын,
Заманында яһалған комбайн.

Трактор, автомобиль — барсаларын
Үҙең белгәс, яҙайым ник башкаларын.

Замандың был кәмален * ал хисапка,
Бер күҙ һал боролоп артҡы яҡка.

Арыҡ атка тимерһеҙ арба еккән,
Килә юлдан тәгәрмәс, берһе ситтән.

Тауышлана, күрәһең, дегете бөткән,
Егелгән буш дуғаһы артка киткән.

Кейенгән башка шәпкә, оҫкә — сәкмән,
Үҙе йырлай, һыйлағандар, һыйы үткән.

Килеп еткәндә арттан автомобиль,
Сығалмай ҡалһа юлдан, тапала ул.

Уйлап ҡара ике арба араһын,
Сәғәткә күпме сакрымдар бараһын.

Сыра шәмдән киләлер күпме яҡты,—
Утыҙлы булһа, нисек ойҙә яҡты!

Урак урғанда, костәр күпме киткән,—
Машина ерҙе урғас, күпме бөткән?

Шулай бер-бер тиңләштер ҙә фекер ҡыл,
Заманыңдың кәмаленә шөкор ҡыл.

Күҙең күргән, күнеккән бик кесектән,
Ғәжәпләнмәйһең инде һис бер эштән.

Вә ләкин мин күреп иҫке заманды,
Ғәжәпләнеп ҡарайым был кәмалде.

Урак тотоп, насар игенде урҙым,—
Бөгөн бер комбайнға мин ултырҙым.

Урып барғанда һуккаһын да күрҙем,
Тыуғанмын иртәрәк, тип мин үкендем.

Ике заманды күргәс бер ғүмерҙә,
Ғәйеп булмаҫ, ғәжәпләндем тиергә.

Тейеш белдем яҙырға күргәнемде,
Ағас һабан менән ер һөргәнемде;

Иҙелеп иҫкелектә йөргәнемде,
Яңылыкка баһа ҙур биргәнемде;

Утыҙғаса укып ил гиҙгәнемде,
Тамам шул иҫкелектән биҙгәнемде.

Белер кем, яҙмаһам мин үҙ-үҙемде,
Йөрөп был донъянан киткән әҙәмде.

## ХӨКҮМӘТ — ҘУР АҒАСТЫР

Бай кешеләр борон тапкан малын һөйләр,
Икмәкселәр бөгөн тапкан нанын һөйләр.
Күпте күргән тәжрибәле акһакалдар
Күреп торған хөкүмәттең хәлен һөйләр.

Хөкүмәтте окшатабыҙ ҙур ағаска,
Ағас тора нык тамырҙан күп вакытка.
Ел-дауылдар булғанда ла йығылмайҙыр,
Тамырҙарҙан туйып торһа мул аҙыкка.

Ян тамырҙан вак тамыр күп булып торһа,
Якшы ерҙән азот, һыу, көл һурып торһа,
Ағас була япрактары куйы, йәшел,
Вак тамырҙан нәсеғтәр * күп килеп торһа.

Был япрактар тамырҙарҙан һыуҙы йотоп,
Һауала бар карбонды ул дәхи * тотоп,
Шул япрактың йәшелдәре нәсеғ яһай,
Барған сакта өҫтәренән кояш үтеп.

Япрак, тамыр эш күрһәтә, үҙәк булһа,
Үҙәк буйлап нәсеғтәр тиҙ йөрөп торһа;
Ураганға һелкенмәҫлек ағас булыр,
Өсөһө лә үҙ хеҙмәтен үтәп торһа.

Аҙыктарҙы япрак, тамыр яһай имеш,
Фән китабы ағас серен шулай тимеш.
Нәсеғ тигән ағас һыуы мул булғанда,
Күп булалыр эре тулып бешкән емеш.

Игенселәр — вак члендәр, вак тамырҙар —
Хөкүмәткә иген биреп мактанырҙар;
Ялыкмайсы халыктарҙы туйҙырһалар,
Ашаусылар игенсене хак танырҙар.



Иген булды тәбиғәттең хуш бүләге,
Икмәк тиһәң, тереклектең төп терәге.
Тормошонда әҙәмдәрҙең кәрәге күп,
Кәрәктәрҙең эсендә нан — иң кәрәге.

Хөкүмәттең бар хеҙмәте халык осон,
Йәлләмәйҙер ғәҙәләт * һәм матди кесон,
Хисап дөрөҫ барһын өсөн, дәфтәрҙәрҙә
Бик күп хаҙим * эшләтәләр кәләм осон.

Докторҙар күп, хеҙмәт осоп һыҙғанғандар,
Мөшкөл, сирле меҫкендәрҙе кыҙғанғандар.
Сирен танып, дарыу табып бирә белгәс,
Шифа табып көлә башлай һыҙлағандар.

Дошман килһә, ғәскәре бар, уксылары,
Йырак тороп атырға күп тупсылары.
Кәрәк сакта аҙык, хәбәр еткерергә
Ерҙә, күктә хәҙерләнгән юлсылары.

Ғәҙел хөкөм ауыҙлыклай аҙғындарҙы,
Йән кыярҙар тоғро юлдан яҙғандарҙы.
Халыктарға тормош мөшкөл булыр ине,
Тыялмаһа тыныслыкты боҙғандарҙы.

Хөкүмәтһеҙ халык тыныс торалмағас,
Хөкүмәт тә торалмайҙыр игенһеҙ, ас.
Халык менән хөкүмәт һис дуҫ булмаһа,
Йәшәй алмай башка-башка ике мохтаж.

Башкорттарға укырға һәр ишек асык,
Иҫкелә беҙ кералмаһык бер(е)һен асып.
Совет кылды бар халыкты бер хокуклы,
Кул сабайык шуның өсөн бергә баҫып.

Граждандар, хөкүмәтте үҙ күрәйек беҙ,
Ярҙамлашып, ышаныслы күҙ терәйек беҙ.
Емешле, ҙур күләгәле ағас булһын,
Аҙык биреп, тәрбиәләп үҫтерәйек беҙ.

Үҫеп еткәс, емештәрен беҙ ашарбыҙ,
Эҫелектән күләгәгә беҙ касырбыҙ.
Хөкүмәттең бойороғонса эшләгәндә,
Емеш ашап, күләгәлә беҙ йәшәрбеҙ.

Төрлө-төрлө яңылыктар беҙ күрербеҙ,
Тракторҙан һабандарҙы һөрҙөрөрбөҙ.
Яктылыкка электрик балкып торор,
Оскос менән йырактарға беҙ йөрөрбөҙ.

Ауыл һайын уйын, кино төҙөрөрбөҙ,
Һәр урамға телефондар һуҙҙырырбыҙ.
Кәрәк ергә автомобиль булыр беҙҙә,
Юлдан туҙан буран кеүек туҙҙырырбыҙ.

Яңы форма игендәрҙе иктерербеҙ,
Яҡшы заттан шәп костюмдәр тектерербеҙ.
Аяҡ, ҡул һәм баш кейемдәр форма булыр,
Шулай итеп донъяһын беҙ теттерербеҙ.

Был эш бар ҙа булыр, ҡалма һин ғәжәпкә,
Тик халыҡтар керешһендәр төп сәбәпкә.
Электрик машинаны тибрәткәндә,
Ҡалыр әле эшле ваҡыт өс сәғәткә.

Әҙ эшләп тә күп ашарға бик мул етер,
Теге ярлы, был бай тигән исем бөтөр.
Халыҡ менән хөкүмәтебеҙ бергә барғас,
Беҙҙең шөһрәт ер шарына ашып китер.

Ер йөҙөндә беҙ булырбыҙ яҡшы үрнәк,
Башкаларға матлуб * булыр беҙҙе күрмәк.
Халыҡтарҙың тормоштары тигеҙләнер,
Беҙҙең ерҙә һис ҡалмаһа буржуй түндәк.

## КОЛХОЗ ХАҠЫНДА

Булып колхоз, яңы тормошка тот юл,
Был юл яң(ы)лыш түгел, Ленин юлы — шул.

Ленин тигәс, йөрәктәр, талпыныңдар,
Төҙөк тормош төҙөргә ҡалкыныңдар!

Булыр көсло береккән күмәк ҡул,
Йыйын ҡулдан киләлер файҙалар мул.

Күмәк ҡулға бирелһә күп машина,
Ғәжәп файҙа килер ил барышына.

Кәрәк ергә тракторҙар егербеҙ,
Белем булғас, тәбиғәтте еңербеҙ.

Белемде беҙ алырбыҙ агрономдан,
Ҡотолорбоҙ боронғо аңра умдан *.

Күмәк ҡул эшләтеп күп машинаһын,
Тәбиғәттең табыр күп хазинаһын.



Тәбиғәттә төгәнмәҫ хазина бар,
Белемгә ҙур көсоң ҡуш та барып ал!

Тәбиғәттә табылмай һис һаранлыҡ,—
Алалмабыҙ, булып торһа таркаулыҡ.

Белеп сәс тә игендән ал уңыштар,
Белем булғас, үҫер беҙҙә емештәр.

Буйһондорһаҡ тәбиғәтте был көскә,
Ҡалыр эшле сәғәттәр бары өскә.

Әҙ эшләп тә алырбыҙ күп хосулдар *,
Тулыр ниғмәт менән уң һәм вә һулдар.

Ашарға мул булыр майҙар вә балдар,
Кейергә күп булыр һәйбәт тауарҙар.

Булыр бик шәп кейемдәр төрло төҫтә,
Мөһабәтле, ғәжәйеп нурлы төҫтә.

Сәфәргә беҙ мәшәкәтһеҙ китербеҙ,
Кәрәк ергә осоп бик тиҙ етербеҙ.

Хафа сикмә, булыр бар ҙа был эштәр,
Шуның өсөн йыйылған беҙҙә көстәр.

Йыйылған көс һалыр ҙур эште юлға,
Йыйылып йылғалар, ҙур булды Волга.

Был юл беҙгә тамам төрлө кәрәкте
Биреп торғас, боронғо юл кәрәкмәй.

Граждандар, сығайыҡ беҙ иҫкелектән,
Оҙаҡ бармаҫ, сығырбыҙ эскелектән.

Ваҡыт етте, егеттәр, уянырға,
Замандың барышынан уй алырға!

Наҙандар, тип, фәкирҙәр, тип аталған
Башкорттар алға китте, артҡа ҡалған.

Уҡыйым тиһәң, уҡырға вуздар асыҡ,
Кералмаыҡ бороп беҙ берһен асып.

Ғәҙәләте * Советтең китте ашып,
Торорға һис урын юҡ бында ҡаршып.

Ғаҡыл булғас, тәрәккигә ҡарышма,
Француз, инглиздәрҙән ҡалышма!

## Ҡәләм

Ике телдең берһе булып килдең, ҡәләм,
Йәмғиәткә ямал * бирҙең, ҡотлуғ ҡәҙәм.
Әҙәм һүҙе таралыр тиҙ хәтерҙәрҙән,
Һүҙҙәр һинең — мәңгелек, һис булмаҫ әрәм.

Ҡәләм тотҡас, кәмаләткә аšты әҙәм,
Мәҙәниәт менән тулды бөтә ғаләм.
Әүәле һин ҡауырһын да ҡамыш инең,
Тынмай эшләп хәҙер булдың ҡорос ҡәләм.

Ҡорос булып ҡеүәт бирҙең беҙҙең фалға *,
Өмөтлө фал шәп-шәп әйҙәй көн-төн алға.
Совет халҡы ябрылды бит һин ҡәләмгә,
Ғашиҡ булған бал ҡортондай татлы балға...

Мәңге бөтмәҫ тәбиғәттең ғәжәптәре,
Табылғанда тейешле төп сәбәптәре.
Телһеҙҙәрҙең теләге тел булдың, ҡәләм,
Яҡынлашты сәғәҙәттең * сәғәттәре.

Ғәҙәтеңсә, дөрөҫ һүҙҙәрҙе яҙ, ҡәләм,
Тарих булһын, тәләф булмаҫ һеҙҙең кәләм *.
Киләсәктә бәхетле шат йәшәүселәр
Уҡыһындар тарихтәрҙә беҙҙән сәләм.

Ҡәләм ялған яҙмаҫ аслан үҙлегенән,
Яҙыр ялған яҙыусы әҙ белгәнлектән.
Хыялдарҙан хәҡиҡәтте саф күралмаҫ,
Ҡарап илгә килешмәгән күҙлегенән.

Эшсән ҡәләм ышаныслы бөтә илдә,
Договорҙар яҙышалар һәр бер телдә.
Нисә йыл ҡан түгелгән ҙур һуғыштарҙа,
Солох яҙғас, имәнлектәр тулған илгә.

Ҡорос ҡәләм, ҡорал булып керҙең ҡулға,
Һал йыһанды советски тоҙөк юлға.
Яҙ солохто тоҙөк юлдан тоҙ барырға,
Боронғолай боролмаҫҡа уңға-һулға.

# II. ДОНЪЯЛА КЕШЕ, УНЫҢ ХОЛҠО, ХАРАКТЕРЕ

## ДОНЪЯНЫҢ ЯУАБЫ

Һүҙ һораны. Башлай донъя, тамаҡ ҡырып:
— Һөйләйһегеҙ, тоҙ юлымды ситкә бороп.
Барығыҙға һөт имеҙгән анағыҙ мин,
Һөйләмәгеҙ минең серҙе белмәй тороп.

Ғәҙәтем шул: булмәй бирәм, ҡылмайым миннәт *,
Минең өсөн бер тигеҙҙер төрлө милләт.
Балам булғас, бар ҙа — берҙәй күҙ нурҙарым,
Бар байлығым булһын, тимен, һеҙгә зиннәт.

Ҡулда ҡорал, өҫтә кейем, ҡапҡан икмәк,
Бар байлыҡтың берһен дә ҡуймайым бикләп.
«Ғәҙаләт * юк, вафаһыҙ *»,— тип ғәйепләйһеҙ,
Ҡала хәтрем, нахаҡ һүҙҙе булмай йөкләп.

Тигеҙ түгел тормош өсөн үҙ арағыҙ,
Йәбер ҡыла кесектәргә үҙ ағағыҙ.
Бер-берендән күргән төрлө йәберҙәрҙе
Донъянан тип яуып тора күп ялағыҙ.

Аҙған нәфсең артыҡ һөйҙө мин донъяны,
Һөйгәндәрҙең ғазаплылыр ғәзиз йәне.
Башлап йәбер ҡылманым мин һис берәүгә,
Тапҡан ғәйебең ҡай еремдә, әйтсе ҡана?

Ғашиҡ булған кеүек булдың бер тутаҡҡа,
Аҙғынлыҡтан мәшәҡәттәр алдың башҡа.
Был михнәткә башлап үҙең сәбәп булдың,
Ғәйептәр юк тутаҡта һис һинән башҡа.

Бүлмәй биргәс, һеҙ үҙегеҙ бүлешегеҙ,
Бер-берендән кәм булмаһын өлөшөгөҙ.
Тук янында аслыҡ үлгән фәҡир булмаҫ,
Кәрәктән күп мал йыймаһа күршегеҙ.

Ленин һыҙған юлдан барып тырышығыҙ,
Нык нигеҙгә төҙөк тормош корошоғоҙ.
Киләсәктә яҡшы тормош табыр өсөн,
Ошбу көндә тырышмаҡ — ҙур бурысығыҙ.

Төгәнмәҫлек хазиналар бар үҙемдә,
Бик күп йәндәр туйырлыктыр ер йөҙөндә.
Яҡшы эшләп, яҙ сәселгән ҡай бер орлоҡ
Бер бото йоҙ булып ҡайта шул көҙөндә.

Бар булып мин камилләндем үҙ бабымда,
Кәрәктәрҙе еткергәнмен һәр барын да.
Ғәҙәтемдә була торған сир әләкһә,
Дарыуҙарын хәҙерләнем ул сағында.

Буранкылай булды ҡолаҡ — һәр һүҙгә юл,
Иләк кеүек, хор фекерҙе сафлаһын ул.
Хаталарҙан һөҙөп алғас дөрөҫтәрен,
Һал күңелгә, һандыҡ кеүек, һаҡлаһын ул.

Ҡат-ҡат ҡуҙғат бөйөк даһи Ленин һүҙен,
Аскан өсөн фәкирҙәрҙең йомоҡ күҙен.
Еҫле гөлдө ҡуҙғаткандай, еҫен сәсеп,
Нурландырһын меҫкендәрҙең бойоҡ йөҙөн.

## ИСЕМ

Исем ҡушмаҡта һәр кем ихтыярлы,
Ғәйеп юҡ, Шаһиыйһан * тип ҡушһа ярлы.

Уғыл тыуһа, әсә менән аталар
Булыр шат, атын Арыҫлан атарҙар.

Булыр арыҫлан кеүек, тип ул ҡыуанған,
Вә ләкин булды ҡурҡаҡ ул ҡуяндан.

Йофар ҡушты, ҡыҙын ул бик яратып,—
Тоҙалманы йофарҙай еҫ таратып.

Халыҡ биҙһә боҙоҡ әхлаҡ еҫенән,
Ни файҙа бар һинең Ғәнбәр * исемдән?

Таип * тип, Биктаһир * тип ҡуйҙылар ат,—
Исеменән булманы аслан есме пак.

Сабур * тиһәк тә, ул булды сабырһыҙ,
Ғәҙелгәрәй торалманы йәберһеҙ.



Сәғит *, Мәсғут *, Ғәниҙәр * ҙә — бәхетһеҙ,
Йыһаншаһ та булып үтте тәхетһеҙ.

Ҡушырға ҙур исемдәр ил яратты,
Вә ләкин килмәне бынан тәрәкки.

Мәдех* артыҡ кәрәкмәй ул кәрәктән,
Ни файҙа һүҙ менән эшһеҙ теләктән?

Кәмаләт * килмәй бик тиҙ ул кинәттән,
Күп эшләп тә, булыр бик аҙ әләккән.

Мәдәниәт килер көслө беләктән,
Ғаҡыл тоғро, фәрәсәтле * йөрәктән.

## ӨМӨТ — БӘХЕТ БАШЫ

Әҙәм заттың, ни хикмәттер, эс бик серле:
Берһе — бик саф, берһе — урта, берһе — керле.
Серле әҙәмдә төрлө фекер булған өсөн,
Уйға ҡарап, бәхеттәр ҙә төрлө-төрлө.

Төп бәхет шул: һәр кешелә — өмөт атлы,
Һөйөндөрөп һүҙ бирә ул, ғәжәп татлы.
Хәсрәт менән йәрәхәтле йөрәктәргә
Шифа биргән дауа, тиһәң,— тамам хаҡлы.

Тәбиғәттең йомартлығын иҫтә тотор,
Өмөт менән йыбанып ул аҡ көн көтөр.
Кәрәктәргә кәфил* булған колхоз булғас,
Сабыр тулып, йөрәктәге ҡайғы бөтөр.

Иртәгә тип — шатланасаҡ көнөбөҙҙө,
Шатланып беҙ үткәрәбеҙ төнөбөҙҙө.
Була тигән байрамдарҙы көтә-көтә,
Көслө өмөт көн-төн аса күң(е)лебеҙҙе.

Күңелләнеп көткән аҡ көн килеп етер,
Ләкин өмөт туҡтай белмәҫ, ҙурға үтер.
Киләсәктә китмәҫ дәүләт көтөр һаман,
Оҙон өмөт ғүмерҙән дә уҙып китер.

Башлар өмөт гүзәл-гүзәл һәр эшкә юл,
Буш йөрәккә дәрт ҡабыҙыр, бик көслө ул.
Дәртле егет елкенеп шәп эшләгәндә,
Эштән килер бешкән төрлө емеш мул-мул.

Донъяла шат йәшәр өсөн бер эш кәрәк,
Эш емеше — тереклеккә иң төп терәк.

Хөр булып, үҙ көсөң менән шат йәшәһәң,
Тормошоңда ҙур бәхет, шул иң ҙур теләк.

Өмөт ҡуҙғап, дәрт япмаһа — шул буш йөрәк.
Ҡайҙап килһен төрлө емеш, ул ҙур бүләк?
Йәш булып та, эш япында йәшнәмәһә,
Йәшәмәһен, йәмғиәткә ул ник кәрәк?

Ил булмаһа өмөт әйҙәп алға баҫҡан,
Ярышып эшләп мәдәниәт юлын асҡан,
Беҙҙең донъя булыр ине буш бер һарай,
Яҡтылыҡҡа өслө генә лампа аҫҡан.

Ғалимдәре шөһрәт эҙләп яҙынмаһа,
Мөһәндистәр * мәғдән эҙләп ҡаҙынмаһа,
Был көндәге мәҙәниәт булырмы ине,
Ударниктәр ҙур бәйге эҙләп ярышмаһа?

Тәүәккәл дәрт — ҡараңғыла нурлы фонарь,
Ел һүндермәҫ фонарь булғас, һаман яна.
Эҙләгәндән эҙ яҙһаң, да өмөт өҙмә,
Нурың булғас, эҙен түгел, үҙен табыр!

Өмөтлө дәрт ҡанат булыр егет, иргә,
Ҡанатлылар тиҙ етерҙәр йыраҡ ергә.
Ҡоштарҙы күр, иртәһен — ас, кисендә — туҡ,
Һәр бер көндә аҙыҡ тапмай ҡалмай бер ҙә.

Тәүәккәл дәрт, өмөт тулһа ирҙең эсе,—
Ударник кем? — тиһәң, тап ана шул кеше!
Ышанған үҙ-үҙенә сын батыр йөрәк,
Ҡайҙа барһа уңышлылыр уның эше.

Өмөт ҡуҙғап башлана һәр эштең башы,
Төҙөк эштәр — бәхеттәрҙең нигеҙ ташы.
Өмөт итмәҫ, бәхет көтмәҫ һис әҙәм юк,
Быны белһә кәрәк һәр кем, булһа башы.

Бәхет булғас ударниктәр барышында,
Ауға сыкһа, аҡһаҡ төлкө — ҡаршыһында.
Бер атҡанда ике ҡуян алмаҫ тимә,
Уңай килер уңыштары һәр эшендә.

***

Өмөт менән тотошоп беҙ ҡулды-ҡулға,
Теләп керҙек колхоз тигән төҙөк юлға.
Теләй беҙҙән яңы тормош яҡшы ғәҙәт,
Боҙоктарын ташлайығыҙ, ҡалһын шунда.



Һаулык һаҡлап, әҙәм тәндең паклар тышын,
Порошоклап щеткалай ул ап-аҡ тешен.
Аҡ тештән артығыраҡ аҡ булһын эстәр,
Колхозниктәр дуҫлыкты саф һаҡлар осоп.

Дуҫка дуҫтың һәр ваҡытта күңел яҡын,
Яҡын күңел һаҡлар дуҫтың тейеш хаҡын.
Апай-һеңел, ағай-эне татыу булһа,
Һүҙҙәр — татлы, кәрәк ул ир, кәрәк ҡатын.

Яғымлы һүҙ — йән аҙығы, күңел асыр,
Асыҡ күңел әҙәмде шат, дәртле яһар.
Дәртлеләргә ауыр эштәр еңел булып,
Ярышырға юл асылыр, ҡеүәт ташыр.

Ҡеүәт ташҡас, йәлләмәҫ ул артыҡ көсөн,
Таҙа эшләр ҡулға тотҡан һәр бер эшен.
Иптәштәргә өлгө булған ударник ул,
Эшен боҙмаҫ, выжданын саф һаҡлар өсөн.

Колхоз булдың малды бергә табышырға,
Тейеш түгел ударниктән ҡалышырға.
Күргән эштең күркәменән үрнәк алып,
Бер-берендән таҙалыкта ярышырға.

Һис ярамай бригадиргә ҡарышырға,
Выждан ҡушмай юлдаш менән ҡағышырға.
Эш сағында һүҙ күп булһа, эш әҙ була,
Табыш сыҡмаҫ, китер бары тауыш ҙурға.

***

Бөтә ниғмәттән өҫтөндөр ғаҡыл-нур [9],
Әҙәм затны әҙәм иткән ана шул.

Әҙәм башланы бер көн талпынырға,
Тәрәккигә тотоп юл, ҡалҡынырға.

Хужа булды тамам ҙур ер шарына,
Ағас, таш, диңгеҙ һәм хайуанына.

Йөгөн тартты, егеп фил хайуанына
Һөйрәп сығарҙы диңгеҙҙән балина *.

Менеп тауға, ала таштан тимерҙе,
Төшөп аҫҡа, сығарҙы таш күмерҙе.

Тимер тапкас, яһай төрлө ҡоралды,
Ҡоралһыҙ сонки бер эш тә ҡоралмай.

Корал булғас, әҙәмдәр тик торалмай,
Хазинаһын табырға ер быраулай.

Һәр эшкә хас яһалды күп машина,
Ғәжәп ярҙам бирә ил барышына.

Корал тоткас, була кулдар коростай,
Корос куллы бәрәү—унға торошло.

Кулың булғас корос эшләп алырға,
Ни өсөн һуң ауыҙ асып калырға!

Теге етмәй, был юк тип тарланырға,
Кәрәкмәй һис урынһыҙ зарланырға.

Тәбиғәт тун тегеп, икмәк бешермәй,
Кәрәктең көлләһен күктән төшөрмәй.

Алалһаң, хазина унда ғәйәт мул,
Алалмаһаң, килтереп бирмәйҙәр шул.

Кейер булһаң, кейемдең төрлөһө бар,
Яһай фабрик, теләһәң кайһыһын ал.

Былар бар ҙа — тәбиғәт ниғмәтелер,
Әҙәмдәргә тереклек зиннәтелер.

Егерменсе быуат бит был, онотма!
Егетлек дәрте булһа, һис бойокма!

## ЕГЕТ БУЛҺАҢ... [01]

Булыр тормош юлы кайсак тигеҙһеҙ,
Шуның өсөн генә булма түҙемһеҙ.

Йыя бал корто балды эҙләй-эҙләй,
Асыуланһа, хужа тип тормай, безелдәй.

Шешә, бик әрнетә саккан мәлендә,—
Сыҙай хужа, тәмен белгәс балында.

Хисапһыҙ ниғмәттәрҙең һин эсендә,
Һөйләмә зар берәү саккан өсөн дә.

Мәгәр зарҙы һөйләр бәндә төҙәлмәҫ,
Эләкһә шул яман сир, һис түҙалмаҫ.

Тәбиғәткә лайык булһа кәсептәр,
Уйлағандан артык булыр насиптар.



Белеп сәсһәң, алырһың күп уңыштар,
Тамағың тук булыр, уң барһа эштәр.

Шулай тормош тоҙолгән хуш сағында,
Атаң башы кәрәк мәллә тағын да?

Борон әҙәм коралға булды мохтаж,
Әсир ине тәбиғәткә, ярым ас.

Әсир зарланһа,— мөмкин, һис ғәжәп юк,
Вә ләкин был заманда ул сәбәп юк.

Тәбиғәтте әҙәм еңгән заманда
Килешмәйҙер бороңғо зар һаман да.

## МӨҒӘЛЛИМДӘРГӘ

Уңай килеп сыктығыҙ һеҙ уңған юлға,
Ғилем тигән ҙур сыраҡтар тотоп кулға.
Ынйынан да киммәт орлоктар сәстегеҙ,
Тымык кына аға, тиҙәр, тәрән йылға.

Күп губерна уҙып аға оҙон Волга,
Үҙ юлынан ситкә сыкмай, уңға-һулға.
Ижтиһаттар *, кәмаләттәр * юлдаш булыр,
Бәхет менән йәшәгәйһеҙ бик күп йылға.

## ҒИЛЕМ ХАҠЫНДА ЙӘШТӘРГӘ БЕР ҺҮҘ

Ал ғилемде, туйма ғилмең күплегенән,
Кемдә тапһаң, биҙмәгәйһең кәмлегенән:
Алтын тапһа, һәр кем ала шатлык менән,
Ғәрләнмәйсә, бер ауылдың сүплегенән.

Ғилем — бөтмәҫ хазиналыр — урламаҫтар,
Эйәһенә зиннәттер ул — хурламаҫтар;
Дошмандарҙы еңергә ҙур корал булыр,
Матди көстәр фәнгә каршы торалмаҫтар.

Укы, дуҫтым, күңел күҙен ғилем асыр,
Әҙәм улы укыу менән үргә ашыр.
Ғилем булһа, дүрт тарафың якты булыр.
Йәһаләттәр *, хөрәфәттәр — бар ҙа касыр.

Артка калған милләт алға укып баҫыр,
Укымаған халыктарҙың хәле насар.
Йәш милләттең егеттәре ғалим булһа,
Үҙ халкыны алға әйҙәп, ал-гөл яһар.

Алға барған йәштәр мәлик * — төрлө дәрткә,
Ҡулдан килә башҡарырға ҙур хеҙмәтте.
Заман теләй һеҙ йәштәрҙән төрлө һөнәр,
Алға таба атлатырға был милләтте.

Ҙур эштәрҙе башҡарыусы булыр түҙем,
Мәфһүме * күп ҡыҫҡа ҡылыр әйткән һүҙен.
Маҡталырға лайыҡ булған кәмаләт шул —
Кесе тотһа халыҡтарҙай күреп үҙен.

Ғалим—мин, тип баш күтәрмә, булма тирәк,
Булһаң да һин башҡаларҙан ашҡан зирәк.
Емешле ағас һис ваҡытта баш күтәрмәҫ,
Емеш бирмәҫ тирәк булыу ниңә кәрәк?

ТЕЛ ХАҠЫНДА

Төрлө фекер хазинаһы ул хөр күңел,
Һүҙ башы ла — күңелдәлер, телдә түгел.
Һүҙ планын башлап фекер һыҙып биргәс,
Тәржемән * тел һөйләр уны еңел-еңел.

Һөйләр булһаң, башла һүҙҙең һуңын уйлап,
Тиҙ йөрөүе хасыйәтле * фекер буйлап.
Фәсәхәтле * телде тамам иркен ҡуйма,
Күрһәтмәһен ялғандарҙы сынға буяп.

Ҡуҙғат һүҙҙе, башлағандар тамам иткәс,
Орма йөҙгә, һүҙ хатаһын һөйләп үткәс;
Кәрәк ҡәҙәр ябай булған тауыш менән,
Ҙурҙар юҡта, һиңә нәүбәт, ваҡыт еткәс.

Әҙләп һөйлә йәнгә яткан кәрәк һүҙҙе,
Хәкикәт тип, бәрҙәләмә ғәзиз күҙҙе.
Көндәрҙә бер бәрҙә асылып, күҙ күргәндә,
Ҡыҙартмаһын ҡыйыҡ һүҙҙәр якты йөҙҙө.

Ике ҡолаҡ, ике күҙ бар — белек юлы,
Күп нәмәләр белһен өсөн әҙәм улы.
Белгәндәрҙең яртылашын һөйләргә тип,
Тел бер генә булһа ла, һүҙ — күңел тулы.

Теште́р — текмә, тиҙмер телде һаҡлаһын тип,
Ике ирен бар, икенсе ҡат ҡаплаһын тип.
Ике стена эсендә тел яратылған,
Уйға килгән һүҙҙәр бар ҙа аҡмаһын тип.

Һүҙ күң булһа, хаталар күп йыйылалыр,
Тыңлаусыға әҙ хата күп тойолалыр.



Әҙәмселек, намыҫ дәхи * дәрәжәләр
Урынын белмәй күп һөйләүҙән юйылалыр.

Аҫҡыстыр тел күңел тигән ҙур амбарға,
Күп һөйләһәң — мөмкин булыр сер аңларға.
Амбарҙағы хазинаңды тамам асып,
Төшөү мөмкин ҡотолмаҫлыҡ ныҡ ауҙарға.

Һөйләй белһәң, ашырыр тел бәхеттәргә,
Бәхет булғас, менәрһең һин тәхеттәргә.
Һөйләр булһаң, нәтижәһен уйламайса,
Төшөрөр тел тәхеттәрҙән ләхеттәргә.

Еңелһетмә ярһыу телде, яҡын энем,
Ҙур ролдө уйнайҙыр ул кесе телең.
Файҙаһы күп булған кеүек, зарары ҙур,
Телде төҙөк тоторға күп кәрәк белем.

Һөйәкһеҙ тел һөңгө булыр, һаҡламаһаң,
Һүҙ барышын ашығыуҙан аңламаһаң;
Ун йылда ла уңалмаҫлыҡ яра яһар,
Халыҡтарҙың хоҡуҡтарын хаҡламаһаң.

Күп ваҡытта бик әҙ һүҙҙән хәтер ҡалыр,
Боҙло һыуҙай, йөрәккә ул һалҡын һалыр.
«Бер» тигәндә «ҙ» ҡуйылһа, «беҙ» булалыр,
Һаҡланмаһаң, иҫкәртмәҫтән сәнсеп алыр.

Тура теймәҫ юнһеҙ уҡты атҡан менән,
Хаҡлыҡ һүнмәҫ ялғандарҙы япҡан менән.
Яман һүҙҙән быялалай һынған күңел
Уңалмаҫ ул, һин һүҙеңдән ҡайтҡан менән.

Маҡтау ярай, гүзәл һүҙгә ҡолаҡ һалһа,
Күргән саҡта күркәм эштән үрнәк алһа.
Кәрәгенән артыҡ малға ҡулдар йомарт,
Һүҙ артығын һаран теле һаҡлап ҡалһа.

АСЫУ ХАҠЫНДА

Диңгеҙ кеүек, ғаҡыл сикһеҙ хикмәт менән,
Әҙәмдәргә өләшелгән ҡисмәт * менән.
Кемгә — силәк, кемгә — батман тейгән саҡта,
Бәхетлегә бирелгән ҙур киҫмәк менән.

Һәр кешелә үҙ ғаҡлына ҡәнәғәт бар,
Әҙәм затта тәбиғи был ғәжәп бер хәл:

«Үҙ силәгем батманыңдан ҙурға ҡуйып
Хаталандым»,— тип әйтергә киләләр гәр.

Донъяла иң ҡиммәт нәрҫә — ғаҡыл, тигән,
Ғаҡылһыҙҙа әхлаҡ яғы таҡыр, тигән.
Ғаҡыл еңеп, асыуҙарын йоталғанды —
Йыйын тотҡан батырҙарҙан батыр, тигән.

Асыу еңһә, әҙәмдәрҙән ғаҡыл осар,
Ғаҡыл киткәс, йыртҡыстарға тамам оҡшар.
Енәйәттәр, йән ҡыйыуҙар еңел булыр,
Бәхетһеҙҙәр асыулыға булыр дусар.

Ҡаты асыу ҡыҙарталыр кеше йөҙөн,
Тамыр бүртә, ҡан алалыр ике күҙен.
Ғәҙәттән тыш йөрәк тибеп, ҡайнағас ҡан,
Ҡыҙыулыҡтан белмәй ҡалыр әйткән һүҙен.

Сөнки асыу — йөрәктәге утлы күмер,
Күмер ҡыҙған, һыуҙай ирей ҡаты тимер.
Тәндә булған төрлө матдә артыҡ ҡыҙып,
Һаулыҡ кәмей, ҡулдан китә тыныс ғүмер.

## ҺӨЙЛӘШКӘНДӘ

Һәр бер әҙәм үҙ мәсләгөн * алға ҡыуыр,
Кеше һүҙен тәнҡит ҡылып, артҡа ҡуйыр.
Хөр фекерҙәр бер-берһенә сағылғанда,
Хәҡикәттәр, тоғролоҡтар шунан тыуыр.

Һүҙ көрәшһә, көрәшһен тик хаҡлыҡ өсөн,
Иптәшеңде оялтырға һалма көсөң.
Хөр кешелә һүҙ көрәшеү ғәйеп түгел,
Саф булһын тик дошманлыҡтан һинең эсең.

Юлдашыңдан заһир булһа хәҡикәт-нур,
Ҡыҫҡарт һүҙҙе, һис ғәрләнмә, мөсәлләм * бул,
Һәр әҙәмгә хаҡлыҡ ҡиммәт, алтын кеүек,
Юғалған бер алтыныңды тапты бит ул.

Хәҡикәттән хаҡлы булмай алмас ташы,
Булһа ла ул батшаларҙа йөҙөк ҡашы.
Алмастан да ҡиммәт хаҡлыҡ табылғанда,
Һүҙ оҙайтһаң, тирҙәр һиңә: — Атаң башы!

## КӨНЛӘШЕҮ

Бер-берһенән көнләшеү бар һәр йәндәрҙә,
Һыуҙа — балыҡ, ҡырҙа — йәнлек, хайуандарҙа.



Әҙәм затта был көнсөлөк киң күләмдә,
Ғали *, сәфил *, ғалим, әһил * һәм хандарҙа.

Көнсөлөк ул күренмәйҙер: күңел эше.
Бындай сирҙән һау булмайҙыр һис бер кеше.
Вә ләкин был тәбиғи хәл, ғәйеп түгел,
Теймәһен тик нахаҡ ерҙә теле-теше.

Тейешһеҙҙе һөйләй телдәр күңел тарға,
Көнсөлөктән һиндә белем, һөнәр барға.
Йөҙ ғәйептәр эшләһәң дә, өндәшмәҫтәр,
Булһаң әгәр һин бер юнһеҙ ҡара ҡарға.

Сибәр көндәште көндәш көнләшеүҙән
Ҡәбих * тир, көнләшер ул һәр эшенән.
Данламаҫ көмөшсөнө көмөшсө,
«Баҡыр ҡушҡан көмөшкә»,— тир ул көнсө.

Телен тыймаҫ тимерсенән тимерсе,
Ғәйеп табыр тегенсенән тегенсе.
Кәрәк кем булһа бер-бер эшкә оҫта,
Һанар үҙен маһир оҫтанан-оҫта.

Себен күрһә ҡутырҙы, ҡунмай ҡалмаҫ,
Таҙа ергә, ғәжәп, ул күҙ ҙә һалмаҫ!
Күреп күркәм эшенде йәшерерҙәр,
Яман эшеңде илгә ашырырҙар.

Керле булғас тәбиғәттәр тыумышында,
Төрлө һүҙҙән ҡолаҡ тонор тормошонда.
Ил теленән имен тороу мөмкин түгел,
Тыҡ ҡолаҡты, йөрөй бир үҙ йомошоңда.

Һүҙҙе һөйлә, ҡояш кеүек асыҡ белһәң,
Йәиһә күҙең таҙа булып, шикһеҙ күрһәң.
Хыял менән хәбәр һөйләү хыянаттыр,
Томанлы көн төлкө күреп, дөйә тиһәң.

## ӘҘӘМ КЕҮЕК, ҮҪЕМЛЕК ТӘ ҺӨЙӘ ЗИННӘТ

Әҙәм кеүек, үҫемлек тә һөйә зиннәт,
Сәскә тиһәң,— ир-ҡатын ул, күрһәң иплән.
Төрлө төҫтә, төрлө еҫтә биҙәнгәндәр,—
Беләһеҙме бында ни сер, ниндәй хикмәт?

Еҫтәр кәрәк, бал ҡорттарын ҡаратһын тип,
Төҫтәр кәрәк, ҡарағандар яратһын тип,
Кейәү көткән ҡыҙҙар кеүек сәскәләргә
Аяҡтарға элеп орлоҡ таратһын тип.

Сәскәнән һуң үҫеп бешер ҡыҙыл алма,
Мине һыйлай был алма, тип һин алданма.
Тәкәммелгә * нәҫлен өҙмәй барһын өсөн,
Орлоҡ — мәҡсуд *, был серҙән һин ғафил * ҡалма.

Орлоҡтарға бирелгән ҙур үҫәр көстәр,
Сәскәләргә бағышланған төрлө төҫтәр.
Нәбат *, хайуан пар-пар булып бар булғандар,
Булған өсөн берһен-берһе тартҡан хистәр.

Бер секунд та тик торалмай, эшләй һаман,
Нисек тапмаҫ тәрәккиҙе ошбу заман.
Хисап етмәҫ ниғмәттәре күп булһа ла,
Ни хикмәттер, аралашҡан яҡшы, яман.

### ХӘМЕР ХАҠЫНДА

Күрер ҡеүәт ҡуйылғандай һәр күҙҙәргә,
Аҙғынлыҡтар ҡуйылған һәр нәфселәргә.
Төрлө ләззәт булып торғас был ғаләмдә,
Зауыҡ көсләп, аҙып китә нәфселәр ҙә.

Хәмер тулған литр барҙа, ҡөләс — йөҙҙәр,
Һөйөндөрөр дуҫын һөйләп татлы һүҙҙәр.
«Хуш килдегеҙ, хөрмәтле ҙур ҡунаҡ!» — тигәс,
Дуҫтарҙың да йылтыр-йылтыр итер күҙҙәр.

Бер-бер артлы бушатылһа бер аҙ литр,
Ҡунаҡтарҙың баштарынан ҡайғы китер.
Күңелдәр шат, йөрәк ярһыу, баһадир ул,
Үҙен башҡа ғаләмдә тип хисап итер.

Ул донъяла бар ҙа гүзәл, ал, ҡыҙыл гөл,
Хәсрәтһеҙ ул, унда күп мал кәрәк түгел.
Һәр кешенән артыҡ белеп, алда булғас,
Тейешле тип күп һөйләр ул, еңел-еңел.

Ике сәғәт дауам иткәс, йоҡо баҫыр,
Ҡаты йоҡлап уянғас ул күҙен асыр.
Үҙен күргәс яйһыҙ ергә йығылғанын,
Шунда белер, ысынлап бит эш бик насар.

Шат сәғәттәр, төш кеүек, юк булып киткән,
Ҡарап ҡарай — кеҫәһендә аҡса бөткән.
Башы ауырта, ҡар(ы)ны асып, йөрәк тырнай,—
Икмәк тапмай, ашарға бик ваҡыт еткән.

Ҡайтып керһә, утын да юҡ, өй бик һалҡын,
Яҡҡан булған сей һаламды, сыҡмай ялҡын.



Балалар күп,— кейемһеҙ һәм күңелһеҙҙәр,
Ҡатын әрләй әрнеп-әрнеп юклыҡ сартын.

Әсәһең, ти, күңел асып, койләй-койләй!
Аңлайһыңмы, стаканың нимә һөйләй?
Күҙ нурҙарың — йәшле күҙҙәр, күңел бойоҡ,
Ҡайһы — икмәк, ҡайһы күлмәк, кипке һорай.

Өйҙә туҙған бурандан ул сыкты ҡасып,
Нәк шул саҡта Шакир керҙе, ҡапҡа асып.
Асыуланып, аласағын һорап килгән,
Сүгә-сүгә яғаһынан тотто ҡыҫып.

Хәмер эсеү енәйәттер һәр кемгә лә,
Енәйәттәр дөрөҫ түгел һис бер ерҙә.
Өй эсендә ас-ялапғас балаң булғас,
Малды бушка түкмәгәйһеҙ әрәм ергә.

### [КЕШЕ ҒҮМЕРЕ]

### Сабыйлыҡ хәле

Балалыкта әҙәмдең бар эше — уйын,
Файҙа, зарар булғанына һалмай уйын.
Таҫтымал тип таяҡтарға таҫма теҙеп,
Үҙҙәренсә яһайҙар шәп һабантуйын.

Белмәйем, нисек бер(е)һен-бер(е)һе табышалар,
Сер килешә, үҙ-ара тиҙ танышалар.
Сабыйлыкта типке көслө, тик торалмай,
Ҡыҙыҡ итеп пыр туҙҙырып сабышалар.

Ҡай берҙәре киләләр иң алдан, уҙып,
Башҡалары арттан килә, туҙып-туҙып.
Әҫе көндө ярҙан һыуға һикергәндә,
Һис бер ерҙә табылмайҙыр бындай ҡыҙыҡ.

Һыуҙан сығып уйнай улар урам һыҙып,
Уйнап туйғас, китәр бар ҙа уйын боҙоп.
Ашау-эсеү иҫкә төшмәй, онотолған,
Ҡайтып керһә, төш ваҡыты киткән уҙып.

Ҡайтҡас та ул һырлығалыр атаһына,
Эш бөтөргән, иркәләнә әсәһенә.
Әсәһе лә һаклағанын һалып бирә,
Тыштан ғына орошҡан булып, бәбкәһенә.

Балаларға барлыҡ нәҫтә — ал, ҡыҙыл гөл,
Һис дошман юк, ҡайғы менән таныш түгел.

Аслык-туклык тормош менән хисаплашмай,
Ашап туйғас, уйын әҙләй ул саф күңел.

Табылды һәм көтөлмәгән кыҙык уйын,
Каты ямғыр каплай ерҙең кырын, өйөн.
Ямғырҙан һуң кыҙҙырып көн кояшлағас,
Һыҙғанышып сыккан улар, йыйын-йыйын.

Кыуанышып, сыр киләләр тауыштары,
Күңелдә юк донъяның һис һағыштары.
Югергеләп көс сығарып күңел асыу —
Сабыйлыктан әҙәмдәрҙең табыштары.

Күрәһеңме күбәләкте йәйге айҙа,
Сәскәләрҙә уйнап улар ала файҙа.
Балалыктың мәүсемендә * югер, һикер,
Егет булғас, һеҙгә бындай уйын кайҙа?

Уйын-көлкө килешмәһә һукыр картка
Килешмәйҙер, уйнамаһа сабый сакта.
Ун йәштәге сактарын карт һағынһа ла,
Кайтмай карттар һис вакытта арткы якка.

Уйнап-уйнап көндәр, айҙар, йылдар үтер,
Зәңгәр гөлдәй сабыйлыктар үтеп китер.
Емеш кеүек, сәскәнән һуң түмәләнгән
Егетлек тә һиҙҙермәйсе килеп етер.

Ни эшләһә лә, егет булғас, килә кулдан,
Тауыш та көр, беләк калын, көс ултырған.
Купшылыкка күңел биргән, зиннәт һөйә,
Матурланған, бешкән алма кеүек тулған.

Борон һөйгән вак уйындан инде туйған,
Буйға үҫкән, сабыйлыктың төҫөн юйған.
Донъяға ул башка күҙлек аша карап,
Кыҙҙарға ла хосуси бер баһа куйған.

Тәрәккигә яратылған ошбу ғаләм,
Нәбат *, хайуан тәкәммелгә * баҫкан кәҙәм *.
Нәҫел һуңра нәҫел килтереү юлы менән
Кәмаләтте * тапкан, тиҙәр, бәни әҙәм.

Өйләнгәндә һәр әҙәмдә бер уй була,
Һайлашалар, яратышһа, ҙур туй була.
Тәрәккиҙе һиҙеп кыҙҙар зиннәтләнә,
Кейәүҙәрҙә күркәм кейем, хушбуй була.



## Йәшлек хәле

Әҙәм затка йәшлек — бер ҙур ғәниммәттер *,
Һаулык тиһәң — егетлектән дә кимммәттер.
Ләззәт, шатлык, кәмаләт * һәм баһадирлек —
Йәш вакытта бирелгән бер тәбиғәттер.

Ләззәтләләр эскән һыуың, ейгән * ашың,
Йоконң татлы, яҫтыкһыҙ ҙа ауыртмай баш.
Йығылһаң да һынмай һөйәк, биртенмәй тән,
Кырк биштән түбән булһа һинең йәшең.

Күңелле сак яҙ конондә алма бағы *,
Ағастары ак сәскәһен аткан сағы.
Был ғүмерҙең йәмле яҙы — йәш вакыттар,
Тырышкандар кәмаләтте тапкан сағы.

Дәртле заман, күңелдә күп төрлө теләк,
Ауыр эшкә тиҙ талыкмай көслө беләк.
Тауҙы-ташты актарырға һиммәте бар,
Баһадир ул, курка белмәй батыр йөрәк.

Сөнки уға ауыр түгел барса эше,
Каны кыҙыу, күкрәгендә булғас көсө.
Эш һуңында ашап-эсеп, йоклап торһа,
Булған инде эшләмәгән яңы кеше!

Буйҙарың төҙ, юктыр арка бөкрөләрең,
Уйҙар ғали *, тоғро ғакыл-фекерҙәрең.
Колактар һак, хәтерҙәр саф, онотмайһың,—
Был йәшлеккә бар микән һуң шөкөрҙәрең?

Зифа буйға килешәләр кейем кейһәң,
Һүҙең асык, кәрәк ерҙә һөйләйем тиһәң,
Йыйырылмаған маңғайҙарың, һул(ы)маған йөҙ,
Нур сығалыр, һүҙ һуңында көлөп куйһаң.

Нур балкыта йәүһәрле күҙ, матур кашың,
Тән кеүәтле, тиҙ һеңәләр ейгән ашың.
Зөләйха апа шул Йософка каш һикертһә,
Һинең дә бар һөйкөмлө бер хас юлдашың.

Кайғы, шатлык уртаклашкан аркаҙашың,
Өй эсендә сыраҡтыр ул һәм кулдашың.
Тауыштары — һандуғастай сабыйҙар бар,
Ярым телле көлдөрөүсе аҫыл ташың.

Көндән-көнгә төҙәтер ул татлы телең,
Арткан өсөн үҫкән һайын тойғо, белем.

Өй эсендә ғаиләңә ағза булып,
Ярҙамыңа етешер ул, быуып билен.

Дуҫтарың бар мул вакытта йөрөшөргә,
Кәйеф өсөн күңел асып көлөшөргә.
Көтмәгәндә тарлык көндәр килә калһа,
Бер-береңә матди ярҙам бирешергә.

Бер-берһенә юлыкканда якын дуҫтар,
Шатлығынан асылалыр бөйөк төҫтәр.
Тәкәллифһеҙ * төрлө бабтан һөйләшкәндә,
Куҙғалалыр күңел аскан тәмле хистәр.

Йәш ғүмерҙең кәҙ(е)рен бел, ул тиҙ осор,
Табалмаҫһың бер якын дуҫ, бар ҙа касыр.
Гөлөн түккән, билен бөккән Эргазин бай
Булып калһаң, барыш булыр шунда насар.

Көсөң булмаҫ, тормош өсөн хеҙмәт бөтөр,
Хеҙмәтһеҙгә илтифат юк, хөрмәт бөтөр.
Файҙаһыҙ бер артык кеше, әрәм тамак,
Тирҙәр һиңә, был донъянан үксәң кутәр.

Һөйләшкән бер карсығың бар — ул да китер,
Һукранырҙар, ишетерһең көндә битәр.
Якты донъя яңғыҙлыктан зиндан булыр,
Тирһең үҙең: — Әжәл көнөм касан етер?

## Картлык хәле

Кем дә булһа күп йәшәгән бер карт кеше,
Тәндә бөтөн, телгә күскән барлык көсө.
Йөмлә тәне ауырайған, артка тарта,
Шуның өсөн эшлекһеҙҙер уның эше.

Йәштә булған үҙенсә ул эшкә батыр,
«Булды беҙҙә,— тип һөйләйҙәр,— башта ғакыл.
Был сактағы йәштәрҙе,— ти,— караһағыҙ,
Эшләмәйҙәр, баштарында ғакыл такыр».

Әл дә булһа эшләмәйсә тормайҙыр ул,
Ләкин уның эшкә бармай, тыңламай кул.
Күңел менән Бохараға барыр кеүек,
Әгәр ҙә ки яткан ерҙән табалһа юл.

Һиҙҙермәйсә иҫкән елдәй, ғүмер үткән,
Кайтмаҫ ергә киммәт йәшлек ташлап киткән.
Һис бер бәндә яратмаған насар картлык —
Һөймәҫ кунак — кисекмәҫтән килеп еткән.



Каты икмәк ашай алмай, бөткән теше,
Аш һеңдермәй мигдәһенең * киткән көсө.
Һиҙмәй калып артығырак ашай калһа,
Ауырайған, тыныс тапмай, ауырта эсе.

Колактар бар,— аңлашылмай кеше һүҙе,
Аңламағас кабат-кабат һорай үҙе.
Хәтерҙәр тар,— һүҙгә тамам төшөнмәгәс,
Яуап бирмәй карап тора нурһыҙ күҙе.

Иттән тошкән һөйәк, тамыр оҫкә калккан,
Арка сыккан, бил бөгөлөп, алға яткан.
Кәрәк ергә барам тиһә, аҙымдар вак,
Үксәләре алға баҫмай баш бармактан.

Атлап әкрен барһа ла ул кайҙа ғына,
Калтырауык керә башлай аяғына.
Бара торғас, тын кыҫылып, теҙ бөгөлгәс,
Туктайҙыр ҙа терәләлер таяғына.

Елберҙәгән етеп һакал, комош сәсе,
Һикһән бишкә еткән өсөн уның йәше.
Бер яктан да күңел асыр ер калмаған,
Әллә касан үлеп боткән күп йәштәше.

Карты кеүек, карсығы ла юйған косон,
Мәшәкәтле донъяла күп торған өсөн.
Артты артка терәп яткан аркаҙаштар
Кай вакытта тартышалар юрған өсөн.

## КАРТТАР ЗАРЫ

Атка менеп, алға эйелеп сапмак кайҙа,
Ауға сығып, ак куянды атмак кайҙа,
Тормошоңа кәрәк булған нәҫтәләрҙе
Үҙең өсөн үҙең эшләп тапмак кайҙа.
Тәүәккәлләп эш башларға йөрәк кайҙа,
Башлай калһаң, тамамларға беләк кайҙа,
Әҙәмдәргә артмакланған бер йөк булып
Был донъяла тороуыңда ниндәй файҙа?
Китте йәшлек, килде картлык, бөттө бәхет,
Йәшлек биреп, алмаҫ инем алтын тәхет,
Дәрттәр һүнгән, ләззәт, шатлык барыһы киткән,
Мәгәр китмәй хәтерҙәрҙән һалкын ләхет.

Әжәл тура караған ул, күҙен кереп,
Көндән-көнгә якынлаша миңә килеп.
Куркытырлык күҙҙәре ҙур, бик иләмһеҙ,
Калын булмаҫ алтын түгел, алмас биреп.

### ШАЯРЫШМАҠ

Егет һорай бөкрәйгән ҡарттан көлөп:
— Ни юғалттың, ни ҡарайһың юлдан эйелеп?
— Йәшлегемде юғалтҡанмын, табалмаймын,—
Алға китте аҡыллы ҡарт, яуап биреп.

— Күҙең зәғиф, йөҙөң һары, һаҡалың аҡ,
Тешең төшкән, косоң бөткән, аҙымдар ваҡ...
— Береһе лә мин эшләгән ғәйеп түгел,
Юҡ ғәйепте таҡма, егет, миңә нахаҡ.

## III. ТӨРЛӨ ЖАНРҘАН

### ҠАБАҠ МЕНӘН ҠАРАҒАЙ

*(Мәҫәл)*

Ҡарағайға үрмәләп тиҙ үҫте ҡабаҡ,
Иптәшенән уҙып китте оҙон һабаҡ.
«Өс ай үҫтем һинең ос йыл үҫкәнсеңдә» тип,
Ғорурланды ҡарағайға көлә ҡарап.

Йәш ҡарағай яуап бирә ҡырып тамаҡ:
«Маҡтанма,— ти,— үҫкән менән тура һабаҡ.
Ваҡыт еткәс, башлап төшкән һалҡын ҡырау
Һинең кеүек ғорурҙарға бирер һабаҡ».

### ӘЙТЕМДӘР

Ҡайғы, яҙғы ҡар һыуындай, йәш менән түгелеп бөтөр,
Бер йығлаһам да, бер көләрмен әллә, тип күңелең көтөр.
Тик ғүмер булһын оҙаҡҡа, әҙ ғүмер был тиҙ үтер,
Күрмәгәндәй ҙә булырһың, шат көноңоҙ ҙә бер етер.

***

Зарһыҙ кеше ҡыҙыу һөйләр, ҡулын бутап,
Зарлы булһа, йыуаш һөйләр, туҡтап-туҡтап.
Ошо донъя бер көлдөрһә, биш илата,
Эй уҡыусым, зарһыҙҙарҙы һин үҙең тап.

***

Ҡазалар әйләнә бәндә башында,
Берәүгә — ҡарт, берәүҙәргә йәшендә.
Сабырһыҙҙар кеүек һин булма аң-таң *
Ҡараңғы төн һуңында булды аҡ таң.
Сабырлы бәндә булмаҫ күңеле ташҡан,
Үтер был төш кеүек булып һаташҡан.

## ЙОМАҠТАР

1. Бер табышмаҡ яҙам әле, һынар өсөн
Ярышыусан йәштәрҙең шәп фекер көсөн.
Шаярғылап йомаҡ яҙып йыуаныуҙан
Бушанмаҫмы буш торғандан бошҡан эсем.

Төн йоҡомда мин ғәжәйеп бер төш күрҙем,
Төшөмдә бер ҙур һарайға барып керҙем.
Ун икеләп төрлө-төрлө матдәһе бар,
Һис бер шикһеҙ быны үҙем һанап белдем.

Стенаһы — ике йөҙләп бүрәнәнән,
Төрлө сорттан,— белмәҫ уны кералмаған.
Бәйләнеп нык беркетелгән бер-берһенә,—
Ябай бура кеүек итеп киртелмәгән.

Шкатурҙай ҡаты түгел быныңтышы,
Һарай булғас, йыһаз менән тулған эсе.
Тормошона кәрәк әсбаб * бары еткән,
Бер ерендә көн-төн бара сауҙа эше.

Мөдир тора хужа булып иң түрендә,
Бик күп хаҙим * хеҙмәт итә һәр ерендә.
Биш ҡараусы ялыҡмайса ҡараууллайҙар,—
Хеҙмәттәре башҡа төрлө һәр берендә.

Телеграмдар был һарайҙы солғап алған,
Табалмаҫһыҙ сыбыҡһыҙ ер асыҡ ҡалған.
Һәр ҡараусы белгәнен был сыбыҡ менән
Бик тиҙ генә мөдиренә хәбәр һалған.

Йөрөп күрҙем, йылғаһы күп ағып ятҡан,
Ғәжәпләндем, үрле-түбән нисек аҡҡан?
Был һарайҙың һәр яҡтарын һыулай-һыулай,
Башлап сыҡҡан шишмәһенә урап ҡайтҡан.

Түбә ябыу нисек тиһәң, юҡ таҡтаһы,
Инеү өсөн бар быныңтик бер ҡапҡаһы.
Сыҡҡан саҡта, ике юл бар: береһенән — һыу,
Бер юл менән көлөн түгә кухаркаһы.

Бәхет һанайым был һарайға кергәнемде,
Төрлө хикмәт, күп ғәжәптәр күргәнемде.
Беленмәгән серҙәре күп, һаман ҡалды,
Яҙҙым бында тик үҙемдең белгәнемде.



Был йомаҡты тикшер бирел күңел күҙен.
Табалмаһаң, әйтәм инде уны үҙем:
Был тән тигән буш һарайға йәнең нигеҙ,
Миҫал булдың табышмаҡҡа тамам үҙең [11].

2. Ишетмәйҙер, күрмәйҙер,
Эт түгел ул — өрмәйҙер.
Ул бар саҡта, шул ергә
Һис бер кеше кермәйҙер [12].

3. Берәү тапҡан ун ике улыл, һис зәхмәтһеҙ,
Ашамайса үҫә улар, мәшәҡәтһеҙ.
Ун икенән туғыҙы бар — мөһорбанлы,
Өсәүһе бар — яуыз туған һәм шәфҡәтһеҙ [13].

# ҒИНДУЛЛА УСМАНОВ

## ӘКИӘТТӘР

### АЛТЫН КҮГӘРСЕН

*(Ике туған ағай-энеләр Ғиҙай * менән һаран бай*
*һәм Ғиҙай улы йәш бадиша менән батша ҡыҙы*
*Хуризадә хикәйәте)*

Әҙәбиәт, мәдәниәт һәм сәнәғәт *,
Ғилем, һөнәр мираҫ булып ҡала килгән,
Ҡөндән-көн үҫтергәндәр, тоҙәткәндәр,
Йыя килеп ишеткән һәм күргән ерҙән.

Күп мең йылдар үтеп киткән замандарҙа
Әкиәттәр һөйләнгәндәр хыял менән,
Ҡай береһендә урын алған ҙур батшалар,
Таҙға ҡыҙын биргән батша күп мал менән.

Әкиәттең батырҙары диңгеҙ кискән,
Ҡай берәүһе бер күҙгөнән донъя күргән,
Ҡай берһенә табылған, ти, шундай балаҫ,
Ултырған да алыҫ ергә осоп киткән.

Ҡай берҙәре һатып алған шундай алма,
Терелдергән, шифа булған үлгән йәнгә.
Ҡай берәүһе алған абаға сәскәһен,—
Бер кешегә күренмәгән йоротоп янда.

Булған алтын һандуғасы, күгәрсене,
Һандуғастың башын ашап булған батша;
Күгәрсендең йөрәк-бауырын ашағандың
Аҫтынан бер алтын сыҡҡан, йоклап торһа.

Ғибрәт бар күгәрсендә, әкиәттә
Хыянат һәм консөлөктө ярып һалған;
Ул заманда булмаған бит уҡыу китап,
Әкиәт тыңлап, бик күп халыҡ ғибрәт алған.

Һүҙ уңайы килгән саҡта һөйләп үтәм
«Алтын күгәрсен» ғибрәтле әкиәтен.
Ярлыһын — бай, байын ярлы яһармын мин:
Булған ҡыҙығы шунда инде әкиәттең.



***

Борон-борон замандарҙа тип башлана
Һәр бер әкиәттең башлап һөйләнеше.
Борон-борон замандарҙа бер туғандар
Ер йөҙөндә көн иткән, ти, ике кеше.

Кесерәге бай булған, ти, Ҡарун [1] кеүек,
Хеҙмәтсеһе булған, ти, йөҙ етмешләп.
Ҙур ағаһы фәҡир булған, хыянатһыҙ,
Көн кисергән энеһенең эшен эшләп.

Һәр көн барған ҡустыһының урманына,
Арҡаһында йөкмәп ҡайтҡан сыбыҡ киҫеп.
Сыбығынан бәйләгән ул бик күп метла *,
Кәрәк өсөн юкәһенән ептәр ишеп.

Асын-туғын белдермәгән меҫкен Ғиҙай,
Йөрөгән ул эсен бәйләп, тешен тешләп;
Ашатһалар, тәүлеккә бер ашаған, ти,
Арып-талып, тирләп-бешеп, көн-төн эшләп.

Баш күтәрмәй эшләһә лә Ғиҙай шулай,
Әрләгән, ти, ҡустыһы уны ялҡау тиеп.
«Һин һөнәрһеҙ, тик ятыуҙы яратаһың,
Һеҙ — келәнсе *, һеҙгә әрәм ашау», тиеп.

Бер заманда Ғиҙай ағай йәмле көндә
Ҡустыһының урманына барған икән,
Йырлап-илап, моң-зар менән йөргәнендә,
Алтын йөнлө күгәрсендәй бер ҡош күргән.

Хайран ҡалып ҡарап торған Ғиҙай ағай:
Бындай ҡошто күргәне юҡ был донъяла.
Осоп китеп, теге ҡошсоҡ барып ҡунған
Шунда ағас башындағы бер ояға.

Уйлай Ғиҙай: «Тотоп алһам, ти, шул ҡошто,
Бирһәм уны, ҡуйһа энем һарайына,
Ниндәй матур булыр ине энем өсөн,
Ҡунаҡ килгәс, гөрләп торһа һарайында».

Сыбыҡ киҫте, миндек осон — ҡайын япраҡ,
Ҡайтып китте арҡаһына барып йөкмәп.
Урмандағы күргән алтын күгәрсенде
Барыһын да энеһенә һөйләй ипләп.

Бай энеһе әйтә фәҡир ағаһына:
«Алтын ҡошто һин килтереп бирһәң миңә,

Байытырмын мин һине, ти, мохтаж итмәм,
Ғүмерлеккә етәрлек мал бирәм һиңә».

Иртән торол китте Гиҙай урманына,
Алтын коштоң ояһыны эҙләп тапты,
Ояһында ултырамы, ситтәме тип,
Белер өсөн бер урындан ҡарап ятты.

Осоп килеп ул ҡош ҡунды бер ағасҡа,
Аулаҡ ерҙән ҡарап Гиҙай уны күрҙе.
Күп торманы ҡағынғылап һелкенде лә
Күгәрсен дә ояһына килеп керҙе.

Һаҡлыҡ менән менде Гиҙай шул ағасҡа,
Әкрен генә ботаҡтарға баҫа-баҫа;
Алып барған ине, янда селтәр япма,
Менеп еткәс, ояһына һалды аша.

Имгәтмәйсә иплән кенә тошто түбән,
Ҡуйынындағы күгәрсенде алды ҡулға.
Ҡотолдом, тип, был донъяла фәҡирлектән,
Байыу дәрте менән Гиҙай тоште юлға.

Ҡайтып етеп һаран байҙың һарайына
Ҡурҡа-ҡурҡа әкрен генә килеп керҙе,
«Бына, туған, теге ҡошто тоттом»,— тиеп,
Күгәрсенде ҡуйынынан алып бирҙе.

Ҡошто алып бер ситлеккә ябып ҡуйҙы,
Ваҡыт етте хәҙер коштоң баһаһына.
Иҫке сәкмән, ике һарыҡ, йөҙ һум аҡса,
Бер иҫке тун алып бирҙе ағаһына.

Өҫтөм-башым бөтәйҙе, тип меҫкен Гиҙай
Иҫке сәкмән, ҡатҡан тунды йыйып алды;
Кеҫәһенә ун һум түгел — йөҙ һумды ул
Ҡыҫтырҙатып торол алып юлға һалды.

Гиҙай киткәс, күгәрсенде ҡулға алды,
Бер уң яҡтан, бер һул яҡтан ҡарап торҙо.
Ҡанатын күтәргәйне уң яғынан,
Алтын менән яҙылған бер яҙыу күрҙе.

«Кем ашаһа, тигән, быныӊ йөрәк, бауырын,
Һәр көн торғас урынынан табыр алтын.
Һүҙе өҫтөн булыр, тигән, ил ҡаршында,
Үҙенә ул баш эйҙерер ғилем халҡын».

Ул һаран бай ҡомһоҙланып ҡошто һуйҙы,
Йөрәк-бауырын иплән кенә алып ҡуйҙы;



Бирҙе барын бешерергә ҡатынына,
Жаркуй * өсөн бер һауытка һалып ҡуйҙы.

Иттәрен киҫәк-киҫәк ҡуйҙы тураһ,
Ҡатыны китте ҡайҙалыр йомош менән.
Ике улы булған икән Гиҙай ҡарттың,
Ҡатын сыҡкас, улар өйгә килеп кергән.

Бер кеше юҡ, кухня эсе булған аулаҡ,
Таба ҡайнай, май эсендә ит тә бешкән.
Кеше бәхетен кеше алалмай көслөк менән,
Таба шартлап, йөрәк, бауыр ситкә төшкән.

Итте сәйнәп йотҡан саҡта, кергән ҡатын,
«Ни ашайһыҙ?» — тип һораған балаларҙан.
«Жаровниктән шартлап төшкән ит киҫәген
Алып ҡаптыҡ»,— тигәндәр, ти, балалар ҙа.

Ни эшләһен белмәйенсә, ҡурҡып ҡатын
Бик тиҙ генә тотоп алып тауыҡ һуйған;
Йөрәк-бауырын ала һалып, йәһәт ҡурып,
Алтын коштоң ите менән бергә ҡуйған.

Һаран бай ҙа ҡайтты йортка кис ашарға,
«Ҡайҙа миңә ҡош иттәрен килтер,— тине,—
Бер киҫәген ҡаба күрмә минән башҡа,
Булғанын миңә һалып бөтөр»,— тине.

Ҡатын ҡуйҙы барыһын да ир алдына.
Ашаны ул йөрәк, бауырын — барсаһын да,
Һөйәген дә бирмәне ул ҡатынына,
Ашап бөттө бик ҡескенә ҡалъяһын да.

Йоҡо алмай, һаман уйҙа алтын ғына...
Һаран бай ырғып торҙо таң атҡас та.
Торҙо ла ул әй һәрмәнеп урынын ҡарай,
«Ҡайҙа икән?» — тип эҙләй алтын аҡса.

Бер көн үтә, аҙна үтә, ун көн үтә.
«Был ниндәй эш? Ерле юҡка алдандым!» — ти.
Ике һарыҡ, йөҙ һум аҡса, тун, сәкмәнгә...
«Әлек һынап ҡарамайса, отолдом»,— ти.

Был бай торһон, алтын өсөн хәсрәтләнеп,—
Беҙ барайыҡ Гиҙай ағайҙың йортона.
Балалары йөрәк, бауыр ашап ҡайтҡас,
Ни булды икән ул бисараның йортонда?

7 Заказ 144

Әсәләре балаларҙың аҫтарына
Иҫке бишмәт йәйҙе ҡистән яткан сакта;
Балалары иртән торғас урынынан,
Ике алтын төштө бишмәт ҡаккан сакта.

Балаларҙы әрләнеләр бик ҡурҡышып,
«Был алтынды урланығыҙ ҡайҙан? — тиеп.
Әллә үҙе өйҙә булмаған ваҡытта,
Алдығыҙмы минең туған байҙан?», — тиеп.

Һәр көн шулай: аҙна үтә, ун көн үтә,
Иртән торғас, аҫтарында алтын була.
Ике алтын һәр көн һайын — әҙ түгел бит!
Хәҙер инде бер кесерәк янсыҡ тула.

Ғәжәпләнде меҫкен Гиҙай, был ни эш, ти,
Ҡатынына нишләйбеҙ тип кәңәш итә.
Иртән тороп янсығын ҡулға ала ла,
Һаран байға һөйләр өсөн сығып китә.

«Бына, туған, һиңә килдем кәңәш менән.
Ни әйтһәң дә, һинең һүҙҙе тотормон,— ти.
Был көндәрҙә беҙҙә булды бер ғәжәп эш,
Яҡшы булмаҫ ул эштән мин ҡурҡамын,— ти.

Балаларҙың аҫтарына һәр көн кистән,
Яткан сакта, иҫке бишмәт йәйә ҡатын;
Иртән тороп ҡулға алһаң шул бишмәтте,
Шалтырҙашып һәр көн төшә ике алтын.

Бына, туған, алып килдем күрһәтергә,
Тула инде алтын менән ошо янсыҡ.
Башың китер, ҡайҙа инер ер тапмаҫһың,
Шулай булһа, тулар алтын бер ҙур ҡапсыҡ».

Мәсьәләне һиҙеп алды һаран бай ҙа
Ағаһының йөҙгәнен белә һайҙа.
«Был алтындың аҙағы, ти, булыр хәсрәт,
Яҡшы түгел, ти, унан һин көтмә файҙа.

Беләһеңме, ағай, һинең улдарыңа...
Ҡурҡыныс эш... Уларға ен эйәләшкән!
Үҫеп етеп ҡеүәтләнгәс, еңеп булмаҫ,
Сараһын күреү кәрәк кесе йәштән.

Алып барып сит ергәрәк ҙур урманға,
Кәрәк шунда аҙаштырып ҡалдырырға;
Эйәләшкән ендәр эҙләп килмәҫ өсөн,
Алтындарҙы кәрәк утта яндырырға».





Эштең нисек булғанын белер өсөн,
Гиҙай киткәс һораштыы ул бик ентекләп.
Ҡатыны ла ике бала ашағанды
Алдаманы, иренә һөйләне иҙләп.

«Килеп кереп ике бала, үҙем юкта,
Ашағандар, мин күрмәйсә ҡалдым, тине.
Һиңә әйтергә ҡурҡыуымдан тауыҡ һуйып,
Жаркуй яһап, йөрәк, бауырын һалдым»,— тине.

Ул һаран бай торһон әле ыҙбаһында *
Йөрәк-бауыр, алтын өсөн хәсрәт сигеп.
Балаларҙы юлға алып китә Гиҙай,
Һаран байҙан һорап алып бер ат егеп.

Китте улар ике тәүлек урман менән,
Бер аҡланға барып атты туктатты ул,
Иртән тороп китербеҙ, тип, көн яктырғас,
Бер урында балаларын йоҡлатты ул.

Ҡосаҡлашып ике бала бер урында,
Йоҡланылар, бисаралар, арып килеп;
Балаларҙың татлы йоҡо ваҡытында,
Аталары ҡайтып китте атын егеп.

Йоҡо туйып, иртән торғас ике бала
Аталарын бер-береһенән һораштылар;
Йәш балалар ҡайҙа барыр ерҙе белмәй,
Ҡосаҡлашып арығансы илаштылар.

Былар тора, ярамаҫ, тип ике бала
Бер юл табып атланылар алға табан.
Бер көн, бер төн киткәс улар, югерә-атлай,
Барып керҙе баҡса эсенә юл бер заман.

Баҡса хозур, гөлдәр үҫкән, һыуҙар аға,
Былбыл һайрай, хуш еҫ аңҡый, емеш бешкән.
Күҙ күреүгә күңелдәргә бирә шатлыҡ,
Әйтерһең дә, нур бөркөлә һәр бер төштән.

Бер ҡалҡыу ер күрҙе улар — кескенә тау,
Һөйләштеләр, әйҙә, шунда барайыҡ тип,
Күренмәҫме яҡын ерҙә ауыл, ил-көн,
Менеп, шул тауҙың өҫтөнән ҡарайыҡ, тип.

Йыбанмайса ике бала тауға табан
Ҡуҙғалдылар, ҡурҡыу менән шәп-шәп атлап;
Тауға барып еткән сакта, ишек асып,
Тау эсенән аҡ һакаллы сыкты бер ҡарт.

«Хуш киләһеҙ, әйҙәгеҙ, тип, йәш ҡунаҡтар,—
Көлөп ҡаршы алды бабай балаларҙы.—
Иҫән-аман еттегеҙме бында килеп,
Гиҙеп урман, сағыл, сәхрә, далаларҙы?»

«Ҡарынығыҙ астыр?» — тине балаларға,
Тау эсенә алып керҙе һөйә-һөйә.
Оло һарай мәрмәр таштан тау эсендә,
Эстенаһы төрлө төҫтә шәүлә бирә.

«Ҡурыҡмағыҙ һис бер бында, уландарым,
Минең ҡулда һеҙ үҫкәнсе йәшәрһегеҙ.
Уҡытырмын, ғилем-һөнәр өйрәтермен,
Емеш-еләк теләгәнсә ашарһығыҙ».

Тәрбиәләп быларҙың күңелен асты,
Ул шәфҡәтле ата кеүек һөйөндөрҙө,
Өйрәтте ул низам *-тәртип, культураға,
Өҫтәренә ебәк-атлас кейендерҙе.

Дәрес бирҙе балаларға аң-белемдән,
Төрлө һөнәр, хәрби ғилем, уҡ атырға,
Баҡса ҡарау, иген сәсеү, сауҙа итеү,
Тапҡан малдың ҡәҙерен белеп ныҡ тоторға.

Бабай һаман тәрбиәләй балаларҙы.
Ғилем-һөнәр алды улар, биш йыл торҙо,
Батша улы тиер һәр кем, күрһә уларҙы,
Буйға үҫеп етте улар, егет булды.

Һәр ваҡытта ҡарт уларға яҡшы ҡарап
Шатландыра, күңелдәрен йыуата ул,
Алып сыға сәхрәләргә ҡош атырға,
Хәрби һөнәр — төрлө уйын уйната ул.

Бер заманда алып сыҡты егеттәрҙе
Киң далала бер аҙ күңел асыр өсөн:
Һынап ҡарай ул төрлөсә балаларҙы,
Кәрәк ерҙә уҡты мәргән атыр өсөн.

Бабай күреп алды бер өйөр ҡыр ҡаҙын,
«Күрәһеңме шул ҡаҙҙарҙы? — ти улына.—
Төҙә,— ти,— һин йә алдан икенсе ҡаҙға,
Төшөр атып, мылтығың тот та ҡулыңа».

Бабай ҡушҡан ҡаҙға атты мылтығынан,
Ҡаҙ ҙа төштө әйләнгеләп ергә табан.
Ҡарт бабай ҙа «афарин» ти ҙур улына:
«Хәҙер һинең был һөнәрең булған тамам».



Тегеһенә ҡушты арттан өсөнсөһөн
Мылтыҡ менән тура атып төшөрөргә.
Ул егет тә атты бабай ҡушҡан ҡаҙға,
Өсөнсө ҡаҙ килде төштө торған ергә.

Ҡаҙҙы алып ҡайтты улар торлаҡ йортҡа,
Бабай әйтә: «Ғилем-һөнәр бирҙем тамам.
Һеҙҙе оҙатам ил эсендә эш эшләргә,
Хәҙер һеҙгә етте,— тине,— китәр заман».

Икеһенә ике мылтыҡ бирҙе бабай,
Тағы бирҙе көмөш һаплы алмас ҡылыс,
Ҡорос бысаҡ бирҙе — икеһенә берҙе,
«Ныҡ һаҡлағыҙ, һеҙгә, тип, юҡ ҡурҡыныс».

Икеһенә бирҙе ике ҡара ҡамсы,
«Бер заманда осрар, тип, ен ҡарсығы.
Алдап илап һөйләүенә ышанмағыҙ,
Һуғығыҙ, тип, һис ҡыҙғанмай арҡаһына.

Боронғонан ҡала килгән бер мәҡәл бар:
Ике ҡуйҙың башы бешмәй бер ҡаҙанда.
Ғүмер буйы икәү бергә йөрөмәҫһеҙ,
Айырылырға тура килер бер заманда.

Шул бысаҡты диңгеҙ буйы бер ағасҡа
Яртыһына еткергәнсе ҡаҙарһығыҙ.
Бер-берегеҙҙең хәлен беләһегеҙ килһә,
Эҙләп килеп, шул бысаҡты ҡарарһығыҙ.

Үлгән булһа берегеҙ, бысаҡ булыр ҡара.
Әгәр булһа ул бысаҡта тут әҙерәк
(Уны булһа ологоҙға, һулы — йәшкә),
Баҫҡан булыр уны ҡаза йә хәсрәт».

Бабай менән һаубуллашып китте улар,
Икеһе лә әйәрләнгән атты менеп;
Бер йыл бергә йөрөнөләр улар икәү,
Ауыл, ҡала, ҙур ғибрәтле ерҙәр күреп.

Бер далала осораны бер аҡ ҡуян,
Уғын алды ҡустыһы атайым тип,
Телгә килде шул сағында ап-аҡ ҡуян,
Атма мине, мин файҙаға ярайым, тип.

«Эйәртегеҙ үҙегеҙҙең янға алып,
Бүләк итеп бирәм,— тине,— ике бала.
— Ҡуян беҙгә ниңә кәрәк? — тип әйтмәгеҙ,
Шөбһәһе юҡ, итер файҙа был донъяла».

Ҡуяндан һуң төлкө осрап телгә килде,
Ҡуян кеүек ул да ике бала бирҙе;
Бүре — ике, айыу ике бала биреп,
Тағы улар эйәрттеләр ике филде.

Батыр егеттәр төҙәгәс мылтыҡтарын,
Икеһенә ике бала бирҙе арыҫлан.
Бер кесерәк көтөү булды кейек-януар,
Ике бала эйәрттеләр юлбарыҫтан.

Бер ваҡытта диңгеҙ буйы сәфәрендә
Туҡтап улар бер аҙыраҡ кәңәшләште:
Бер-береһенән айырылышырға ошо ерҙә,
Аҙ-маҙ ғына түгеп күҙҙән ҡайнар йәште.

Ҡорос бысаҡты ағасҡа ҡаҙанылар,
Иҫән булһаҡ, бер ваҡытта килербеҙ тип,
Бер-беребеҙҙең иҫән-аман йөрөгәнен
Шул бысаҡтан күреп ҡарап белербеҙ, тип.

Ағай-егет китте ҡибла юлға ҡарап,
Диңгеҙ буйлап үтте сәхрә далаларҙы,
Үтте тауҙар, ҙур соҡорҙар һәм урмандар,
Йылан-саян күрҙе, ғәжәп ҡалаларҙы.

Киткән кеше бара торһон үҙ юлынан,
Беҙ киләбеҙ кесе егет тарафына.
Ағаһынан айырылғас, ҡусты-егет
Юл тотто атын менеп көнбайышҡа.

Күп ваҡыттар сәфәр йөрөп йәш егет тә
Бер заманда барып инде бер шәһәргә.
Эленгән ҡара флаг ҡапҡа һайын,—
Бер ҙур хәсрәт барын белде был шәһәрҙә.

Йәнлектәрен эйәртеп ул үҙе менән
Бер хужаңан фатир һорап инде йортҡа.
Йәнлектәрен бикләне лә, атын бәйләп,
Өйгә инһә, ултыралар ҡарт һәм ҡортҡа.

Егет ашап хушландырҙы үҙ ҡарынын,
Ашатты ул һәм эсерҙе йәнлектәрен.
Ҡарт һәм ҡарсыҡ, теймәйҙәрме, тип һорағас,
Әйтте егет: «Өйрәтелгән йәнлектәрем».

Һүҙ уңайы килгән сакта һорап алды
Ҡара флаг эленеүҙең сәбәптәрен.
Бабай әйтте: «Батша ҡыҙын аждаһаға
Илтер өсөн ҡалды бары сәғәт ярым».



Бабай һөйләй: «Ете башлы бер аждаһа
Йыл да килеп күл буйынан бер ҡыҙ ала.
Бирә торғас, ҡыҙҙар бөттө ҡалабыҙҙа,
Батша ҡыҙына сыкты быйыл шыбаға ла.

Күл буйында һалып ҡуйған бер ыҙба бар,
Ҡыҙҙы илтеп ҡуйҙылар ҙа шунда кистән;
Гөн кисерә бисара ҡыҙ хәсрәт менән,
Йылан килеп икенсе көн ала иртән».

Бик тиҙ генә егет эште уйлап алды,
Һайға түгел, ҡармағын ул тәрән һалды.
Көн кисләгәс, сәфәр сыкты күл буйына,
Йәнлектәрен үҙе менән бергә алды.

Кистән барып, егет ҡыҙҙы күрҙе инде:
Ҡара ҡашлы, ынйы тешле, нурлы йөҙө.
Аты ла бит хур ҡыҙы — Хуризадә *,
Дәртҡә — дарман, сиргә — дарыу һөйләр һүҙе.

Ҡыҙҙы күргәс, йәне әрнеп, әйтте егет:
«Көрәшәм, тип, яуыз мәлғүн йылан менән;
Ижтиһадһыҙ * был донъяла булмай бер эш,
Ҡаза ҡурҡып ҡасмай аҡырып илау менән».

Төн ҡундылар, ике гүзәл серләштеләр,
Һандуғас һәм күгәрсендәй гөрләштеләр.
Таңда киләсәк яҙмышты еңер өсөн,
Кәңәшләшеп төрлө һүҙҙәр һөйләштеләр.

Иртән торғас, ҡупты дауыл, ҡом бураны,
Өй эсендә егет тора ҡылыс тотоп;
Күк күкрәгән кеүек, килә гөрләү тауышы,
Аҙаҡ минут тиеп тора ҡыҙ, ут йотоп.

Ете башлы йылан килде өй ҡырына,
Ҡойроҡ менән ыҙбаны ул урап алды.
Алмас ҡылыс тотоп сығып батыр егет
Аждаһаның ете башын тураП һалды.

Һөйләү еңел — ғәмәлдә ул күп алышты,
Ете баштан ете телде киҫеп алды;
Батша ҡыҙы бирҙе уға ебәк яулыҡ,
Ете телде шуға төрөп янға һалды.

Хуризадә шатлығынан тик тиҙ генә
Сисеп алды муйынындағы гәрәбәһен,
Сәс үреме толомонан ебәк алып,
Йәнлектәргә тағып сыкты бер-бер мәрйен.

Арып-алйып батыр егет көрәш менән
Күл ситенә сығып ятты хәл алырға;
Ул йоклағас, дошман һөжүм итмәҫ өсөн,
Йәнлектәрен ҡуйҙы шунда ҡарауылға.

Йоҡо баҫып, йоклап китте арыҫлан кейек,
Юлбарыҫҡа ҡушты ла, ти, йоклама тип;
Юлбарыҫ, фил, айыу, бүре, толкө, ҡуян —
Күҙ йомолоп, йокланы, ти, булған кейек.

Шул сағында килгән икән бер йәш вәзир,
Ҡыҙҙың хәлен бында килеп белер өсөн,
Батша ҡыҙын ете башлы йылан алғас,
Ни булғанын күҙе менән күрер өсөн.

Күл буйына килгәс вәзир ҡарап тора:
Арыҫлан, ҡаплан, фил, айыу, егет ята;
Ете башлы йылан шунда тураҡланған,
Ә ҡыҙ иҫән! Вәзир күрә лә шаҡ ҡата.

Һорашты ла ҡыҙҙан бында ни булғанын,
Кем ҡотҡарған, йыланды кем үлтергәнен.
Хуризадә йәшермәне, һөйләп бирҙе,
Егет килеп, аждаһаны үлтергәнен.

Вәғәҙә биргән ине батша ил алдында:
«Булһа әгәр ҡотҡарыусы ҡыҙымды,
Бирәм уға, ер-һыуыма хужа яһап,
Батшалыкты, мөлкәтемде һәм ҡыҙымды».

Төштө вәзир батша булыу хыялына.
Күл буйында батыр егет тыныс ята.
Яман фекер — теге хыял ялҡынлана,
Вәзир килеп муйынына ҡылыс һала.

Ҡурҡытты ул батша ҡыҙын үлтерәм тип,
Ни булғанды өйгә ҡайтҡас һөйләмә тип.
— Атаң һорар, һин әйтерһең: «Ҡотҡарҙы,— тип,—
Аждаһанан, атай, мине вәзир килеп».

Алып ҡайтҡас үҙе менән ҡыҙҙы, вәзир
Батшаға әйтте, мин йыланды үлтерҙем, тип,
Бынан ары беҙҙең илдә булмаҫ хәсрәт,
Бөтә илгә ҡурҡынысты бөтөрҙөм, тип.

Батша риза эштең былай булғанына,
«Вәғәҙәгә торамын,— ти,— һис юк һүҙем.
Мин — атамын, тәрбиәһе минең өҫтә,—
Үҙе хужа, нимә тиер минең ҡыҙым.



Һүҙ һалдылар ҡыҙға барып туй хаҡында,
Хуризадә риза икән, тик шарт ҡуя:
«Атайым, ти, миһләт * бирһен ҡырҡ көнгә,
Шул көндән һуң туй яһалыр шатлыҡ берлә.

Сәбәп шул, ти: яңғыҙ ҡалғас күл буйында,
Ант иттем мин ҡырҡ көнгә ас торорға,
Иҫән-аман ҡотолһам тип аждаһанан,
Ураҙа тотоп, көн-төн ғибаҙәт ҡылырға».

Батша ҡыҙы Хуризадә тыныс ҡына
Ураҙа тотһон йә ҡырҡ көн ул ас торһон.
Беҙ китәбеҙ батыр егет бәйләүәнгә,
Ә йәш вәзир туй килерен көтөп ятһын.

Бер заманда торҙо арыҫлан йоҡоһонан,
Батыр егет һуйылғанын бик тиҙ күрҙе,
Ни эшләргә белмәйенсә ерҙе тырнап,
Асыу менән ер тетрәтеп бер үкерҙе.

Бөтә булған йәнлек уянды ла ырғып торҙо,
«Ни булды?»— тип иҫнәштеләр, ыңраштылар.
«Ник йокланың?»— тиеп улар бер-берһенә,
Хужаларын ҡыҙғаныуҙан ыҙғыштылар.

Тәфтиш иткәс, иң һуңынан йоҡлаусыһы
Ҡуян булды, бөтә бәлә төштө уға.
«Ник йокланың уятмайынса беҙҙе?»— тип,
Барлыҡ януар һөжүм итте тик ҡуянға.

Хөкөм булды аҡ ҡуянды үлтерергә,
Бирмәйенсә бер минут та тын алырға.
Әгәр ҡуян таба икән әжәл дарыу,
Ул сағында аҡ ҡуянды — ҡотҡарырға!

Сапты ҡуян әжәл дарманын эҙләп,
Тау-таштарға, урмандарға һәм болонға.
Уның менән толкопо лә ебәрҙеләр,
Ҡуян алдап ҡасмаһын, тип контролгә.

Йәрәхәткә дарыу булған япраҡты
Тапты ҡуян ҙур болондан эҙләп.
Үлгәндәрҙе терелтер ҡыҙыл алма
Тау битендә бер ағастан алды өҙөп.

Ҡайтты ҡуян шатлыҡ менән иптәштәргә.
«Беҙҙең хужа терелер!»— тип шатландылар;
Япраҡты йәрәхәткә бәйләп ҡуйып,
Әҙ-әҙ генә алманы ла ҡаптырҙылар.

Бер аҙ торғас, күҙ асылды, йөҙ нурланды,
Тын алышы — йоҡлап ятҡан кеше кеүек.
Бер сәғәт тә үтмәгәндер, һушын йыйып,
Торҙо-ултырҙы ҡыуандырып беҙҙең егет.

Ултырғас та күкрәгендә күрҙе ҡанды,
Муйыны бәйле, ғәжәпләнде: «Был ни?»— тине.
Баштан үткән хәлде түкмәй-сәсмәй генә,
Телгә килеп, арыҫлан-кейек һөйләп бирҙе.

Иҫкә зирәк бүреһенә ҡуша егет:
«Эйәрләгән атымды һин эҙләп тап,— ти,—
Ауға сығабыҙ,— ти, күмәгебеҙ бергә,
Оҙаҡ йөрөмә, тап та борол, тиҙ ҡайт»,— ти.

Үтмәгәндер биш минут та, бүре менән
Аҡ арғымаҡ икәүләшеп ҡайтып етте.
Йәнлектәрен эйәртте лә, атын менеп,
Беҙҙең егет, һунарға тип, сығып китте.

Бер ай ваҡыт уҙҙырҙы ул шул китеүҙән,
Күп илдәрҙе күрҙе тағы был сәфәрҙә,
Күп һөнәрҙәр күрһәтте ул ил халкына,
Тағы ҡайтып килеп керҙе шул шәһәргә.

Күрә егет, урам тулған аҡ флагка,
Бында хәҙер шатлыҡ барын егет белде,
Әлеккеге фатиренә — бабайҙарға
Йәнлектәре менән егет ҡайтып керҙе.
Һорашты ул тағы хужа бабаһынан:
«Аҡ флагтар ник эленгән урамға?» — тип.
Бабай әйтте:
«Аждаһаны үлтергән дә бер йәш вәзир
Ҡыҙҙы иҫән алып ҡайтҡан. Шуңарға»,— тип.
Егет ҡыҙға бер хат яҙып конвертланы,
«Илтеп бир»,— тип тоттор҆о уны аҡ ҡуянға.
Ҡуян сапты һис кемгә лә күренмәйсә,
Илтеп бирҙе хатты ҡыҙға шыпырт ҡына.

Хатты асты, уҡып белде батша ҡыҙы
Ҡотҡарыусы егетенең иҫәнлеген.
Яуап яҙып, бирҙе уны шул ҡуянға,
Тапшыр, тиеп, егетемә сәләмемде.

Шулай улар ун көн буйы хат алышты,
Нығыттылар сер йәшереп үҙ-араны.
Инде ҡырҡ көн дә үтте, былар тапты
Туй көнөндә күрештерер ҙур сараны.



Булған халыҡ туй шатлығын күрер өсөн
Урам-урам теҙелделәр ҙур һарайға.
«Аждаһаны мин үлтерҙем, батша булам»,—
Тип йөрөй, ти, бандит вәзир шул һарайҙа.

Атаһына ҡыҙ әйткән, ти: «Беҙҙең илдә
Ситтән килгән бер кеше бар, фәлән ерҙә;
Арыҫлан, ҡаплан, фил, айыу, бүре, төлкө —
Төрлө һөнәр уйната, ти, сығып илгә.

Алдырығыҙ шул әҙәмде был мәжлескә,
Булған йәнлектәрен алып килһен бында.
Бөтә шәһәр халкы күргән ҙур шатлыкты,
Урын етер, беҙгә килеп күрһен ул да».

Алдырҙылар ул егетте ҙур һарайға;
Уйын ҡороп күрер өсөн туй шатлығын,
Егет менән ҡыҙ электән яйлап ҡуйған
Белдерергә ил ҡаршында эш хаҡлығын.

Егет килде ҙур һарайға, ҡунаҡ булды,
Үҙе менән йәнлектәр ҙә килде бергә;
Батша ҡыҙы ҡаршыһында сыкты ҡояш,
Шатлыҡ менән үҙ кешеһен алды түргә.

Булған йәнлек бер урында тәртип менән
Башын ҡуйып ятҡан алғы аяғына.
Егет менән ҡыҙҙа хәҙер серле ҡараш,
Былбыл ҡуна хәҙер гөлдөң тармағына.

Ҡыҙ һыйпаны йәнлектәрҙең баштарынан,
Ҡараны ул үҙе таҡҡан гәрәбәһен;
Ҡойроҡтарын һелкеп тора улар бар ҙа,
Арҡаһынан һөйөп сыкты ҡыҙ һәммәһен.

Күп уйындар күрһәттеләр был йәнлектәр,
Бер(е)һе — ғибрәт, бер(е)һе — шатлыҡ, бер(е)һе — көлкө.
Һәр бер(е)һенең махсус уйыны бар үҙенә,
Барыһынан арттырҙы бит шаян төлкө.

Алды егет һөйгәненән тәхсин * бүләк:
«Йәшә, егет, ғүмерең оҙон булһын,— тине,—
Ғүмереңдә бер ҙур илгә батша булып,
Батша ҡыҙы һинең менән торһон»,— тине.

Был һүҙҙәргә йәш вәзирҙең кәйефе китте:
«Бик ҙур һөнәрме ни — айыу бейетеү?
Бына һөнәр шулай булһын, егет булғас,
Ете башлы аждаһаның башын киҫеү!»